✔ *Хакимдарығыҙ миһырбанлы, байҙарығыҙ йомарт, эштәрегеҙ кәңәшле булһа, һеҙгә ер ҡуйынында түгел, ер йөҙөндә йәшәү хәйерлерәк; хакимдарығыҙ яуыз, байҙарығыҙ һаран, эштәрегеҙ ҡатындарығыҙ тирәһендә барһа, ер йөҙөндә йәшәүгә ҡарағанда, ер ҡуйыны һеҙгә хәйерлерәк булыр.*

*ХӘҘИСТӘРҘӘН.*


# Кискe Өфө

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

10 йыл

8 - 14 ДЕКАБРЬ (АҠЪЮЛАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№49 (519)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һәр яҡтан да өлгө төбәк -**
ЮНЕСКО баһаһы шундай



5

**Йәштәр үҙҙәре беләме?**
Белмәй. Белгертә йөрөйөк!



6

**Башҡортостан автономияһы...**
заман юҫығынан ҡарағанда



7

**Алмалар һәм балаҡайҙар...**
ағасынан алыҫ төшмәй



12

14 **ТВ-программа**


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Илдең Төп законын - Конституцияны беләһегеҙме?

***Әслә̆м АРЫҪЛАНОВ, хеҙмәт ветераны:*** Конституцияны беләбеҙ ҙә ул... Белеү менәнме? Унда яҙылғандар һис һүҙһеҙ үтәлергә, тормошобоҙ ҡанунына әүерелергә тейеш. Конституция алдында "түбәндәгеләр" ҙә, "юғарылағылар" ҙа бер тигеҙ кимәлдә яуаплылыҡ тоторға бурыслы. Ә асылда нисек килеп сыға һуң? Тормош ағышы бөтөнләй башҡаса: сәйәсәт, юғары даирәләге етәкселәр һәм чиновниктар ваҡиғалар айышын үҙҙәренә кәрәккәнсә бороп ебәреүгә, законды һанламауға ла күп һорамай. Шуға күрә лә халыҡ уларға ла, аҡҡа ҡара менән яҙылғанға ла ышанмай башлай, битарафлыҡ тойғоһо барлыҡҡа килә. Әле күптән түгелге, республикабыҙҙың беҙ танып-белгән Конституцияһының ниндәй үҙгәрештәргә дусар ителеүе лә бит күп нәмә тураһында һөйләй. Әлбиттә, тормош бер көйө генә тормай, беҙ теләйбеҙме, юҡмы, үҙгәрештәр мотлаҡ булырға тейеш, ләкин прогрессивмы ул үҙгәрештәр, әллә, киреһенсә, тотош халыҡтарҙың ихтыярын, һүҙ иркен сикләүгә, уларҙы быуаттар буйы ғүмер һөргән ерҙәренән, даны ла, даланы ла булып әүерелгән тарихынан, әсә һөтө менән ҡандарына һеңгән телдәренән ваз кистерергә тырышыусы диктат ҡынамы ул? Эш бына бит нимәлә...

Конституциябыҙҙан суверенитет һүҙе менән бергә башҡа бик күп төшөнсәләр, һүҙҙәр, пункттар төшөрөп ҡалдырылды бит инде. Шулай булғас, теләһә ниндәй сәғәттә, теләһә ниндәй сәбәптәр менән әле булғанының да кемдәргәлер кәрәккәнсә үҙгәртелеүе, тел тейҙерелеүе, бәхәстәр һәм дәғүәләр майҙанына әйләндерелеүе ихтимал, тип хәүефләнәм, сөнки закон боҙоуҙы бит хәҙер кәртә аша һикереп сығыу шайы ла күрмәйҙәр. Конституцияны асып ҡарай, уҡый башлаһаң, бер төрлө күңел күтәрелеп, донъя яҡтырып киткәндәй була: шул тиклем матур, тәфсирләп яҙылған. Үкенескә күрә, тырышып-тырышып яҙылған ана шул положениелар шулай уҡ матур ғына, оҫта ғына итеп боҙола ла ҡуя. Миҫалдар бик күп ул, тик мин үҙемде бик тә борсоған мәсьәләләрҙе әйтеп китмәксемен. Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 68-се статьяһының 3-сө пунктында былай тиелә:"Рәсәй Федерацияһы үҙенең бөтә халыҡтарына ла туған телдәрен һаҡлауға, уны өйрәнеү һәм үҫтереү өсөн шарттар булдырыуға хоҡуҡтарын гарантиялай". Ә тормошобоҙҙа нимәләр булып ята? Нисек тә башҡорт теле, Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте дәрестәрен ҡыҫҡартыу йәки бөтөнләй программанан алып ташлау өсөн нимәләр генә уйлап сығарылмай! Динден дәүләттән айырылған булыуына ҡарамаҫтан, мәктәптәрҙә дин нигеҙҙәре өйрәнелә башланы. Йә булмаһа, 43-сө статьяла, мәҫәлән, мәктәпкәсә, төп дөйөм һәм урта һөнәри белем алыу мөмкинлеген гарантиялау тураһында һүҙ бара. Шул уҡ ваҡытта күп кенә ауылдарҙа балалар баҡсаһының бөтөнләй булмауын, хатта мәктәптәрҙең дә бер-бер артлы ябылып бөтөүен белем алыуға мөмкинлек һәм гарантия тип әйтеп буламы?..

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ДИАЛОГ*

## ЕТЕГӘНДӘЙ “ЕТЕ ТАУ”...

### киләсәккә илтер тау

**Улар менән тәүге тапҡыр яҡындан аралашҡанда үтә лә ябайлыҡтарына, ололоҡло һәм кеселекле булыуҙарына, бер-береһенә һәм башҡаларға ҡарата эскерһеҙ һәм ихлас мөнәсәбәтенә ҡарап һоҡланып: "Был ағай менән апай нисек итеп үҙебеҙсә, ауылса тәбиғилеген һаҡлай алды икән?" - тип уйлап ҡуйғайным. Етмәһә, алдан уларҙың ниндәйҙер ғаилә бизнесы менән шөғөлләнеүе хаҡында ишеткәс, яҡынса нимә менән һатыу итеүҙәрен дә күҙалланым. Ғәҙәттә, кондитер ризыҡтары, китап, балалар уйынсыҡтары менән һатыу итеүселәр шулай илгәҙәк булыусан, тип тә уйлап ҡуйҙым.**

Әммә... Яңылышҡанмын икән. Баҡтиһәң, ғаилә башлығы **Фазлетдинов Ҡадурий Әбдрәхим улы -** "Ете тау" торба үткәргестәрҙе таҙартыу һәм диагностикалау үҙәге директоры, уның ҡатыны "Румикс" фәнни-етештереү фирмаһы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт директоры. "Румикс" һуңғы фәнни ҡаҙаныштар нигеҙендә поролондан һәм пенополиуретандан поршендар етештереп, "Ете тау" үҙәгенең эшмәкәрлеген тәьмин итһә, "Ете тау" үҙәге үҙ нәүбәтендә илебеҙҙең киң билдәле "Газпром", "Транснефть", "Башнефть", "Лукойл", "Стройтрансгаз", "СМУ-4", "Востокнефтепроводстрой", ТНК-ВР,Роснефть, Газпромнефть кеүек ойошмаларҙың өҙлөкһөҙ эшенә булышлыҡ итә. **Миңзәлә һәм Ҡадурий Фазлетдиновтар** ғүмер буйы ошо өлкәлә хеҙмәт итә. Улдары Азамат менән Ринат та улар менән бергә еңел булмаған һөнәр серҙәрен үҙләштерә. Уларҙың күп һандағы уңыштары араһынан тик ошоларҙы ғына әйтеү ҙә етәлер: "Ете тау" үҙәге ИСО 9001: 2008, ИСО 14001-2004, OH SAS 18001-2007 Халыҡ-ара стандарттарына эйә булған. Был Үҙәккә донъя баҙарында сит ил партнерҙары менән эшләү хоҡуғын бирә; 2006 йылда "Румикс" йәмғиәте "Алтын" категорияһында "Сифат өсөн Халыҡ-ара коронаһы"на лайыҡ булған; 2006 йылда "Ете тау" үҙәге Рәсәй Сауҙа-сәнәғәт палатаһының "Алтын Меркурий-2006" Милли премияһы лауреаты исемен яулай; 2005 йылда Бөтә Рәсәй конкурсының "Бизнес корифейы" номинацияһында Миңзәлә Фазлетдинова "Ҡатын-ҡыҙ - йыл директоры" исеменә лайыҡ була; 2011 йылда "Румикс" йәмғиәте донъяның 52 алдынғы компаниялары араһында Нью-Йоркта уҙған Халыҡ-ара конвенцияла "Сифатҡа һәм камиллыҡҡа ныҡлы тоғрологоо өсөн" "Бриллиант" категорияһына лайыҡ була һ.б.

Фазлетдиновтарҙың Башҡортостан, Рәсәй, донъя кимәлендә өлгәшкән уңыштары хаҡында тағы ла бик күпте һөйләргә мөмкин булыр ине. Әммә был эште китап яҙыусыға ҡалдырып, үҙҙәре менән әңгәмә ҡорорға булдыҡ.




**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Илдең Төп законын - Конституцияны беләһегеҙме?

(Башы 1-се биттә).

**Азамат АҠЪЮЛОВ, тарих фәндәре кандидаты, БДУ-ның Рәсәй тарихы кафедраһы доценты:** Минә, ғалим булараҡ, Төп законыбыҙҙы тәфсирләп өйрәнергә, анализларға һәм студенттарға уҡытырға тура килә. Иң тәүҙә шуны билдәләп китеү фарыз, тимен: Конституция илдең Төп законы булғас, башҡа төрлө закондар һәм закон көсөнә эйә булған норматив акттар уға ҡаршы килергә тейеш түгел. Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы 1993 йылдың октябрь-ноябрь айҙарында Мәскәүҙә булып үткән фажиғәле хәлдәрҙән һуң бик ашығыс рәүештә ҡабул ителде. Уның ашығыс эшләнеүенә сәбәптәр ҙә етерлек ине. Рәсәй парламентын танктарҙан атып тарҡатҡандан һуң, Президент һәм уның яҡлы көстәр бик тиҙ ваҡыт эсендә "Еңеүсе"нең Конституцияһын төҙөнө һәм уны референдумға, йәғни бөтөн халыҡ һайлауына сығарҙы. Рәсәй Федерацияһының күп субъекттарында һайлауҙарҙың бөтөнләй булмауына ҡарамаҫтан, Борис Ельцин һәм уның яҡындары илдең Төп законын ҡабул итеүгә бөтә көсөн һалды. Хоҡуҡ белгестәре РФ Конституцияһын ваҡытлыса, йәки күсеү осоро Конституцияһы тип йөрөтә. Закон буйынса, башҡарма властарға (айырыуса Президентҡа) ифрат ҙур вәкәләттәр бирелгән. 1993 йылғы Конституция буйынса Рәсәй Президенты XX быуат башындағы батша власынан да күберәк хоҡуҡтарға эйә, тип яҙа күп ғалимдар. Ошонан сығып, улар, хәҙерге Рәсәйҙә һайланма монархия хөкөм һөрә, тиҙәр.

Шул уҡ ваҡытта халыҡ вәкилдәренә (депутаттарға), демократик илдәргә хас булған хоҡуҡтар бирелмәгән. Һөҙөмтәлә, халыҡ депутаттары илдең эске һәм тышҡы сәйәсәтенә лә артыҡ йоғонто яһай алмай, ниндәйҙер коалицион хөкүмәт төҙөргә лә хоҡуҡтары юҡ. Етмәһә, һайлауҙарҙы тулыһынса пропорциональ системаға күсереп бөткәндән һуң, депутаттар тик партия исемлектәре буйынса ғына һайлана. Бындай осраҡта, әлбиттә, һайлаусылар үҙҙәренең кемде депутат итеп һайлағанын да белмәй, тегеләре лә халыҡ алдында үҙҙәрен бурыслы һанамай. Бындай Конституцияның, ысынлап та, ваҡытлыса булыуына ышанғы килә. Донъя йәмәғәтселеге баҫымы аҫтында Рәсәй халҡының сәйәси һәм мәҙәни үҫеше һөҙөмтәһендә демократияның төп ҡиммәттәренә - ысын властар бүленешенә (закон сығарыу, башҡарма һәм суд властары), уларҙың бер-береһенән бойондороҡһоҙ булыуына килергә насип итһә ине, тип теләйем.

Башҡортостан Республикаһының Төп законына килгәндә иһә, уны халҡыбыҙҙың Рәсәй Федерацияһы составындағы дәүләтселегенең хоҡуки нигеҙе тип әйтер инем. Оло илебеҙ һәм Башҡортостаныбыҙ Контитуциялары нигеҙендә беҙ үҙ милләтебеҙҙе һаҡларға һәм ҡурсаларға, уны үҫтерергә тейешбеҙ. Республикабыҙ дәүләтселегенә янаған һәр төрлө провокацион аҙымдарға беҙ хәҙерге заман ысулдары менән яуап бирергә, уның хоҡуҡтарын һаҡларға бурыслыбыҙ. Ошонда күрәм мин ысын илһөйәрлек позицияһын. Сөнки Башҡортостаныбыҙҙан ҡолаҡ ҡаҡһаҡ, беҙгә халҡыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу мөмкин булмаясаҡ. Тарихтан билдәле булыуынса, халҡыбыҙ борондан Рәсәйҙең терәге булып килгән. Артабан да шулай бергә йәшәргә теләһәк, беҙгә милләтебеҙҙе, телебеҙҙе, милли үҙаңыбыҙҙы, йолаларыбыҙҙы һәм иманыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу фарыз.

**Әнисә МӘҠСҮТОВА, БДУ-ның математика факультеты студенты:** Конституцияның дөйөм нигеҙҙәрен беләм, ә бына пунктлап, ентекләп өйрәнер өсөн һеҙҙең был һорауҙан һуң Рәсәйҙекен дә, Башҡортостандыҡын да тағы ҡулға алып, иғтибар менәнерәк уҡып сығырға теләк тыуҙы. Йәштәр, айырыуса студент халҡы, был турала яҡшы белергә тейеш, бик дөрөҫ һорау бирәһегеҙ. Үкенескә ҡаршы, зачет йә имтиханға махсус әҙерләнмәйенсә килеп, был һорауға күптәр "отличноʺға яуап бирә алмаҫ ине, моғайын. Башҡа йәштәр исеменән әйтергә хаҡым булмаһа ла, үҙ-ара ниндәйҙер мәсьәлә буйынса фекер алышыуҙарҙан да бының шулай икәне күренеп тора. Мәктәп программаһы буйынса РФ һәм БР Конституцияларын 9-сы класта үтәбеҙ. Минеңсә, был теманы уҡытыусылар әсбаптағыса рәсми һәм "ҡоро" рәүештә түгел, ә бала аңына барып етерлек кимәлдә йәнлерәк итеп, ҡыҙыҡлы миҫалдар аша, тормошҡа бәйләп аңлатып бирһендәр ине, юғиһә, балалар өсөн был тема ҡатмарлыраҡ, тип уйлайым. Шуға ла хәтерҙә ҡалмағандыр инде ул.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы аҙағына яҡынлаша. Был миҙгел баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана. Ошондай баһалау майҙанында һынатмайыҡ, тибеҙ: баҫмабыҙҙы уҡып, яратып өлгөргәндәр үҙҙәре лә һуңламаһын почта бүлексәләренә, дуҫтарығыҙ, таныштарығыҙ, күршекүләнде лә иҫкәртеп ҡуйығыҙ. Гәзитебеҙгә 15 декабргә тиклем яҙылып ҡуйһағыҙ, таман була. Унан һуң да яҙылырға мөмкин, ләкин почта хеҙмәткәрҙәре, ғәҙәттә, гәзит-журналдарға яҙылыу миҙгелен 15-тәрендә тамамлауҙы хуп күреүсән.**

• Шулай итеп, 2013 йылдың тәүге яртыһына **50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 360 һум 24 тингә** яҙылырға була. Декабрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе 4 уҡыусыбыҙға - М. Әхтәмовтың **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 4 уҡыусыбыҙға - **"400 башҡорт халыҡ йыры"**, 10 уҡыусыға - **"Башҡортса дини календарь"**, 10 уҡыусыға - Рауфан Мортазиндың **"Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, 10 уҡыусыға - **"Айыҡ туй сценарийҙары"**, 10 уҡыусыға Әхмәр Үтәбайҙың **"Мин айыҡ тормош башланым"** китаптарын бүләк итәсәкбеҙ.

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы** ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ. Хәтерегеҙҙәме, бер уҡыусыбыҙ күптән түгел шулай тип тәҡдим иткәйне: "Ауылдағы туғандарыма "Киске Өфө"нө яҙҙырҙым да, квитанцияны конвертҡа һалып, һәр береһенә хат яҙҙым:"Бына һеҙгә 360 һум 24 тингә ярты йылға "Киске Өфө"нө яҙҙырҙым, һуғым һуйғас, минә кило ярым ит йә бер-ике биҙрә картуф бирерһегеҙ", - тинем". Уҡыусыбыҙҙың ошо тәжрибәһен дә ҡулланып ҡарағыҙ, ни тиһәң дә, баҙар иҡтисады, алыш-биреш заманында йәшәйбеҙ бит.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ТУҠТА, МӘЛ!

# ЙӨҘ ДУҪЫҢ БУЛҺЫН...



Күмертау ҡалаһының башҡорт теле уҡытыусылары.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Стәрлетамаҡта II "Эшҡыуарлыҡ. Бәләкәй ҡалалар һәм территориялар - үҫеш нөктәләре" республика форум-күргәҙмәһендә ҡатнашты. Республика башлығы эшҡыуарлыҡты үҫтереүгә ентекле анализ яһаны. "Республикала 450 меңдән ашыу кеше - халыҡтың 10 проценттан ашыуы бәләкәй бизнес менән мәшғүл, - тип билдәләне Президент. - 1 ноябргә ҡарата бәләкәй һәм урта бизнестан алынған һалымдар бер миллиард һумға артып, биш миллиард һумға етте. Бюджетҡа килгәндә, унда бөгөнгө көндә 100 миллиард һум иҫәпләнә. 450 мең кеше әлеге ваҡытта бәләкәй бизнес менән шөғөлләнә, улар эшкә яраҡлы халыҡтың утыҙ процентын тәшкил итә".

✓Башҡортостан Президенты Стәрлетамаҡҡа эш визиты барышында физкультура-спорт комплексында булды. Оҙаҡҡа һуҙылған төҙөлөш эштәре, ниһайәт, аҙағына яҡынлаша. Муниципаль спорт учреждениеһында волейбол, баскетбол, гандбол, футбол, теннис, хоккей, фигуралы шыуыу буйынса тренировкалар үткәреләсәк. Һарайҙа бер юлы 800 бала шөғөлләнә ала, боҙ аренаһы 2500 тамашасыны һыйҙыра. Рөстәм Хәмитов ҡала хакимиәте етәкселеге менән һөйләшкәндән һуң, һарайҙы бер айҙан файҙаланыуға тапшырыу бурысын ҡуйҙы.

✓"Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы ("Россия" телеканалы) журналистары Алина Сөләймәнова һәм Эрнест Хәйруллиндың "Из пункта "А" в пункт "Б" исемле документаль очеркы "ТЭФИ-Төбәк 2012" бөтә Рәсәй телевизион конкурсының "Публицистик тапшырыу" исемле иң абруйлы номинацияһында "Алтын Орфей"ға лайыҡ булды. Көн элгәре конкурста еңеүселәрҙең исемдәре Ҡаҙанда иғлан ителде. "ТЭФИ-Төбәк" премияһына быйыл йәмғеһе 535 эш дәғүә итте.

✓Рәсәй халҡы өсөн Яңы йыл каникулдары 30 декабрҙә башлана. Хеҙмәткәрҙәр ял һәм байрам көндәрен рациональ файҙаланһын өсөн 29 декабрҙәге ял көнө дүшәмбегә, 31 декабргә, күсерелә. 1, 2, 3, 4, 5, 6 һәм 8 ғинуар - Яңы йыл каникулдары, шулай уҡ 7 ғинуар - Раштыуа байрамы - илдә ял һәм байрам көндәре булып тора. 2013 йылда эшләмәгән байрам көндәре - 5 һәм 6 ғинуар - шәмбе һәм йәкшәмбегә тура килә. Хеҙмәткәрҙәр ял һәм байрам көндәрен рациональ файҙаланһын өсөн РФ Хөкүмәте ҡарары менән 5 ғинуарҙағы ял көнө кесе йомаға, 2 майға, күсерелә. Шулай уҡ 6 ғинуарҙағы ял көнө йомаға, 3 майға, күсерелә.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# АРТЫҠ ШАТЛЫҠ...

## һағыш килтерә

**Бала саҡтан бигерәк тә өләсәйҙәр, ҡартәсәйҙәр беҙгә артыҡ шатланырға, шашынырға, ҡысҡырып көлөргә, самаһыҙ иһаһайларға, бер һүҙ менән әйткәндә, бейбаштаҡланырға, үкереп иларға, үҙәк тартырға, үкһергә, кешегә рәнйергә, ҡарғарға, аҡырырға, екерергә, яуызлыҡ теләргә ярамағанлығы хаҡында ҡат-ҡат иҫкәртә торғайны. Быларҙы үтәүҙе улар беҙҙән талап итте, үтәмәгәндәргә аҡ тешен күрһәтеп барманы. Ошондай һәм ошоға оҡшаш барлыҡ тыйыуҙарҙы дөйөмләштереүсе һүҙ кеүек яңғырай "Артыҡ шатлыҡ һағыш килтерә" әйтеме. Хәйер, тик шатланыуға, ҡайғырыуға йә кешегә яуызлыҡ теләүгә генә ҡайтып ҡалмай был әйтем. Уның хаҡында төрлө юҫыҡта уйланһаң, кешене, милләтте, дәүләтте һәм кешелекте оҙон ғүмерле итерлек, милли идеяға торош асылына ла төшөнәһең.**



Мин хеҙмәт иткән хәрби часта Гогодзе фамилиялы (исемен онотҡанмын) сәйер тәбиғәтле грузин егете бар ине. Котельныйҙа мейессе булып хеҙмәт итте ул. Мунса яғыусы ла, сантехник та ине үҙе. Бер мәл уға яҡын туғаны вафат булып ҡалыуы тураһында телеграмма килде. Тыуған ере яҡын булғас, ҡайтып, туғанын һуңғы юлға оҙатып килде. Шунан һуң бик оҙаҡ ваҡыт ҡайғырып йөрөнө ул. Ҡырынманы ла, ашханаға ла йөрөмәне. Көндәр һәм төндәр буйына котельныйында бер нөктәгә текәлеп ултырыр булып китте. Ял көндәре хәрби частың клуб мөдире һәм хат ташыусы үзбәк егете Иркин Инагамжанов отбойға тиклем клубында күңелле музыка ҡуйып, тирә-яҡҡа яңғырата торғайны. Гогодзе клубҡа барып, мөдире менән талашып, музыканы ла туҡтаттыра ине.

Совет Армияһы һалдатының үҙен сәйер тотоуы күпмелер ваҡыт үткәндән һуң штаб офицерҙарына барып еткәс, штаб начальнигы бер тапҡыр ғына уға ҡырынырға һәм ашханаға йөрөргә бойорҙо ла, ул тыңламағас, старшинанан ҡайышһыҙ шинель кейҙерттереп, гауптвахтаға оҙаттырҙы. Ундағы тәртип ҡаты, өс көндән һуң үҙен ипкә килтереп, ротаға әйләнеп ҡайтты һалдат. Уйсанлығы ҡалды барыбер.

Форсат сыҡҡанда ара-тирә Гогодзенан һәм башҡа грузин милләтле һалдаттарҙан грузиндарҙың траурға бәйле йолаларын һораштырғыланым. Баҡтиһәң, уларҙа яҡын туғаны вафат булғандан һуң оҙаҡ ваҡыт ҡайғырыу мәле була икән. Ул саҡта ир-аттар ҡырынмай, ҡатын-ҡыҙҙар ҡара кейем кейеп йөрөй, траур булған йылда зат-нәҫел араһында барлыҡ күңел асыу байрамдары, шул иҫәптән туйҙар кисектерелеп торола. Байрамдар һәм туйҙар туғандар араһында ғына түгел, тотош ауылдарҙа, ҡала ерендә булһа, айырым йорттарҙа ла һуңыраҡ ваҡытҡа билдәләнә. Ҡыҫҡаһы, был милләттә кешенең ҡайғыһына ҡарата айырыуса ихтирамлы мөнәсәбәт күрһәтелә икән. Улар матәм көндәрендә, ҡайһы берәүҙәр кеүек, һыҡтап та йөрөмәй, шул уҡ ваҡытта йылмаймай ҙа, көлмәй ҙә, бер тигеҙ халәттә йөрөй. Хәйер, хәҙер был хәл уларҙа нисектер, һәр хәлдә, үткән быуаттың 80-се йылдарында тап шулай ине.

Ә беҙҙәге хәлдәр 80-се йылдарҙа ла, хәҙер ҙә күренекле шағир Рәйес Түләк әйтмешләй:

*Бына, мәйет сыға*
*тигән йорттан*
*Аҡ ебәккә төрөнөп*
*туй сыҡты.*
*Ап-аҡ тиеп мин*
*табынған ҡарҙар*
*Ирегәйне, күпме ҡый сыҡты,-*

тигән кеүек.

Хәҙер беҙҙә туйы ла, йыназаһы ла, ҡайғыһы ла, шатлығы ла, солохо ла, һуғышы ла, ағы ла, ҡараһы ла - барыһы ла бергә буталған, ҡайҙа нимә икәнлеген дә айырырлыҡ түгел. Берәүҙәр ҡайғынан һыҡтаған бер мәлдә, янындағы икенселәр туй үткәрә, берәүҙәр теттергән саҡта, уның күршеһе ҡайғы-хәсрәтенән йәненә урын таба алмай һыҡрай.

Һуңғы ваҡытта күпселек телетамашасылар араһында популяр булып китте Андрей Малаховтың "Һөйләһендәр, әйҙә!" тигән шоу программаһы. Унда ҡатнашыусылар тик ғаилә эсендә генә ҡала торған проблемаларын, хатта төндең билдән түбән өлөшөнә бәйле булған серҙәрен бар донъя алдында асып һалып, интимды урамға сығарып, үҙҙәрен рисуай итәләр, бер-береһенә эт ашағыһыҙ һүҙҙәр әйтеп талашалар. Ата-әсәһе бер туҡтауһыҙ ирешкән, талашҡан ғаиләләге балалар нисек булып үҫә тип уйлайһығыҙ? Бында ла шундай уҡ хәл: тотош ил халҡының психикаһы ҡаҡшай, талашыу-ирешеү кешеләр, ғаилә ағзалары мөнәсәбәтендә нормаға әүерелә. Был тапшырыу унда күтәрелгән мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн түгел (унда бик актуаль проблемалар ҙа күтәрелгән сүрәттә лә, Дәүләт Думаһы депутаттары ҡатнашыуы шуға ишара), шәхесте, ғаиләне, йәмғиәтте, милләтте, һуңғы сиктә дәүләтте эске яҡтан тарҡатыу маҡсатында ойошторолғанға оҡшаған.

Беҙ көн һайын тиерлек балаларҙың, үҫмерҙәрҙең ҡанһыҙлығына, бәйелһеҙлегенә бәйле сәстәр үрә торорлоҡ ваҡиғаларҙың шаһиты булып торабыҙ. Бындай күренештәрҙең сәбәптәрен таба алмай, барлыҡ ғәйепте балаларҙың һәм үҫмерҙәрҙең үҙҙәренә япһарып бот сабабыҙ. Әгәр ҙә янъял, ирեш, талаш ошондай тапшырыуҙарҙа ҡәҙимге нормаға әүерелә икән, бәләләрҙең башы ҡайҙа икәнлеге билдәле. Баҡтиһәң, шоуҙа барған күп кенә ваҡиғалар сценарийға ҡоролоп, дөрөҫ булһа, унда интриганы сағыураҡ ҡорған ҡатнашыусыға гонорар ҙа түләйҙәр икән, тип ишеттем. Әгәр ҙә мин яңылышһам, үҙегеҙҙең дәғүәләрегеҙҙе белдерегеҙ. Беҙҙең Башҡортостан юлдаш телевидениеһында ла шуға оҡшашыраҡ шоу программалар ойоштороорға маташып ҡаранылар. Килеп сыҡманы, сөнки беҙҙең халыҡтың менталитеты бөтөнләй башҡа төрлө шул. Беҙҙә ундай ирештալашты театр сәхнәһендә берәр спектаклдең конфликты рәүешендә генә һынландырыу мөмкин.

"Артыҡ шатлыҡ һағыш килтерә" әйтеменең бер мәғәнәһе сама төшөнсәһенә лә бәйле. Һәр нәмәлә лә сама булырға тейеш. "Сама саманан артмай", тип тә әйтәләр. "Һимеҙ тәндә арыҡ йән", "Һимеҙлек ҡуйға ғына килешә" тигән әйтемдәр самаһыҙ туҡланыуҙы иҫкәртеүгә ҡоролған. Америкала, мәҫәлән, һәр икенсе кеше һимеҙлек менән яфалана, һәр өсөнсө үлем дә ошо сәбәпкә бәйле. Ҡабул иткәнгә тиклем ризыҡҡа беҙ хужабыҙ, ҡабул иткәндән һуң ул беҙгә хужа шул. Бер зыярат ҡапҡаһына: "Бында ятыусылар дөрөҫ туҡланмау, самаһыҙ ашау арҡаһында донъялыҡ менән хушлашты", - тигән һүҙҙәр яҙып киткәндәр. Кешене сама белмәү тойғоһо, нәфсе ҡоло булыуы харап итеүе, донъялыҡтан иртә алып китеүенә бәйле тағы ла әллә күпме миҫалдар килтерергә мөмкин булыр ине. Ә бит, төптән уйлап ҡараһаң, һәр бер һуғыштарҙың, кешеләргә бәйле катаклизмдарҙың нигеҙендә ята нәфселек.

"Айыҡ тормош башланым" тигән китабымдың "Үтескә алынған шатлыҡ" тигән өлөшөндә мин бер тапҡыр араҡы эскән кешенең ҡырҡ көн һуҙымында балтаһы һыуға төшкән кешеләй бошоноп, шомланып йөрөүе хаҡында әйтеп үткәйнем. Нимәнелер артыҡ ҡулланғанда, артыҡ шашынғанда, илағанда, көлгәндә, ҡайғырғанда беҙ нәҡ ошо рәүешле алдағы ғүмеребеҙҙең ҙур өлөшөн үтескә алабыҙ шул. Ә бит, дөрөҫөн әйткәндә, тотош кешелек комфортлы йәшәү рәүешен маҡсат итеп ҡуйып, киләсәк быуындарҙың өлөшөнә инеп, ғөмүмән, кешелектең ғүмерен ҡыҫҡарта түгелме икән?

Радиоканалдар аша туҡтауһыҙ, тәүлек әйләнәһенә концерттар барғанда, телеканалдар аша бер туҡтауһыҙ шоуҙар күрһәтелгәндә, шомланмаҫтай ерендән шомланырһың. Ә бит беҙ ошо юл менән бәлә-ҡазаларҙы, тәбиғәт катаклизмдарын, донъя һуғыштарын үҙебеҙ тыуҙырабыҙ...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов 2013 йылды Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип иғлан итеү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Йылды үткәреү буйынса республика ойоштороу комитеты булдырылды, уға 2013 йылдың 1 ғинуарына тиклем тейешле саралар планын әҙерләү һәм раҫлау бурысы йөкмәтелде. Башҡортостандың ҡала һәм район хакимиәттәренә лә шундай уҡ ойоштороу комитеттарын булдырырға тәҡдим ителде. Йәмәғәт ойошмаларына экологик мәҙәниәтте формалаштырыу һәм үҫтереү, тирә-яҡ мөхиткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, тәбиғәт мираҫын һаҡлау өсөн яуаплылыҡты арттырыу буйынса эшмәкәрлекте әүҙемләштерергә ҡушылды.

✓ 1 ғинуарҙан балалар пособиеһы 5,5 процентҡа арта. Район коэффициентын иҫәпкә алып, балаға ай ярымға тиклем эш хаҡының 40 проценты күләмендә пособие түләнәсәк. Беренсе бала өсөн минималь пособие күләме - 2822,02, икенсе һәм артабанғы балалар өсөн 5644,03 һум тәшкил итәсәк. Бала тыуғанда бер тапҡыр бирелә торған пособие 15050 һум 75 тин буласаҡ.

✓ 8 декабрҙән Өфөлә Яңы йыл алды ит йәрминкәләре старт ала. Улар һәр ял һайын, 30 декабргә тиклем үткәрелә, тип хәбәр иттеләр БР Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән. Йола буйынса йәрминкәләрҙә республиканың ауыл хужалығы продукцияһы етештереүселәре ҡатнашасаҡ, ит продукцияһын улар сағыштырмаса арзан хаҡ менән һатасаҡ.

✓ Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте Рәсәй Китап сығарыусылар ассоциацияһы менән иғлан ителгән "Искусство книги. Традиции и поиск" конкурсының дипломына лайыҡ булды. Бындай абруйлы наградаға Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына 80 йыл тулыу уңайынан сыҡҡан "Рәми Ғарипов. Тормошо һәм ижады" фотоальбомы лайыҡ булды, тип хәбәр иттеләр "Китап" нәшриәтенән.Тантаналы сара Мәскәүҙә ойошторолған XIV "Нон-Фикшн" халыҡ-ара күргәҙмәһе сиктәрендә Үҙәк рәссамдар йортонда үтте.

✓ Өфө-Арена кассаһында һәм ticket.ufa2013.net сайтында Йәштәр командалары араһында бөтә донъя шайбалы хоккей ярыштарына билеттар һатыу дауам итә. Билеттар һаны сикле.

**"Башинформ"дан.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# УЛАР БАРЫБЕР БАЛА

**1862 йылда инглиз табибы Джон Лэнгдон Даун беренсе булып организмдағы психик тайпылыш формаһына аңлатма бирә. Артабан инде был синдром уның фамилияһы менән атала башлай.**

Бөгөн баш ҡалала Даун синдромы диагнозы ҡуйылған балалар яҡынса 100-ләп самаһы. Улар менән бынан дурт йыл элек ойошторолған "СоДействие" йәмәғәт ойошмаһы шөғөлләнә. Уның етәксеһе Вероника Котельникова әйтеүенсә, эш бала табыу йорттарынан уҡ башлана. Сөнки сабыйы Даун синдромы менән донъяға килгән әсә тәүге мәлдә тетрәнеү хәлендә була. Ә ойошманың психологтары уға ошо халәттән сығырға ярҙам итә. Хатта ҡайһы берҙә психолог ярҙамы өсөн бүленгән бер сәғәт ваҡытты әсә бер һүҙ әйтмәйенсә тынлыҡта үткәрһә лә, был да уның өсөн ярҙам.

Бөгөн "СоДействие" хеҙмәткәрҙәре баш ҡаланың барлыҡ бала табыу йорттары менән хеҙмәттәшлек итә. Әсә менән бала дауахананан сыҡҡас та улар үҙҙәренең ярҙамынан ташламай, балаға йөш ярым тулғансы психолог айына ике тапҡыр ғаиләгә килеп, ярҙам күрһәтә. Йөш ярымдан һуң балалар махсус үҙәктәрҙә шөғөлләнә. Әлегә бындай үҙәктәр Өфө һәм Стәрлетамаҡ ҡалаларында ғына бар. Артабан инде улар тиҫтерҙәре менән бергә балалар баҡсаларына йөрөү мөмкинлегенә эйә. Бөгөн баш ҡаланың 92 мәктәпкәсә учреждениеһы Даун синдромы ҡуйылған балаларҙы ҡабул итергә әҙер. Әммә бының өсөн, тәү сиратта, ата-әсәләр үҙҙәре балаларын ғәҙәти балалар баҡсаһына бирергә, үҙҙәренең ҡурсауынан айырырға әҙер булырға тейеш. Икенсенән инде, бындай сирле балаларҙы балалар баҡсаһына алыуҙы талап итеүҙән алда, башта уны тәрбиәселәргә килтереп күрһәтергә, таныштырырға, йәйләп ҡына ошо мөхиткә өйрәтергә кәрәк. Бөгөн Даун синдромлы 40 бала махсус проектҡа ярашлы, ғәҙәти балалар баҡсаһына йөрөй. "Әгәр улар менән тәүге көндәрҙән үк шөғөлләнгәндә, улар башҡа балаларҙан бер нисек тә айырылмай. Киреһенсә, үҙенә уңайлы мөхиттә улар башҡаларҙың артынан тартылып, ыңғай үҫешә, хатта ҡайһы бер осраҡта ғәҙәти балаларға ҡарағанда күп нәмәне яҡшыраҡ та башҡара", - ти Вероника Юрьевна.

Бынан тыш, ойошма Мәскәүҙән белгестәр саҡыртып, махсус семинарҙар уҙғара. Унда тәрбиәселәргә һәм ата-әсәләргә Даун синдромлы балаларға нисек белем бирергә, уларҙы нисек тормошҡа өйрәтергә кәңәштәр бирелә. Шулай уҡ телефон аша он-лайн консультациялар ҙа ойоштороала.

"Ата-әсәләр һәм тәрбиәселәр был категорияла, тәү сиратта, баланы күрһен ине. Ә баланың иң ҙур ихтыяжы, донъяны танып белеү ийын аша бара. Әгәр һәр кем, һәр педагог Даун синдромлы балалаҙа сирлене түгел, ә бары тик баланы ғына күрһә, ярҙам итеү мөмкинлегебеҙ артасаҡ ҡына", ти. В. Котельникова.

Әйткәндәй, бөгөн Европа илдәрендә физик кәмселектәре булған ғына түгел, психик тайпылыштары булған балаларҙы ла ғәҙәти балалар менән бергә тәрбиәләү, ғәҙәти мәктәптәрҙә уҡытыу кәрәклеге тураһында бәхәс алып баралар...

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТӘҮГЕ ҠОЙМАҠ...

## төйөрһөҙ булып сыҡты

**Ошо көндәрҙә Конгресс-холл бинаһында Рәсәй Федерацияһының миллионлы ҡалаларының "Йәштәргә инвестиция - тотороҡло киләсәк" тип аталған йәштәр саммиты үтте. Мәскәү, Волгоград, Ҡаҙан, Красноярск, Түбәнге Новгород, Дондағы Ростов, Һамар ҡалаларынан килгән делегациялар составында йәштәр сәйәсәте учреждениелары, балалар һәм йәштәр йәмәғәт ойошмалары етәкселәре, шулай уҡ ғалимдар, юғары уҡыу йорттарында белем алыусы аспиранттар һәм студенттар ҡатнашты, фекер алышты, тәжрибә уртаҡлашты.**

Саммит сиктәрендә ете секция эшләне, уларҙа волонтерҙар хәрәкәте, йәштәр психологияһы, йәштәрҙең социаль әүҙемлеге, йәштәр араһында эшҡыуарлыҡ, фән һәм мәғариф өлкәләрен мәғлүмәт технологиялары ярҙамында үҫтереү, йәштәрҙең юғары уҡыу йорттарында фәндә үҫтереүҙәге роле һәм миллионлы ҡалаларҙа йәштәр хәрәкәтенең үҫеше кеүек темаларға фекер алышыуҙар ойошторолдо. Сарала Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, министрлыҡ, ведомстволар вәкилдәре һәм башҡа саҡырылған ҡунаҡтар ҡатнашты.

Саммиттың икенсе өлөшө Өфө ҡала округы хакимиәтендә Ирек Ялалов менән түңәрәк өҫтәл артында фекер алышыу формаһында уҙҙы.

Кәңәшмәне асып, Ирек Ишмөхәмәт улы йәштәрҙең баш ҡала халҡының 45 процентын тәшкил итеүен, Өфөлә лә, республикала ла йәштәр проблемаларын хәл итеүгә ҙур иғтибар бүленеүен, Башҡортостан йәштәренең фәнгә күпләп килеүе ҡыуәтелеүен билдәләне.

- Өфө - Рәсәйҙең йәш ғалимдары союзы филиалын үҙендә беренселәрҙән булып ойошторған ҡалаларҙың береһе. Бөгөн Өфөлә 1000-дән ашыу йәш ғалим эшләй, - тине Ирек Ялалов.

Артабан баш ҡала округы хакимиәте башлығы Өфө ҡалаһының донъя масштабындағы ике ваҡиға - Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһында ҡатнашыусы илдәр саммиты һәм БРИКС илдәре һәм хөкүмәттәре ултырышын ҡаршылауы тураһында ла мәғлүмәт еткерҙе, әлеге осрашыуҙа ул алда көтөлгән ике ҙур сараға "генераль әҙерлек" тип атаны.

Форум ваҡытында йәш ғалимдарҙың сығыштары тыңланды. Мәскәүҙән килгән белгес, Халыҡ-ара мәғлүмәт академияһы академигы, Евразияның йәш ғалимдары союзы башҡарма директоры Дмитрий Шкаевтың сығышы Рәсәйҙең фәнни алға китешендә йәштәрҙең төп урын биләп тороуы тураһында ыңғай фекер ҡалдырҙы. Ул күргәҙмә слайдтар ярҙамында "Сикһеҙ Себер" фәнни программаһынан алып йыһанға осоуға арналған фәнни тикшеренеүҙәргә тиклемге программалар тураһында бәйән итте. Европа һәм Азия ғалимдарын туплаған Евразияның йәш ғалимдары союзының алға китеүендә Өфөнөң йәш ғалимдарының өлөшө ҙур булыуы был сығышта бер нисә тапҡыр һыҙыҡ өҫтөнә алынды.

Иғтибарҙы айырыуса ныҡ йәлеп иткән сығыштарҙан Красноярск ҡалаһынан килгән Максим Уразовтың телмәрен дә айырып әйтергә кәрәк. Ул Өфөлә Рәсәйҙәге миллионлы ҡалаларҙың күргәҙмә-үҙәген булдырырға тәҡдим итте. Ул был тәҡдимен Өфөнөң ике ҡитғаны тоташтырып тотоусы ҡала булыуы менән аңлатты. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов был фекерҙе хупланы, кәрәк булһа, башланғысҡа финанс ярҙам күрһәтергә лә мөмкин булыуын йәшермәне.

Осрашыу һуңында Ирек Ишмөхәмәт улы Рәсәйҙә бөтмәҫ-төкәнмәҫ мөмкинлектәр иле, тип атаны һәм һәр йәш ғалимдың тап үҙе тыуып үҫкән еренә ерегеп, тап ошо ерлектә уңышҡа өлгәшергә тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Тыуған ерҙә йәшәүе лә, эшләүе лә күпкә ҡыҙыҡлыраҡ", - тине Ирек Ялалов.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Тәүге ҡоймаҡ төйөрлө була", тигән фекерҙе инҡар итеп, форумда ҡатнашыусылар саммитты ойоштороусыларға рәхмәтен еткерергә онотманы. "Тәүге ҡоймаҡ - иҫ киткес! Бөгөн бик матур һүҙҙәр әйтелде, әммә һүҙҙәр генә аҙ, уларҙың эш булып тормошҡа ашыуын көтөп, Өфөнө күҙәтеп ҡалабыҙ", - тине осрашыу аҙағында миллионлы ҡалаларҙан килгән йәш ғалимдар...**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ИҪЕРЕК ВОДИТЕЛДЕ...

## айыҡтырыр сара

**РФ Хөкүмәте башлығы Дмитрий Медведевтың административ закон нигеҙҙәрен ҡәтғиләштереү тураһындағы тәҡдиме берәүҙә лә битараф ҡалдырмағандыр: Хөкүмәт башлығы юл ҡағиҙәләрен һанламаусы иҫерек водителдәргә ярты миллион һум күләмендә штраф һалырға тәҡдим итте.**



Светофорҙың ҡыҙыл утына туҡтамаусы, ҡаршы юлға сығыусы һәм тиҙлекте арттырырға яратыусы иҫерек водителдәргә Мәскәүҙә һәм Санкт-Петербургта - 500 мең, ә төбәктәрҙә 250 мең һум штраф һалынырға тейеш, тип аныҡлыҡ индерҙе Д.Медведев үҙенең интернеттағы блогында. Ошонда уҡ Хөкүмәт етәксеһе статистик мәғлүмәттәр килтерә: "Былтыр ғына, мәҫәлән, илдә юл-транспорт фажиғәһендә 28 меңдән ашыу кеше үлгән. Ағымдағы йылда ғына ла балиғ булмағандар ҡатнашлығында 14 мең юл фажиғәһе булған. Ҡот осҡос һандар - 655 бала һәм үҫмер һәләк булған, 15 меңгә яҡыны төрлө йәрәхәттәр алған". Артабан Д.Медведев иҫерек автоһөйәҡсәрҙәргә ҡаршы ҡулланыу мөмкин буласаҡ көрәш саралары хаҡында яҙа. Иҫерек килеш машина йөрөтөүселәргә, әгәр был кеше һаулығына ҙур зыян килтергән һәм ике һәм унан күберәк кешенең үлеменә сәбәпсе булған хәлдә, енәйәт яуаплылығын көсәйтеү мәсьәләһе ҡараласаҡ. Беренсенән, был иректән мәхрүм итеү срогының түбәнге сиген - 5 йылға һәм юғары сикте 15 йылға тиклем еткереүҙе күҙҙә тотһа, ведомстволарға транспорт сараһын ваҡытлыса тартып алыу мәсьәләһен ҡарарға ҡушылды, тине Премьер. Шул уҡ ваҡытта ул был сараларҙың аҙағына тиклем тикшерелергә һәм яраштырылырға тейешлеген дә билдәләне.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Дәүләт башлығы Владимир Путин ил Президенты ярҙамсыһы Юрий Ушаковты Рәсәйҙең 2014-2015 йылдарҙа Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһында һәм 2015 йылда БРИКС берләшмәһендә рәйеслек итеүен тәьмин итеү һәм саммиттарға әҙерлек буйынса ойоштороу комитеты рәйесе итеп тәғәйенләү тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Ойоштороу комитеты составына 27 кеше инде. Улар араһында БР Президенты Рөстәм Хәмитов та бар. ШОС һәм БРИКС илдәренең сираттағы саммиты Башҡортостан баш ҡалаһында 2015 йылда үтә.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың һуңғы ултырышында депутаттар хоҡуҡ һаҡлау органдарына индерелгән заманса техник сараларҙың һөҙөмтәлелеге, юлдарҙағы һәләкәттәрҙең кәмеү-кәмеүе мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһындылар. Башҡортостан буйынса Эске эштәр министры Михаил Закомалдин билдәләүенсә, әлеге көндә республика юлдарында тиҙлек режимын теркәүсе 63 стационар комплекс эшләй. Әммә был етерлек түгел. Шуға ла киләһе йыл бюджетында ошо йүнәлештә эште дауам итеү һәм камиллаштырыуға байтаҡ аҡса ҡарала.

✓Башҡорт дәүләт педагогия университетында Халыҡ-ара Мифтахетдин Аҡмулла көндәре художестволы кейеҙ күргәҙмәһе менән асылды. Аҡмулла көндәре программаһы сараларға бай. Быйылғы сара сиктәрендә студенттар тәҡдиме буйынса тәүгә "Этнофест-2012" тип аталған йәштәр этнофестивале үткәреләсәк. Программала Аҡмулла шиғырҙарын донъя телдәренә иң яҡшы тәржемә итеүгә республика конкурсына йомғаҡ яһау, халыҡ-ара ғилми-ғәмәли конференция, интернет-олимпиада һәм шиғриәт кисәһе үткәреү ҡаралған. Халыҡ-ара Мифтахетдин Аҡмулла көндәре 10 декабрҙә тамамлана.

✓Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты башланғысы менән башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса дистанцион олимпиада старт алды. 12 декабргә тиклем дауам итәсәк ярыштарҙа дөйөм белем биреү учреждениеларының 8-11 класс уҡыусылары ҡатнаша ала. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиада ике этапта үткәреләсәк. Беренсе этап сиктәрендә балалар тест һорауҙарына яуап бирәсәк. Икенсе этап - йомғаҡ яһау һәм еңеүселәрҙе тәбрикләү - 12 декабрҙә Башҡорт дәүләт университетының төп корпусында үтә. Сара 14 сәғәттә башлана. Тулыраҡ мәғлүмәт алыу өсөн телефон: (347) 273-82-72.

АФАРИН!

# ҺӘР ЯҠТАН ДА ӨЛГӨ ТӨБӘК -

## ЮНЕСКО баһаһы шундай



**Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте ҡарамағындағы ЮНЕСКО эштәре буйынса Рәсәй комиссияһының төбәк бүлексәһе булып тора һәм 1998 йылда БР Президенты Указына ярашлы ойошторола. Әлеге ваҡытта Башҡортостанда 100 мәктәп ЮНЕСКО-ның Ассоциацияланған мәктәбе проектына ылыҡтырылған һәм уларҙың 21-е Париж сертификатына эйә. Шулай уҡ тәбиғи һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау буйынса ла эштәр алып барыла. Башҡа йүнәлештәге халыҡ-ара проекттар ҙа етди иғтибар үҙәгендә. Ошо һәм башҡа мөһим мәлдәр хаҡында Башҡортостан Республикаһының ЮНЕСКО эштәре буйынса комитетының башҡарма директоры Өлфәт ЙОМАҒУЖИН бәйән итә.**

- Республика тормошонда 2008 йылда Парижда, ЮНЕСКО-ның штаб-фатирында уҙғарылған "Башҡортостан: Рәсәй менән 450 йыл" тип аталған презентация - Башҡортостанды БМО трибунаһы аша мәғариф, фән һәм мәҙәниәт мәсьәләләре буйынса халыҡ-ара аренаға алып сығыусы киң масштаблы мөһим ваҡиға булды. Халыҡ-ара йәмғәтселек алдында республика конфессия-ара һәм милләт-ара татыулыҡ һәм толерантлыҡ өлгөһө, туризмды һәм спортты үҫтереү өсөн инвесторҙарҙы ылыҡтырыу төбәге, фәнни һәм производство үҫешенең заманса үҙәге буларaҡ алдынғы төбәктәрҙең береһе булып баҫты. Презентация сиктәрендә Коммюникега ҡул ҡуйылды. Унда республиканың ЮНЕСКО менән хеҙмәттәшлегенең өҫтөнлөклө йүнәлештәре билдәләнде. Мәҫәлән, ЮНЕСКО-ның мәҙәни һәм тәбиғи, матди һәм матди булмаған мираҫын һаҡлау, аныҡлап әйткәндә: "Шүлгәнташ" мәмерйәһенең, "Урал батыр" эпосының, "Һабантуй" байрамының һәм башҡа тәбиғи һәм мәҙәни һәйкәлдәрҙең ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы исемлегенә индереү, Өфөлә Р. Нуриев исемендәге Халыҡ-ара балет сәнғәте фестивален ойоштороу һәм үткәреү кеүек йүнәлештәр билдәләнде. Әйткәндәй, был йәһәттән һуңғы йылдарҙа ТӨРКСОЙ ойошмаһы менән хеҙмәттәшлек киңәйә һәм әүҙемләшә бара. Ике арала тарихи, мәҙәни, тәбиғи һәм документаль мираҫ объекттарын ТӨРКСОЙ-ҙың төрки донъяһы мираҫы исемлегенә индереү, артабан инде уларҙы бергәләшеп ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы исемлегенә тәҡдим итеү буйынса килешеү бар. Бында шуны әйтеп китергә кәрәк: быйыл августа "Башҡорт Уралы" тип аталған, уҙ эсенә республика һәм федераль кимәлдәге айырым һаҡланған биш: Шүлгәнташ ҡурсаулығы, Мораҙым тарлауығы тәбиғи паркы, Ыҡ зоологик заказнигы, Алтын Солоҡ зоология заказнигы, Башҡортостан Милли паркын алған тәбиғәт комплексы ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя биосфера резерваттары исемлегенә индерелде.

Мәғариф мәсьәләләренә килгәндә инде, был йүнәлештә үҙ эсенә алған проекттарҙы артабан да район-ҡалаларҙан яңынан-яңы мәктәптәрҙе, ссуздарҙы һәм вуздарҙы йәлеп итеп, киңәйтергә планлаштырабыҙ. Быйыл баш ҡаланың 39-сы гимназияһы базаһында мәғлүмәт технологиялары буйынса "Киләсәктең аҡыллы мәктәбе" пилот проекты ойошторолдо һәм уңышлы тормошҡа ашырыла. Республиканың педколледждары студенттары, белем биреү учреждениеларының етәкселәре һәм уҡытыусылары ҡатнашлығында тормошҡа ашырылған халыҡ-ара мәғариф проекттары аша республика ЮНЕСКО хәрәкәтенең донъяуи ҡаҙаныштарына үҙ өлөшөн индерә. 2011-2012 йылда бындай делегациялар Польшала, Чехияла, Австрияла, Венгрияла "Көнсығыш Европа диалогы" һәм Германия, Франция, Лихтенштейн һәм Швейцарияла "Көнбайыш Европа диалогы"нда, Венала Халыҡ-ара йәштәр конференцияһында һәм "Һөйләшеүе һәм ишетеүе боҙолған балаларға һәм үҫмерҙәргә логопедик ярҙам. Рәсәй-Германия тәжрибәһе" халыҡ-ара семинарында ҡатнашты. Эстон коллегалар ҡатнашҡан "Салауат эҙҙәре буйлап" тип аталған Халыҡ-ара проект та киң дәүләт һәм йәмәғәт хуплауын тапты.

Шулай уҡ "Осрашыуҙар. 1914 - 2014 йылдар. Юлдар, ҡараштар, яҙмыш үрҙәре. Ҡаршы тороуҙан - хеҙмәттәшлеккә" тип аталған амбициоз кинопроектты тормошҡа ашырыу барышы тураһында ла әйтеп китмәү мөмкин түгел. Ул Беренсе донъя һуғышы башланыуға 100 йыл тулыуға арнала һәм Баден-Вюртемберг ере менән Башҡортостан араһындағы мәҙәни-ара осрашыуҙар һәм бергә эшләнгән проекттар хаҡында бәйән итә. Интернет-киноверсияның бер нисә серияһы әлеге ваҡытта немец сайтында урынлаштырылған һәм бөгөн улар рус теленә тәржемә ителә. Был фильм тағы бер ҡат һуғыш һәм солох мәсьәләләре тураһында уйланырға мәжбүр итә.

ЮНЕСКО эшенең төп иғтибары шулай уҡ телдәрҙе һаҡлауға йүнәлтелгән. Сөнки тел - ул беҙҙең ҡаҙанышыбыҙ, кешелектең мәҙәни мираҫы һәм бөгөнгө глобалләшеү, милли телдәрҙең артабан йәшәү-йәшәмәүе хәл ителгәндә был бигерәк тә мөһим. Был йәһәттән БР буйынса ЮНЕСКО эштәре комитеты тарафынан туған телдәрҙе һаҡлау, сит телдәрҙе өйрәнеүгә арналған Туған телдәр һәм сит ил телдәре фестивале үҙенсәлекле проект булып тора. Шулай уҡ башҡорт халыҡ эпосы "Урал батыр"-ҙы һаҡлау һәм популярлаштырыу буйынса ла ҙур эш алып барыла. Йыл һайын ноябрҙә "Урал батыр" эпосын сит ил телдәрендә яттан һөйләү буйынса республика конкурсы уҙғарыла. Киләсәккә эпосты сит ил телдәренә һәм Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәренә тәржемә итеү һәм баҫтырып сығарыу планлаштырыла. Бында шуны ла әйтеп китергә кәрәк, киләһе йылда ла Комитет тәҡдим иткән мәҙәни характерҙағы "Урал батыр" эпосы - башҡорт халҡының мәҙәни мираҫы", "Салауат Юлаев эҙҙәре буйлап", "Башҡортостан Республикаһының тарихи, мәҙәни, документаль мираҫын һәм тәбиғи һәйкәлдәрен өйрәнәбеҙ", "Рәсәй төбәктәренең тәбиғи һәм мәҙәни мираҫы менән танышыу. Рәсәй Федерацияһының ЮНЕСКО-ның Бөтә донъя мираҫы объекттарын ҡарау", "БДБ илдәре буйлап экспедиция" проекттарын тормошҡа ашырыу дауам итәсәк.

Әйткәндәй, был аҙнала республикала ЮНЕСКО эштәре буйынса Рәсәй комиссияһының яуаплы сәркәтибе Г. Орджоникидзе етәкселегендәге делегация булып китте. Уның барышында киләһе йылдың ноябрендә республика делегацияһын Парижға, ЮНЕСКО-ның штаб-фатирына рәсми визиты һәм уҙара хеҙмәттәшлек тураһында Меморандумға ҡул ҡуйыуға, республиканың презентацияһын үткәреүгә бәйле мөһим мәсьәләләр тикшерелде, бихисап тантаналы саралар ойошторолдо.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## БАҠСА МИЛКЕН СТРАХОВКАЛАУ

**Былтыр ҡыш баҡсама бурҙар төштө. Инструменттарҙы, һауыт-һаба, хатта түшәк кәрәк-ярағына тиклем һыпырып алып сыҡҡандар, ҡойма урынына тарттырылған алюмин рабицины һүтеп алғандар. Баҡса милкен страховкалағанда нимәләргә иғтибар итергә кәрәк?**

- Баҡсағыҙҙағы бөтә нәмәне лә страховкалай алаһығыҙ. Милкегеҙҙе тотошлай страховкалау шулай ҙа арзанығаҡҡа төшәсәк. Төп ҡоролмаларға баҡса йорто, коттедж, дача ҡарай. Полис өсөн уртаса тариф йорт хаҡының 0,2 -1 процентын тәшкил итә. Төҙөлөп бөтмәгән ҡоролмаларҙың ҡыйығы,тәҙрәләре, ишеге булыу мотлаҡ. Уртаса тариф - йорт хаҡының 0,3-1,5 проценты. Хужалыҡ ҡаралтылары - гараж, мунса, һарай һ.б.(0,4-1%). Йорт мөлкәте - мебель, көнкүреш техникаһы һ.б. Исемлекте страховкалау агенты төҙөй. Мөлкәттең дөйөм хаҡының 0,3-1,5%. Ҡойма, ҡапҡалар. Страховкалау суммаһының 1-ҙән 5 процентына тиклем.Страховкалағандан һуң баҡсағыҙҙа страховка түләтеү осрағы килеп тыуа икән(баҡсаға төшөү,янғын, һыу баҫыу һ.б.), был хаҡта кисекмәҫтән иң тәүҙә полицияға, янғын һағына,МЧС-ҡа, унан страховкалау компанияһына хәбәр итегеҙ. Унан һуң килешеүҙә ҡаралған сроктарҙа страховкалаусыларға яҙма рәүештә гариза бирегеҙ. Тейешле документтарығыҙҙы әҙерләгеҙ: страховка полисы, паспорт, ваҡиға урынынан төшөрөп алынған фотоһүрәттәр, күсемһеҙ милеккә һеҙҙең хоҡуҡты раҫлаған документтар, полициянан әлеге осраҡҡа ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатылыу-ҡуҙғатылмау тураһында белешмә. Был документтарҙы страховкалаусыларға тапшырығыҙ. Ғаризаны ҡарауға бер ай самаһы китә, унан һеҙгә түләнәсәк. Әгәр түләүҙән баш тартһалар, көйөнмәгеҙ, бында ғәжәпләнерлек нәмә юҡ, уның ҡарауы һеҙҙең хоҡуҡтарығыҙҙы суд һәм прокуратура яҡлаясаҡ.

## БАРЫП БЕЛЕШЕГЕҘ

**Осраҡлы рәүештә ҡыҙыҡһынып, почта йәшниген ҡараһам, һалым инспекцияһынан хат яҙа. Унда транспорт һалымы һәм түләмәгән өсөн пени суммаһы күрһәтелгән. Ошоға тиклем уларҙан бер ниндәй ҙә иҫкәртеү-фәлән булмағайны. Минә хәҙер нишләргә?**

- Әгәр әлегерәк түләү ҡағыҙы алмаған булһағыҙ, тимәк, инспекциянан уны һеҙгә ебәрмәгәндәр. Шулай булғас, пени түләргә тейеш түгелһегеҙ. Һеҙгә үҙегеҙҙең һалым инспекцияһы начальнигы исеменә түләү ҡағыҙы алмауығыҙ һәм йыйым суммаһының һеҙгә мәғлүм булмауы хаҡында мотлаҡ аңлатма-хат яҙырға кәрәк, шунан һуң һалымдың түләгеҙ. Һалымсылар һеҙҙе үткән өс йылдан да күберәк ваҡыт өсөн түләргә мәжбүр итә алмай, ә инде инспекторҙарҙа һеҙгә квитанцияның заказлы хат менән ебәрелеүе хаҡында раҫламаһы булған хәлдә, пени түләргә тура киләсәк. Ә, гөмүмән, төрлө сәбәптәр буйынса күптәр түләү ҡағыҙын шулай уҡ ҡулдарына ала алмай, шуға күрә уның ҡасан килеп етерен көтөп ултырғансы, һалым инспекцияһына үҙегеҙ барып белешеү хәйерлерәк булыр.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



## Ҡыш етте - тымау әүҙемләшә

❖ Тымауҙан ҡотолоу өсөн сей сөгөлдөр һутын бал менән (2:1) ҡушып, көнөнә бер мәртәбә танауға 5 тамсы һалырға кәрәк;

❖ бәләкәй балалар танауына бешкән сөгөлдөр һутын балһыҙ ғына һалырға;

❖ еҫ һиҙмәгән кешеләргә сөгөлдөр япрағы һутына бал ҡушып, 4-5 тамсыһын танауға бер мәртәбә тамыҙырға кәңәш ителә - еҫ тойоу ҡайта.

## Гәрсис

Уны бөтә ғаиләләр ҙә ҡулланалыр, моғайын.

❖ Баш ауыртҡанда, ҡан баҫымы күтәрелгәндә уны муйынға һәм аяҡ балтырҙарына ҡуйырға;

❖ тын алыу юлдары ауыртҡанда, күкрәккә һәм балтырҙарға ҡуйырға;

❖ ҡурылдай булғанда, үпкә ауыртҡанда, күкрәк өҫтөнә һәм арҡаға ҡуйылар;

❖ невралгия ауырыуҙарын кәметеү өсөн ҡайһы ерең ауыртһа, шунда ҡуйһың.

Әгәр тән тиреһе һиҙгер булһа, шулай уҡ балаларға ҡағыҙ салфетка йәки марля аша ҡуйырға кәрәк. Горчичниктарҙы 5-15 минуттан, тире ҡыҙарғас алырға, тирене тәүҙә йылы һыу менән йыуырға һәм ҡоротorға.

## Миләш беште ҡыҙарып

❖ Ашҡаҙанда әселек аҙ булһа, ашауҙан ярты сәғәт алда 1 балғалаҡ миләш һуты эсеү файҙалы. Әгәр әселек юғары булһа, эсергә ярамай;

❖ бөйөрҙә, бауырҙа таш булһа, миләштең сәскәләренән төнәтмә яһап эсәләр;

❖ миләш ағасы ҡайырыһы ҡайнатмаһы ҡан баҫымын төшөрә;

❖ геморрой менән яфаланыусыларға ла миләш һутын эсеү файҙа бирә.

## Геморрой

Һарымһаҡ быуына ултыртырырға кәрәк. Бының өсөн биҙрәгә ҡыҙған таш, уның өҫтөнә һарымһаҡ һалып, махсус тишек тишелгән таҡта менән биҙрә өҫтөн ҡаплап ултырырға.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Башҡорттарҙың автономияны большевиктар ҡулынан алмауын билдәләү бик мөһим. Башҡорт халҡы территориаль автономия алыуға хоҡуҡты ҡулына ҡорал тотоп, үҙенең ҡоралы көстәренә таянып яулап алған.*

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# БАШҠОРТОСТАН АВТОНОМИЯҺЫ...

## заман юҫығынан ҡарағанда



**Бынан 95 йыл элек 15 ноябрҙә (яңы стиль буйынса 29 ноябрь) башҡорт милли хәрәкәтенең етәксе органы булған Үҙәк шура тарафынан Башҡортостан территориаль автономияһы иғлан ителә. Ул башҡорт халҡы, уның хоҡуҡтары, шул иҫәптән сәйәси хоҡуҡтары, күп быуатлыҡ тарихы менән тығыҙ бәйләнгән. Юҡҡа ғына башҡорттар XVII быуаттың беренсе яртыһындағы - XVIII быуаттағы башҡорт ихтилалдары барышында үҙ хандарын (мәҫәлән, Ҡараһаҡал) күтәрергә тырышмаған. Тарихсылар Р. Буканова, Н. Мәжитов, Д. Вәлиев һәм башҡалар яҙыуынса, башҡорттарҙың дәүләтселек традициялары ла быны раҫлай.**

Шуны ла билдәләп китергә кәрәк: совет тарих фәне, 1917 йылғы башҡорт милли хәрәкәте революцияға ҡаршы, реакцион булған, тип, территориаль автономия иғлан итеүгә кҫҙ йома. Совет тикшеренеүселәре хатта башҡорт хәрәкәтенең үҙен халыҡ менән тәрән һәм ныҡлы бәйләнеше булмаған буржуаз-юғары ҡатлам өсөн генә ойшторолған булған, тип күрһәтергә тырыша. Быңдай ҡараш, беренсенән, милли мәсьәләгә синфи, марксистик-ленинсы ҡараштан, йәғни кешеләрҙең этносоциаль берләшмәһен бер-береһе менән ярашмаған, үҙ-ара ҡаршы тороусы ике көскә бүлергә тырышыу теләгенән тыуа. Икенсенән, совет фәнендә XX быуат башындағы башҡорттар тураһында, үҙбилдәләнеш идеяһы бөтөнләй аңлашылмаған һәм буй етмәҫлек булған күсмә халыҡ, тигән ҡараш өҫтөнлөк итә.

Әйткәндәй, автономиялы Башҡортостандың аяҡҡа баҫыуы тарихы тураһындағы был ҡалыплашҡан фекер тикшеренеүселәр, бигерәк тә төрлө публицистар тарафынан хәҙер ҙә файҙаланыла. Мәҫәлән, "Профиль" журналы биттәрендә (март 1998) Зәки Вәлиди тураһында мәҡәлә донъя күрҙе. Уның авторҙары фекеренсә, ғалим "күсмә тормош алып барыусы, белемдәре урта быуат кимәлендә булған башҡорттар араһынан" сыҡҡан һәм ул, ҡырағай күсмә халыҡ араһынан сыҡҡан "берҙән-бер интеллектуал", үҙенең күсмә халҡын Европа дәүләт мәҙәниәте ҡаҙаныштары - демократия һәм федерализм менән бәхетле итергә тырышҡан..." Әммә был мәҡәләнең әсе телле авторҙары шундай әһәмиәтле мәлде иҫәпкә алмаған: башҡорттар шул саҡта уҡ азатлыҡ, милли мөхтәриәт, хөкүмәт, милли дәүләтселек һүҙҙәренең мәғәнәһен яҡшы аңлаған. Шулай булмаһа, 1917 йылда Башҡортостанды милли мөхтәриәт йәки милли-территориаль автономия итеп иғлан иткәндән һуң башҡорт халҡы араһындағы дөйөм ҡыуаныс-ты, энтузиазмды һәм бығаса булмаған рухи күтәренкелекте нисек аңлатырға? Йәки, мәҫәлән, ни өсөн халыҡ милли частар ойоштороу идеяһын ҡыуаныып ҡаршы алған һәм башҡорт хәрәкәте лидерҙарының Башҡортостан автономияһын танырға теләмәүсе большевиктарға ҡаршы көрәшкә саҡырыуын шунда уҡ күтәреп алған?

Башҡорт милли хәрәкәтенең төрлө халыҡ ҡатламының ихтыяжын сағылдырыуы, уның байҙарға ла, ярлыларға ла, интеллектуалдарға ла, наҙан крәҫтиәндәргә лә таяныуы көн кеүек асыҡ. Милли хәрәкәттә синфи көрәшкә урын юҡ, сөнки башҡорт йәмғиәтенең социаль сифаттар буйынса бүленеүе үҙбилдәләнеш өсөн көрәш идеяһының үҙен һайлау алдына ҡуйыр ине. Бынан тыш, 1917 йылда, билдәле тарихи ваҡиғалар ағышында, аныҡлап әйткәндә, хәрби традициялар өҫтөнлөк иткәндә, башҡорт халҡы Рәсәйҙең Көнсығыш халыҡтарының милли-азатлыҡ көрәшендә алғы сафтарҙа була. Шуны әйтеү етә: Зәки Вәлиди Башҡорт автономиялы республикаһына нигеҙ һалыусы ғына түгел, Төркөстан халыҡтарының үҙ аллылыҡ көрәше лидерҙарының береһе була.

Башҡортостанда милли-дәүләт ҡоролошо 1917 йылдың июль-августарында үткән беренсе башҡорт съездары менән бәйле. Был съездарҙа тәү сиратта территориаль автономия мәсьәләһе ҡарала. Октябрь революцияһы алдынан башҡорт милли хәрәкәтенең етәксе органы, аныҡ программаһы була, ул халыҡ менән тығыҙ бәйләнеш урынлаштыра. Бында, һис һүҙһеҙ, Зәки Вәлидиҙең һәм башҡорт хәрәкәтенең башҡа лидерҙарының, белемле, тыуған халҡының ихтыяжын һәм өмөт-ышанысын аңлаған кешеләрҙең өлөшө ҙур.

Автономия Октябрь революцияһынан һуң иғлан ителә. Беренсе Башҡорт съезында (июль 1917) булдырылған Башҡорт шураһы - башҡорт милли хәрәкәтенең етәксе органының Октябрь революцияһына, ҡолатылған Ваҡытлы хөкүмәткә, автономия, ер мәсьәләләренә мөнәсәбәте 1917 йылдың 11 ноябрендә барлыҡ башҡорт халҡына, башҡорт район һәм өйәҙ шураларына еткерелгән билдәле 1-се Фарманында сағылыш таба. Унда башҡорттарҙың талабын "иғтибарһыҙ" ҡалдырғаны өсөн Ваҡытлы хөкүмәткә ярҙам итеүҙән баш тартыу тураһында белдерелә. Шул уҡ ваҡытта Фарманда совет власы милләттәрҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғын лозунг итеп күтәреүгә ҡарамаҫтан, большевиктарҙың түңкәрелеше гәйепләнелә. Унда большевиктарҙың сәйәсәте граждандар һуғышына юл тип баһалана, уларҙың аграр программаһына ҡәнәғәтһеҙлек белдерелә, сөнки ул башҡорттарҙың үҙҙәренең аҫаба ерҙәренә хоҡуғын юғалтыуға килтерә. Фарманда бер-береһенә ҡаршы тороусы ике көс бәрелешә ҡалғанда нейтралитет һаҡлау принцибы алға ҡуйыла. Был документҡа ярашлы, башҡорттар үҙ мәнфәғәтен үҙҙәре автономия иғлан итеү, милли ҡоралы көстәр ойоштороу юлы менән яҡларға тейеш була. Фарман буйынса, автономия иғлан итеү Икенсе башҡорт съезы уҙғарылғанға, йәғни 1917 йылдың декабре башына тиклем кисектерелеп тора. Әммә Башҡорт автономияһы 1-се Фарман иғлан ителгәндән һуң 4 көн үткәс, 15 ноябрҙә (яңы стиль буйынса 29 ноябрь) иғлан ителә.

Башҡорт автономияһын Ырымбурҙа, билдәләнгән көндән алда иғлан итеүҙе Зәки Вәлиди "Рәсәйҙә хакимлыҡ иткән анархия" менән аңлата. Билдәле булыуынса, 15 ноябрь Ырымбур ҡалаһын атаман Дутов баҫып ала һәм крайҙа гәмәлдә граждандар һуғышы башлана. Быңдай шарттарҙа Башҡорт шураһының ҡарар ҡабул итеүе 1-се Фарманда яҙылғандарға һәм уның рухына тап килә, йәғни "бәлә-ҡаза йәки башбаштаҡлыҡ осраҡтары килеп сыҡҡанда", "башҡорт халҡын яҡлау һәм уның тураһында хәстәрлек күреүҙе" тәьмин итеү өсөн власты үҙ ҡулына алыу күҙаллана.

15 ноябрҙә "Ырымбур губернаһының, Пермь өлкәһенең Шадринск, Екатеринбург өйәҙҙәренең барлыҡ башҡорттарына һәм өлкә һәм район башҡорттары шураларына Башҡорт үҙәк шураһынан" тип аталған 2-се Фарман донъя күрә. Ул Башҡортостан автономияһын Ырымбур, Пермь, Өфө, Һамар губерналары сиктәрендә иғлан итә. Үҙаллылыҡ, автономиялы дәүләтселек булдырыу идеяһы башҡорт халҡында гәҙәти булмаған рухи күтәренкелек тыуҙыра. Темәс, Мораптал ауылдарында территориаль автономия хөрмәтенә Ҡөрьән уҡып, тантаналар ойошторола. Бөйөк башҡорт шағиры Шәйхзада Бабич шул көндәрҙә үҙенең "Олуғ шатлыҡ" шиғырын яҙа һәм ул Башҡорт шураһының баҫма органы булған "Башҡорт" гәзитендә донъя күрә.

Совет хөкүмәтенә килгәндә иһә, Башҡортостан автономияһын иғлан итеүгә уның реакцияһы тыйнаҡ була, ул уға бер ниндәй баһа бирмәй. Быны 22 ноябрҙә "Правда" гәзите биттәрендә автономия тураһында һәм "Башҡортостандың ойоштороу съезы" тураһындағы мәғлүмәти характерҙағы мәҡәлә лә һөйләй. "Правда" гәзитенең шундай тыныс тонлағы сығышы был акттың совет власының 1917 йылдың 2 ноябрендә "Рәсәй халыҡтарының хоҡуҡ декларацияһы"нда иғлан ителгән милләттәрҙең ирекле үҙбилдәләнеш принцибына ҡаршы килмәүе менән аңлатыла.

Автономия иғлан итеп, башҡорт хәрәкәте лидерҙары Бөтөн башҡорт ойоштороу ҡоролтайын йыйыу буйынса әүҙем эш башлай. 8-20 декабрҙә үткән Бөтөн башҡорт ҡоролтайы үҙаллылыҡты йәки Башҡортостандың автономияһын законлаштырып ҡуя. Ҡоролтай ҡарарының беренсе пункты: "Башҡорт үҙәк шураһы тарафынан 15 ноябрҙә иғлан ителгән Башҡортостан милли-территориаль автономияһын ҡоролтай бер тауыштан раҫлай", - тип белдерә. Башҡортостандың хоҡуҡи үҙаллылығын, Рәсәй Федерацияһының автономиялы өлөшө булараҡ, Үҙәк власть закон тәртибендә раҫларға һәм нығытырға тейеш була. Ҡоролтай "Башҡортостан менән автономиялы идара итеү" махсус положениеһы менән "Кесе Башҡортостан"ды тығыҙ кантондан торған үҙенсәлекле идара берәмегенә әйләндерә.

3-сө Бөтөн Башҡорт ойоштороу йыйылышынан һуң Үҙәк шура, һуңынан Башҡортостан хөкүмәте милли автономиялы дәүләтселек төҙөү буйынса ҙур эш башҡара. 1917 йылдың ноябрь-декабрендә уҡ Ырымбур губернаһы сиктәрендә урындағы үҙидаралыҡтың үҙ системаһы булдырыла. "Кесе Башҡортостан" сиктәрендә автономиялы идара итеү системаһы Башҡортостан хөкүмәте һәм башҡорт гәскәре аҡтар лагерында булғанда ла гәмәлдә була. Быңа ни өсөн 1919 йылда Башҡорт автономияһын таныу шарттары тураһында Үҙәк власть менән һөйләшеүҙәрҙе Башҡортостан хөкүмәте һәм Шураһы вәкилдәре алып бара. Быңа ни өсөн һүҙ 1919 йылдың мартында Үҙәк власть тарафынан башҡорт хөкүмәте менән Килешеү төҙөү юлы аша башҡорт халҡының гәмәлдәге автономияһының танылыуы тураһында барырға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәсәй Федерацияһының хәҙерге ижтимағи-сәйәси ысынбарлығынан сығып, башҡорттарҙың автономияны большевиктар ҡулынан алмауын билдәләү бик мөһим. Башҡорт халҡы территориаль автономия алыуға хоҡуҡты ҡулына ҡорал тотоп, үҙенең ҡоралы көстәренә таянып яулап алған. Башҡорт хөкүмәтенең аҡ башҡорт частарының советтар һәм Ҡыҙыл Армия яғына сығыуы айҡанлы саҡырыуында автономияны азатлыҡ өсөн көрәшеүсе халыҡ "ҡан түгеп" яулауына юҡҡа ғына баҫым яһалмай.**

**Марат ҠОЛШӘРИПОВ, тарих фәндәре докторы.**

***✓ Һәр бер чиновниктың үҙ эшенә ҡарата ошондай мөнәсәбәтен бик күрге килә лә бит. Ни өсөн күп кенә яҡшы башланғыстарыбыҙ тормошҡа ашмай? Сөнки ундай эштәрҙең башында тороусыларҙа яуаплылыҡты тойоу юҡ.***

# ЕТЕГӘНДӘЙ

## КИЛӘСӘККӘ

(Башы 1-се биттә).

**▸ Уңышлы булыуҙың сере нимәлә, тип уйлайһығыҙ? Бының өсөн ныҡлы характер кәрәкме, тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ талап ителәме, әллә тыумыштан уңышлы кеше булып тыуыуың фарызмы?**

**Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы:** Кешенең уңышлы булыуының сере үҙендә. Беренсенән, белемең булыуы мотлаҡ, икенсенән, тырышлығың, ныҡышмалылығың, яуаплылығың булмаһа, уңышлы кеше булып тыуыу менән генә бер ни атҡарып булмай. Шулай уҡ эшеңә, бергә эшләгән коллегаларыңа, ғаиләңә, халҡыңа, һине уратып алған донъяға мөхәббәтле мөнәсәбәттә булһаң ғына һинең эшең уңышлы барасаҡ. Әгәр ҙә һин бер төрлө уйлаһаң, икенсе төрлө һөйләһәң, өсөнсө төрлө эшләһәң, күңел тыныслығың юғала һәм башҡарған эшең дә уңышлы булмай. Киреһенсә булған осраҡта күңел тыныслығы табаһың һәм уңышҡа юлығаһың.

Беҙҙең уңышлы булыуыбыҙ иң тәүҙә тәрбиәләнгән ғаиләбеҙҙән, белем алған мәктәбебеҙҙән килә. Беҙ Ҡадурий менән заманында 1-се Республика интернат-мәктәбендә бергә уҡыныҡ. Беҙгә үҙ эшенең маһиры булған алдынғы ҡарашлы уҡытыусыларҙың йоғонтоһо ҙур булды. Тәүге уңыштарға өлгәшкәндән һуң беҙҙең алда икенсе маҡсат барлыҡҡа килде, ул да булһа, кешеләргә ярҙам итеү мөмкинлеге. Тәүге осорҙа беҙ үҙебеҙ, был кешегә шул кәрәк, ә быныһына бындай ярҙам кәрәк, тип, һорамаһалар ҙа үҙебеҙсә изге эштәр ҡыла торғайныҡ. Аҡсалата ярҙам итә башлағас, үҙебеҙҙең яңылыш юлда барғаныбыҙҙы аңланыҡ, дөрөҫөрәге, беҙгә быны аңлаттылар. Был - уңышлы булыуҙың тик Хаҡ Тәғәлә аша ғына аңлашылған юлы. Баҡтиһәң, беҙ фәҡәт фәҡирҙәргә, ғәриптәргә, ҡарауһыҙ ҡарт-ҡороларға ғына, балаларға ғына ошо рәүешле ярҙам итә алабыҙ икән.

**Ҡадурий Әбдрәхим улы:** Үткән быуаттың 90-сы йылдарында үҙеңдең шәхси эшеңде асыу мөмкинлеге барлыҡҡа килгәс, күптәр быны күп итеп аҡса туплау, байыу мөмкинлеге тип аңлап яңылышты, шул арҡала уларҙың эштәре лә юҡҡа сыҡты. Алдағы йылдың апрелендә беҙҙең фирма ойошторолоуына егерме биш йыл тула. Был быуаттың дүрттән бер өлөшөнә тиң. Ә инде 90-сы йылдарҙа барлыҡҡа килгән предприятиелар араһында беҙҙеке иң ололарынан иҫәпләнә. Беҙҙең сәнәғәт йәмғиәте министрлыҡтың приказы буйынса Уралдағы, Себерҙәге, Алыҫ Көнсығыштағы нефть сығарыусы предприятиеларҙы, трестарҙы хеҙмәтләндереүсе көнсығыш филиалы булараҡ барлыҡҡа килде. 1988 йылда барлыҡҡа килгән беҙҙең йәмғиәттә 1992 йылда 200-ҙән ашыу кеше эшләне. Беҙгә ул саҡтағы Башҡортостан Өлкә Комитетының беренсе секретары Миҙхәт Шакиров үҙ фатихаһын биреп, йәмғиәт алдына оло бурыс йөкмәтте. Беҙ ул ваҡытта күп итеп аҡса эшләү, байығыу тураһында уйламаныҡ та. Етмәһә, беҙҙең йәмғиәт эш менән үҙ-үҙен тәьмин итергә тейеш ине. Беҙ баштан уҡ заказсыларҙы үҙебеҙ табып, хужалыҡ килешеүҙәре төҙөп, үҙебеҙҙең көндө үҙебеҙ күрергә тейеш тигән маҡсатты алға ҡуйҙыҡ. Себерҙән Өфөгә ҡайтып, көнсығыш филиалды директор сифатында үҙем ойошторҙом. Шунан донъялар үҙгәреп, 1991 йылдан барлыҡ предприятиелар ҙа ирекле йөҙөүгә, йәғни тулы автономия шарттарына ҡуйылды. Беҙгә был осраҡта үҙебеҙҙең алдан эште үҙаллы алып барырға өйрәнеүебеҙ ныҡ ярҙам итте.

Шулай итеп, файҙаланылған авиация двигателдәренән компрессорҙар эшләп, һауа өрҙөрөп, нефть торбалары эстәрен таҙартыу эшенә тотондоҡ. Икенсе ысулыбыҙ - әле файҙаланған поршендар ярҙамында торбаларҙы таҙартыу. Бер аҙҙан Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып поршендар етештереп һата башланыҡ, яңы йүнәлеште ҡатыным Миңзәлә етәкләне. Элекке поршендар мораль яҡтан да, техник йәһәттән дә ныҡ иҫкергәйне. Йәғни беҙҙе уңышҡа алып килгән юл фәнгә һәм етештереүгә бәйле булды.

Нисек кенә ҡыйын булмаһын, бер башлаған эшемде ташламайынса, аҙаҡҡаса ошо маҡсатыма тоғро ҡалыуым бөгөнгөмә алып китеп еткерҙе лә инде. Төрлө ымһындырғыс тәҡдимдәр ҙә булды, әммә үҙ һөнәремә тоғролоғом мине уңышҡа алып килде.

**▸ Аҡса эшләүҙе маҡсат итеп ҡуйманыҡ, тип әйтһәгеҙ ҙә, аҡсаны икенсе урынға ҡуйһағыҙ ҙа, үҙ эшен асыусы күптәр эш башлау өсөн старт капиталы кәрәк, ти. Был осраҡта нисек?**

**Ҡадурий Әбдрәхим улы:** Аҡса эшләү барыбер ҙә икенсел маҡсат булырға тейештер. Беҙҙең фирманың старт капиталы - үҙ эшенең оҫтаһы булған кешеләребеҙ, белгестәребеҙ булды. Улар һәр ҡайһыһы нефть, авиация институтын тамамлаусы юғары белемлеләр. Уларҙың күбеһе менән мин элек бергә эшләгәйнем. Аҡса ни тиклем күп булмаһын, уны бер ай, уҙа барһа, бер йыл ҡулланырға була, ул барыбер бөтә, ә белемең, тәжрибәң ғүмерлек. Белем, тәжрибә артҡан һайын, унең мөмкинлеге лә арта, күбәйә бара. Бөгөн беҙҙә етмешләп кеше эшләй, быуындар алмашыныуын да тоймайбыҙ, йәштәр ҙә күп беҙҙә.

Аҡса - яуызлыҡ, тиҙәр. Минең иһә аҡсаға үҙ ҡарашым бар. Бына, мәҫәлән, ручка яҙыу өсөн кәрәк, яҙыу инструменты, ҡоралы. Әгәр ҙә мин ручканың яҙа торған башы менән түгел, икенсе башы менән ҡағыҙ өҫтөнән йөрөтһәм, яҙа алмайым. Хатта ручка менән дөрөҫ эш итмәһәң дә, яҙыу килеп сыҡмай. Мин хатта ручканы һул ҡулыма тотоп та яҙа алмайым. Шуның кеүек, шулай уҡ инструмент һаналған аҡса ла үҙе менән дөрөҫ эш итеүҙе талап итә. Әгәр ҙә етәксе кеше аҡсаны дөрөҫ итеп ҡуллана алмай икән, был хәл эшкә кире йоғонто яһаясаҡ. Аҡсаны нисек итеп дөрөҫ ҡулланырға һуң? Әйтәйек, һин заказсыңдан бер миллион һум аҡса алдан алдың икән, ти. Шул аҡса ауыр йөк булып, һинең елкәңә менеп ултыра. Иң тәүҙә һин шул аҡсаға эш өсөн кәрәкле сифатлы материал һатып алырға һәм килешелгән ваҡытҡа сифатлы итеп заказ биреүсенең эшен үтәргә бурыслыһың. Заказсы һинең башҡарған эшеңде ҡабул итеп, үҙенең риза булыуын белдермәйенсә, был аҡсаның йоғонтоһо һаман да һинән китмәй торасаҡ.



> ***"Румикс" ғилми-етештереү фирмаһына директорлыҡҡа тәҡдим булғас, мин ике аҙна һуҙымында уйланып йөрөнөм. Был эште алып бара аламмы-юҡмы, тип уйландым. Бер нәмә шикһеҙ: рухи көсөм быға етерлек. Баштан уҡ мин эшкә ҡарашымды асыҡланым, маҡсатымды билдәләнем, йәғни мин үҙем өсөн түгел, ә ошонда эшләүсе кешеләргә эш ҡушып, шуны эшләтеп, уларға йәшәү, балаларын тәрбиәләү өсөн хеҙмәт хаҡы түләргә бурыслымын. Әгәр ҙә мин үҙем етәкләгән фирманың һалымдарын ваҡытында дөрөҫ итеп түләп бара алһам, ул сағында уҡытыусылар балаларға белем бирә аласаҡ, табиптар кешеләрҙе һауыҡтыра аласаҡ. Ҡыҫҡаһы, мин үҙемдең хеҙмәтем менән дәүләтебеҙҙең бер ойоштороусыһы булараҡ сығыш яһай алам.***

**▸ Ә алған бурысыңды ҡайтармаған саҡта нимә була?**

**Ҡадурий Әбдрәхим улы:** Аҡса ул энергия ағымын тәшкил итә һәм алған бурысыңды хужаһына ҡайтармаһаң, һиңә килгән аҡса ағымы туҡтала.

**Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы:** Туҡталып ҡына ҡалмай, был энергия ағымы һин бурыслы булған кешегә китә.

**Ҡадурий Әбдрәхим улы:** Шуға күрә лә мин һәр ваҡыт башҡарылған эш өсөн хеҙмәткәргә хаҡын шундуҡ түләүҙе талап итәм. Әгәр ҙә шулай итмәһәң, аҡса ағымының беҙҙән китерен беләм. Бына беҙҙең фирма егерме биш йыл эшләй һәм беҙ хеҙмәткәрҙәребеҙгә эш хаҡын һуңлатҡаныбыҙ булманы. Беҙҙең фирмала беренсе урында эш хаҡын ваҡытында һәм тулы күләмдә биреү тора, икенсе урында - хөкүмәт алдындағы бөтөн һалымдарҙы түләргә, ә ҡалған килемде үҫешебеҙгә ҡулланабыҙ. Үҫешебеҙгә тик үҙебеҙҙең генә табышты ҡулланабыҙ, банктарҙан кредит алғаныбыҙ булманы. 1990 йылда беҙгә бәйле булмаған сәбәп арҡаһында барлыҡ предприятиеларҙың иҫәп счетын ваҡытлыса яптылар, тик шул мәлдә генә беҙ хеҙмәткәрҙәребеҙгә эш хаҡын үҙ ваҡытында түләү өсөн үҙебеҙҙең бер аҙ аҡсабыҙ бар ине, шул аҡсанан түләп торорға тура килде. Беҙ хеҙмәткәрҙәребеҙгә процентһыҙ кредитҡа төрлө срокҡа аҡса ла бирәбеҙ. Аҡсаның энергияһы менән бик һаҡ эш итергә тура килә. Ҙур аҡсаның яуаплылығы ла ҙур була. Шуға күрә ҙур аҡса ҡулға килеп эләккәндән һуң уға ҡарата яуаплылығың кәмерәк булһа, бындай мөмкинлек ҡабат һиңә килеп сыҡмауы ла бар.

**Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы:** Әгәр ҙә беҙ эшмәкәрлек иткән тармаҡта Ҡадурий Әбдрәхим улының ҡултамғаһы бар икән, был үҙе уҡ эштең ваҡытында сифатлы итеп башҡарылыуын, тейешле эш хаҡының ваҡытында түләнерен аңлата. Шуға күрә ул ҡул ҡуйған документтарға ышаныс ҙур. Был ышанысты ул белемгә ынтылыуы, фиҙаҡәрлеге һәм ғәҙел булыуы менән яуланы. Ул үҙенә генә түгел, башҡа кешеләргә лә яуаплы ҡарай.

**▸ Һеҙ совет дәүерендә формалашып, белем алып эш башлаған кеше булараҡ, 90-сы йылдар һынылышын нисек кисерҙегеҙ? Нимә генә тимә, ул осорҙа хеҙмәткә мөнәсәбәт бөтөнләй башҡаса булды. Яңы шарттарға өйрәнеп китеү ҡыйын булманымы?**

**Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы:** Бер яҡтан ҡарағанда, ул заманда йәшәү һәм эшләү еңел ине. Әйтәйек, һиңә план бирелә, шуны үтәйһең дә, билдәләнгән айлыҡ эш хаҡыңа ҡушып, премия алаһың. Шул уҡ ваҡытта һин эшләйһеңме-юҡмы, айлыҡ эш хаҡы килеп тора. Ул заманды нисек кенә итеп тәнҡитләмәһендәр, ул саҡта атай-әсәйҙәр, уҡытыусылар беҙгә шул тиклем яҡшы тәрбиә нигеҙе һалды. Шуға күрәлерме, беҙ үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, аңһат ҡына байығыуҙың төп ысулы булған алыпһатарлыҡ юлы менән китеүгә ҡырҡа ҡаршы булдыҡ. Һеҙ беләһегеҙ, баҙар әйбергә хаҡты арттырып һатыуға, икенсе һүҙ менән әйткәндә, алдауға ҡоролған. Ҡыҫҡаһы, совет дәүерендәге булған төп әхлаҡ принциптары беҙҙә һаҡланып ҡалды.

"Румикс" ғилми-етештереү фирмаһына директорлыҡҡа тәҡдим булғас, мин ике аҙна һуҙымында уйланып йөрөнөм. Был эште алып бара аламмы-юҡмы, тип уйландым. Бер нәмә шикһеҙ: рухи көсөм быға етерлек. Баштан уҡ мин эшкә ҡарашымды асыҡланым, маҡсатымды билдәләнем, йәғни мин үҙем өсөн түгел, ә ошонда эшләүсе кешеләргә эш ҡушып, шуны эшләтеп, уларға йәшәү, балаларын тәрбиәләү өсөн хеҙмәт хаҡы түләргә бурыслымын. Әгәр ҙә мин үҙем етәкләгән фирманың һалымдарын ваҡытында дөрөҫ итеп түләп бара алһам, ул сағында уҡытыусылар балаларға белем бирә аласаҡ, табиптар кешеләрҙе һауыҡтыра аласаҡ. Ҡыҫҡаһы, мин үҙемдең хеҙмәтем менән дәүләтебеҙҙең бер ойоштороусыһы булараҡ сығыш яһай алам. Баштан уҡ хеҙмәткә ҡарата ошондай мөнәсәбәтем миңә уңышлы итеп эшләп китергә мөмкинлек бирҙе лә инде. Әгәр ҙә мин ул саҡта директор булараҡ тик үҙемде, фәҡәт үҙемдең йәшәү сығанағымды тәьмин итеүҙе генә ҡайғыртһам, бында эшләй алмаҫ инем. Мин башҡаса булдыра алманым, сөнки мине үҫкән ғаиләмдә, тәрбиә алған совет мәктәбендә тап шулай булырға өйрәттеләр.

Һәр бер чиновниктың үҙ эшенә ҡарата ошондай мөнәсәбәтен бик күрге килә лә бит. Ни өсөн күп кенә яҡшы башланғыстарыбыҙ тормошҡа ашмай? Сөнки ундай эштәрҙең башында тороусыларҙа юғарыла мин әйтеп үткән яуаплылыҡты тойоу юҡ. Беҙ 90-сы йылдар башындағы һынылышты еңел үткәрҙек, сөнки беҙ совет осоронда алған тәрбиәбеҙ, белемебеҙ менән үҙгәртеп ҡороуҙар осорондағы ауырлыҡтарҙы йырып сыға алдыҡ.

**Ҡадурий Әбдрәхим улы:** "Заманды әрләмәгеҙ, заман ул - мин" ти Аллаһы Тәғәлә. Беҙ Миңзәлә менән бер төрлө тәрбиә алғанбыҙ. Беҙҙе атай-әсәйҙәр булғанына шөкөр итеп йәшәргә өйрәтте. Интернат-мәктәптең директоры Төхфәт Аслаев беҙгә лә, уҡытыусыларға ла, үҙенә лә бик талапсан булды. Ғөмүмән, ғаиләбеҙҙә алынған тәрбиәгә уҡытыусыларыбыҙ Лениза Хәсәнованың, Таңһылыу Күсимованың, Софья Әхтәмованың һәм башҡа апай-ағайҙарҙың тәрбиәһе лә өҫтәлеп, беҙ шул саҡтан алып 90-сы йылдарҙа көтөлгән һынылышҡа әҙер булып үҫтек. Күптәр был һынылышты үткәрә алмай һынды.

**▸ Алыпһатарлыҡта алдашыу норма һанала, әгәр ҙә алдаш-**

***✓ Башҡорт кешеһе был эш менән шөғөлләнә алмай, тигән һүҙ яңылыш, кемдеңдер нимәнелер аҡларға һәм йәшерергә теләүҙән тыуған һылтау ғына. Бына беҙ бит эшләйбеҙ һәм беҙҙең һымаҡ башҡорттар бихисап.***

**маһаң, кемделер отмаһаң, уңышҡа өлгәшә алмайһың, тиҙәр. Ә бына сәнәғәт тармағында алдашыу бармы хәҙер?**

**Ҡадурий Әбдрәхим улы:** Алдашыу бар. Минеңсә, алдашыу тойғоһо кешенең эсендә, күңелендә ултыра һәм был тойғо уның шөғөлләнгән эшенә, һөнәренә бәйләнмәгән. Тәрбиәһеҙ кешене хет мулла итеп ҡуй, ул барыбер алдаясаҡ. Үҙҙәренә сәйәси капитал туплау өсөн депутатлыҡҡа кандидаттар ҙа, сәйәсмәндәр ҙә, журналистар ҙа алдаша. Беҙҙең тармаҡта ла алдаусылар күп ул. Кешене алдау маҡсатында "бер көнлөк" предприятиелар барлыҡҡа килә. Улар килешеү буйынса аҡсаны ала ла, үҙҙәрен банкрот тип иғлан итеп, фирмаларын ябып та ҡуя. Әммә алдау бар урында булған хәлдә лә, Аллаһы Тәғләне һәм үҙ-үҙеңде алдауы мөмкинме икән?

▸ **Ни өсөн башҡорттар араһында үҙ эшен асыусылар, эшҡыуарҙар һирәк, тип уйлайһығыҙ? Ҡырағай капита-**

ыҡ-түлек менән тәьмин итеү өсөн генә лә ниндәй хужалыҡ эше алып барыу кәрәк булған. Былар барыһы ла беҙгә күктән төшмәгән. Шулай булғас, башҡорт кешеһенең эшҡыуар була алыуы-алмауы хаҡында һүҙ бөтөнләй булырға тейеш түгел. Ә яңыса йәшәүгә килгәндә, быға бер башҡорт ҡына түгел, бөтә ил халҡы әҙер булмай сыҡты. Элек беҙҙән эш башҡарыуҙы, план үтәүҙе генә талап иттеләр, бының өсөн 70-120 һум аҡса түләнеләр. Ошо рәүешле бар ил халҡының инициативаһы юҡҡа сығарылды. Һәр бер эшкә "була", "мин булдыра алам" тип тотонорға кәрәк.

**Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы:** Алыпһатарлыҡ беҙҙән дә килеп сыҡмаҫ ине, сөнки сауҙаның, ысынлап та, әхлаҡҡа тап килмәгән урындары бар. Беҙҙең алыпһатарлыҡ менән шөғөлләнмәүебеҙ, ә сәнәғәт йәмғиәте ойоштороуыбыҙ ҙа тап ошо сәбәпкә бәйлелер. Әхлаҡһыҙ эш беҙгә төҫ түгел. Бына, мәҫәлән, Сурай ауылында Ағинәй мәсетен халыҡ менән бергә һалдыҡ. Мәсет һаҙнаһына өсәр көн өсәр сәғәт күнекмәләр эшләй инек, ә хәҙер был эште беҙ көн дә башҡарабыҙ.

Үкенескә күрә, беҙ үҙебеҙҙең эшләгән тармаҡҡа милләттәштәребеҙҙе күпләп ала алмайбыҙ. Сөнки беҙҙең эш өсөн талап ителгән белеме һәм тәжрибәһе булған башҡорттар бик аҙ. Был проблема милләттәштәребеҙҙең күбеһенең ауылда йәшәүе һәм ауыл ерендә уҡытыуҙың түбән кимәлдә булыуына бәйлелер, тип уйлайым. Ауыл ерендәге тормош-көнкүреште йәнләндерер өсөн беҙгә юлбашсылар кәрәк хәҙер. Юҡһа, ауыл халҡы һаман да кемдер килеп нимәлер эшләп биргәнде көтөп тик ултыра.

▸ **Һеҙ икәүләшеп Хаж сәфәрендә лә йөрөп ҡайтҡанһығыҙ. Унда булыу һеҙгә нимә бирҙе? Тормошҡа, башҡаларға, үҙ-үҙегеҙгә ҡарата фекерҙәрегеҙҙе үҙгәрттеме хаж сәфәре?**

**Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы:** Хажға барырға ниәт иткәнсе мин намаҙға баҫмағайным әле. Ғәйшә менеп етеп килгәндә уға ярҙам итеү урынына, киреһенсә, тау түбәненә этеп төшөрөүең дә бар.

**Ҡадурий Әбдрәхим улы:** Хажға беҙ 2006 йылда барҙыҡ. Мин дә унда барғансы намаҙ уҡымай инем, "Әл-Ихлас"ты ғына ятҡа белдем. Атайым мулла булһа ла, беҙҙе намаҙ уҡырға өйрәтмәне. Аҙаҡ үҙенән был хаҡта һорағайным: "Әгәр ҙә мин һеҙҙе намаҙға өйрәтһәм, бының өсөн мине төрмәгә алып китһәләр, һеҙҙе кем ҡарар ине?" - тип яуап бирҙе ул. Атайыбыҙ Зәйнулла ишан Рәсүлев мәҙрәсәһендә уҡыған белемле мулла ине. Хаж ғәмәлдәре ҡылғанда шул белгән бер сүрәне генә ҡат-ҡат ҡабатлап йөрөргә тура килде. Аҙаҡ барлыҡ ғәмәлдәр тамамланғас, ҡайтырға аҙна самаһы ваҡыт ҡалғас, "Әл-Фәтиха"не, "Аятел көрси"ҙе ятланым, ҡайтҡас тағы ла ике аҙна эсендә намаҙ уҡырға өйрәндем.

Мәккә ҡалаһына килеп етер алдынан һуңғы туҡталышта ирҙәр хаж ҡылырға әҙерлек ғәмәлдәрен ҡылып ихрам кейәләр. Шул туҡталышта ниңәлер, Мин-

Хаждан ҡайтҡас, беҙгә күптәр "Хаж оҡшанымы?" тигән һорау бирҙе. Миңә ҡалһа, был һорау урынһыҙ. Беҙгә хаж нисек оҡшарға тейеш һуң, беҙ бит унда турист булып барманыҡ. Бында хатта "Ҡыйын йәки еңел булдымы?" тигән һорауҙар ҙа урынһыҙ. Беҙ бит унда үҙ теләгебеҙ менән барҙыҡ.

Миңә хажда иң ныҡ тәьҫир иткәне шул булды: һин унда 5 миллион кеше менән бер үк ваҡытта тороп намаҙ уҡыйһың. Мин шул саҡта Минзәләгә: "Америкамы, башҡа илме, мосолманды юҡ итергә күпме генә тырышмаһындар, уларҙы бер ваҡытта ла, бер кем дә еңә алмаясаҡ", - тинем. Ысынлап та, ул көстө тап бергәләп намаҙ уҡығанда тояһың. Ә ниңә шундай көстө бергә туплап, яҡшы маҡсатҡа йүнәлтеп йәшәмәҫкә һуң? Милләтте дин ярҙамында һаҡлауҙың да сере ошондалыр, тип уйлайым. Урыҫ милләтле бер күршем бер мәл ейәненең ислам диненә килеүе һәм тәмәке тартыуын һәм эсеүен ташлауы хаҡында һөйләне. Күршем утыҙ йәшен тултырған ейәненең был юлға баҫыуын хуплауын да йәшермәне. Был да күп нәмә тураһында һөйләй, ислам диненең кешене дөрөҫ юлға баҫыуына булышлыҡ итеүе бәхәсһеҙ.

▸ **Әгәр ҙә донъяла Өфө тигән ҡала булмаһа, унда интернат-мәктәп булмаһа, һеҙ шунда осрашмаһағыҙ, тормош юлығыҙ нисегерәк булыр ине, тип уйлайһығыҙ?**

**Минзәлә Вәлиулла ҡыҙы:** Беҙҙең фирмаларға башҡа бик күп кешеләр үҙҙәренең яҙмышын бәйләгән һәм улар бында осраҡлы ғына килеп эләкмәгән. Шулай булғас, беҙ Ҡадурий менән мотлаҡ осрашырға, ғаилә ҡорорға һәм ошо эште алып барырға тейеш булғанбыҙҙыр ул. Юғиһә, беҙ был тормошто бары тик осраҡлыҡтарҙан ғына тора, тип әйтергә мәжбүр булыр инек. Аллаһы Тәғәлә беҙгә был яҙмышты, был эште һынау өсөн биргәндер, тип уйлайым.

**Ҡадурий Әбдрәхим улы:** Минзәлә менән ҡалай булһа ла осрашыр, ҡауышыр инек барыбер. Ә инде һөнәргә килгәндә, минең тарихсы юлы менән китергә мөмкинлегем бар ине. Беҙҙе интернат-мәктәптә тарихтан Әнүәр Әсфәндийәров һәм Марат Хафизов уҡытты, тарих буйынса түңәрәк тә алып бара инеләр. Тик Аллаһы Тәғәлә атымдың теҙгенен икенсе яҡҡа тартты.

# “ЕТЕ ТАУ”... илтер тау

**лизм тип аталған шарттарҙа ниндәйҙер уңышҡа өлгәшеү өсөн ҡайһы бер әхлаҡ принциптарын аша атлап сығырға ла тура килә, тиҙәр. Шуға күрә беҙҙең халыҡ араһында эшҡыуарҙарҙың аҙыраҡ булыуын милли характер, менталитет, милләт сифаттары менән бәйләп аңлатып буламы?**

**Ҡадурий Әбдрәхим улы:** Алыпһатарлыҡты белмәйем, әммә сәнәғәт менән кешелектең 4 кенә проценты шөғөлләнә ала икәнен беләм. Башҡорт кешеһе был эш менән шөғөлләнә алмай, тигән һүҙ яңылыш, кемдеңдер нимәнелер аҡларға һәм йәшерергә теләүҙән тыуған һылтау ғына. Бына беҙ бит эшләйбеҙ һәм беҙҙең һымаҡ башҡорттар бихисап, сауҙала аҙыраҡ булһа ла, етештереү сәнәғәтендә күберәк беҙҙең милләттәштәр. Был да үҙенә күрә бер күрһәткес. Беҙҙең арала ҙур байлыҡҡа эйә булған олигархтар юҡтыр ҙа, әммә улар беҙгә кәрәкмәй ҙә.

Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ элек Тубыл йылғаһынан алып Волгаға тиклем араны тотоп йәшәгән. Улар быны нисек эшләгән һуң? Был ғәмәл оло эшмәкәрлекте талап иткән, атай-олатайҙарыбыҙ заманына күрә тауар ҙа етештергән, донъя баҙарында һатыу ҙа иткән. Биләмәне тотоп тороу өсөн бик ҙур көстөң кәрәк булыуы ла бәхәсһеҙ. Беҙҙең элек-электән ҡеүәтле ғәскәребеҙ булған. Ғәскәрҙең ҡеүәтле булыуы ҡеүәтле хужалыҡ итеүгә, тормош көтөүгә лә бәйле булыуы бәхәсһеҙ. Ас-яланғас, күңеле китек кешене атҡа атландырып, яуға әйҙәп булмай. Ул ғәскәрҙе аттар, яу ҡоралдары, кейем-һалым, аҙ-

лыу - бер эш, уны ла эшләтергә кәрәк бит әле. Был йәһәттән дә маҡсатлы эш алып барабыҙ, ҡайтҡан саҡта республикабыҙҙың күренекле шәхестәрен алып ҡайтып, ауылдаштар менән осрашыуҙар үткәрәбеҙ. Мәсеттәргә күпселектә ҡатын-ҡыҙҙар йөрөй, уларҙың да күбеһе мулла намаҙ уҡығанда тик ултыралар. "Ниңә

***Миңә хажда иң ныҡ тәьҫир иткәне шул булды: һин унда 5 миллион кеше менән бер үк ваҡытта тороп намаҙ уҡыйһың. Мин шул саҡта Минзәләгә: "Америкамы, башҡа илме, мосолманды юҡ итергә күпме генә тырышмаһындар, уларҙы бер ваҡытта ла, бер кем дә еңә алмаясаҡ", - тинем. Ысынлап та, ул көстө тап бергәләп намаҙ уҡығанда тояһың. Ә ниңә шундай көстө бергә туплап, яҡшы маҡсатҡа йүнәлтеп йәшәмәҫкә һуң? Милләтте дин ярҙамында һаҡлауҙың да сере ошондалыр, тип уйлайым. Урыҫ милләтле бер күршем бер мәл ейәненең ислам диненә килеүе һәм тәмәке тартыуын һәм эсеүен ташлауы хаҡында һөйләне. Күршем утыҙ йәшен тултырған ейәненең был юлға баҫыуын хуплауын да йәшермәне. Был да күп нәмә тураһында һөйләй, ислам диненең кешене дөрөҫ юлға баҫыуына булышлыҡ итеүе бәхәсһеҙ.***

тик ултыраһығыҙ, ниңә муллаға эйәреп намаҙ уҡырға өйрәнмәйһегеҙ?" тип әйтһәң, бының өсөн аяҡтары ауыртыуын һылтау итеп әйтәләр. "Һиңә рәхәт, һинең аяғың ауыртмай", тиҙәр. Ҡайҙан беләләрҙер инде улар минең намаҙ уҡығанда аяғым ауыртмағанын. Быны нимә өсөн һөйләйем һуң? Намаҙ уҡырға ғына түгел, ғөмүмән, ниндәйҙер эште эшләргә өйрәнер өсөн ана шул "аяҡ ауыртыу" мәлен үткәрәһең, йәғни туҡтауһыҙ йүгерәһең инде. Мин быны оло кинәйә менән әйтәм. Дөрөҫөн әйткәндә, совет осоро беҙгә яҡшы тәрбиә һәм белем бирһә лә, күптәребеҙ, ана шулай, әҙер булған нәмәгә өйрәнеп бөткән шул. "Аяҡ ауыртыу мәле" тигәндән, беҙҙең ғаиләлә, мәҫәлән, гимнастика эшләү һис шикһеҙ үтәлә торған йолаға, традицияға әйләнгән. 55 йәштән беҙ

Зәбих ҡыҙы Иҙрисоваға бик рәхмәтлемен. Ул еңел һәм дөрөҫ итеп намаҙға баҫырға өйрәтте. Уға тиклем өләсәйем бала сағымдан өйрәткән "Ҡолһуалла"ны ғына белә инем. Шуға күрә, хажға барыуым мине намаҙға баҫтырҙы, тип әйтә алам. Мин унда булғанда тағы ла ҙур бер хәҡиҡәтте аңлап ҡайттым: кеше башҡа кеше өсөн бер йотом һыу, бер тәғәм ризыҡ ҡаба алмай, ғөмүмән, һәр ғәмәлен кеше үҙе



башҡарырға тейеш. Хажда ирҙәр бер урында, ҡатын-ҡыҙҙар икенсе урында айырым йәшәнек. Иремдең температураһы күтәрелеп киткәс, уның янында ултырырға тура килде. Бер мәл икенсе урынға күсенеү өсөн автобус килеүе хаҡында хәбәр иттеләр. Мин әйберҙәрҙе алып автобусҡа ултырып киттем, ә Ҡадурий тороп ҡалды. Беҙ бынан шундай һығымта яһаныҡ: тимәк, нисек кенә ҡыйын булһа ла, ул был араны тик үҙе үтергә тейеш булған. Шунан һуң күп кенә кешеләргә ярҙам итергә булып, уларҙың барлыҡ проблемаларын үҙ өҫтөбөҙгә алырға тырышыуыбыҙҙың да дөрөҫ булмағанын аңланыҡ. Эйе, әгәр ҙә кешегә ниндәйҙер ярҙам күрһәтһәң, бының менән уны һалынырға өйрәтергә лә, киреһенсә, батырырға ла мөмкинһең бит әле. Кеше тауға

зәлә лә, мин дә йоҡлап киткәнбеҙ. Бер мәл уянып китһәк, бер кем дә юҡ. Баҡтиһәң, башҡалар йыуынырға киткән икән. Был беҙгә тәүге һынау булды. Сөнки ҡайҙа барырға белеп булмай, кешенән һорашыр инек, телде белмәйһең. Шунда Минзәлә әйткәнде мин дә аңланым: һәр кем үҙенең ғәмәлен тик үҙе генә эшләргә тейеш. Кеше унда мыжғып тора, автобустар ҙа йөрөп тора, ә мин яңғыҙмын һәм был саҡта Аллаһы Тәғәлә минән һорау ала кеүек тойолдо. Тәһәрәт өсөн кәрәкле әйберҙәремде тотоп алғанмын да үҙебеҙҙекеләрҙе эҙләп китеп барам, иҫем бар ҙа, тик аңым ғына юҡ һымаҡ. Ҡыҫҡаһы, Аллаһы Тәғәлә миңә бында кешегә һалынырға ярамағанлыҡты бик яҡшы итеп аңлатты һәм мин йыуынырға киткән үҙебеҙҙекеләрҙе барып табып алдым.

## ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Ҡадурий Әбдрәхим улы етәкләгән йәмғиәттең "Ете тау" тип аталыуы ла юҡҡа ғына түгел. Кешелектең һәм милләттәрҙең тарихын өйрәнеүселәр кешелектең "ете халыҡ", милләттең "ете ырыу" принцибы буйынса барлыҡҡа килеүен уларҙың һис ниндәй заман дауылына бирешмәй һаҡланып ҡалырға һәләтле булыуы менән аңлата. Кем белә, бәлки, "Ете" һанының магик көсөн тәү тапҡыр аңлаған һәм баһалаған ата-бабаларыбыҙ был ҡөҙрәттең асылын күктәрҙән, мәңгелеккә унда ҡаҙаҡланған Етегән йондоҙонан алғандыр. "Ете тау"ға ла шундай уҡ яҙмыш теләйек...**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ
әңгәмә ҡорҙо.**




**Ҡатнашалар:**
**Аҡйылан**
**Азамат**
**Гөлбикә**
**Бөркөт**
**Дүрт бала**

**Азамат.** Һаумыһығыҙ, ҡыҙҙар , малайҙар! Һеҙ ҙә, минең кеүек, Яңы йыл байрамына ашығып килеп еткәнһегеҙҙер. Әммә бына мин юлда Аҡйыланды осраттым да, уның байрам уңайы менән ниндәйҙер мажара ҡорорға теләгәнен күреп, тиҙерәк һеҙгә хәбәр итергә булдым.

**Гөлбикә.** Ә ниндәй мажара икән? Был бит иң күңелле, күстәнәсле, сағыу байрам! Мин яратам Яңы йыл байрамын! Моғайын, беҙҙе берәй тылсымы менән аптыратырға итәлер ул!

**Азамат.** Белмәйем инде, белмәйем... Өләсәйем, йыландар ғәжәп хайуандар, ти торғайны. Уларҙың бит әле саға торған холҡо ла бар...

**Бөркөт.** Башҡортостандың ауыл-ҡалаларында Яңы йыл ҡаршылағым килә, тигәс, Аҡйыланды Уралдан бында осороп алып килдем. Ул беҙҙең кәйефте ҡырырға уйлап тормайҙыр ул?

**Гөлбикә.** Шымығыҙ, ана, үҙе килә!

**Бөркөт.** Һаумы, Аҡйылан! Нисек хәлдәр? Оҡшанымы беҙҙең яҡтар?

**Аҡйылан.** Нихәл, тигән булаһығыҙ! Ана шул сәйәхәт итеп күп йөрөй торғас, күңелһеҙләндем әле мин.

**Азамат. Гөлбикә. Бөркөт.** Күңелһеҙләндең? Һин? Нимә булды тағы?

**Аҡйылан.** Бөтә ерҙә мине күреүҙәре була, балалар ғына түгел, хатта өлкәндәр ҙә йүгереп ҡаса, йә миңә киҙәнә башлай.

**Бөркөт.** Был ҡалала ла шулай, тимәксеһеңме?

**Аҡйылан.** Башҡортостан буйлап йөрөп өлгөрмәнем әле мин. Үҙең бит, "Ана, Йылан күле" тип, сиктә ҡалдырып киттең...

**Бөркөт.** Шул-шул! Мин һине башҡорт ерендә ҡалдырып киттем, сөнки унда һинең исемеңде йөрөткән күл бар. Әгәр һиңә ихтирам булмаһа, халыҡ күлде Йылан күле тип атар инеме ни?

**Гөлбикә.** Эйе шул! Улай ғына ла түгел: беҙҙә йылан исеме менән бәйле урындар бик күп ул.

**Аҡйылан.** Бер өй янына килдем дә тыңлап торам, апаһы һеңлеһен Яңы йыл байрамына әҙерләй, үҙе былай ти: "Шул ҡурҡыныс йыланға тотош йылды тапшырып ҡуймаһалар була бит инде. Еләк йыйғанда күрше Фәритте сағып, саҡ үлемдән ҡалды..." Шундай һөйләшеүҙе ишеткәндән һуң, ниндәй кәйеф булһын да, ниндәй байрам ҡайғыһы булһын?

**Азамат.** Һе... Тапҡанһың ҡайғырыр нәмә...

**Гөлбикә.** Шулай шул. Һин беҙҙе берәй тылсымың менән ҡыуандыраһың, тип көтөп торһаҡ, баҡтиһәң, һинең үҙеңде әүрәтергә кәрәк икән.

**Бөркөт.** Бәлки, әүрәтергә кәрәктер ҙә - ул бит уны тыуып килгән сабый. Бәпестәрҙе әүрәтәләр инде ул.

**Азамат.** Булмаһа, теҙгенде үҙ ҡулыма алайым әле. Ҡәҙерле балалар, әйҙәгеҙ , уйын ҡорайыҡ. Һеҙ йыландар тураһында нимә беләһегеҙ?

**1-се бала.** Мин йыландар хаҡында бик күп әкиәттәр беләм! Уларҙы миңә өләсәйем һөйләне. Унда йыландар кешеләргә әйләнә, кеше телендә һөйләшә. Ә ҡайһы бер әкиәттәрҙә, киреһенсә, Убырлы ҡарсыҡ һылыу ҡыҙҙарҙы йыланға әйләндерә. Улар шул сүрәттә лә яҡындарына ярҙам итергә тырыша.

**Бөркөт.** Йылан сүрәтендәге ҡыҙҙарға иленә ҡайтырға ҡоштар ярҙам итә, шулай бит? Ә инде тыуған ерҙәрендәге тере шишмә, тыуған яҡ моно ҡыҙҙарҙы үҙ рәүешенә ҡайтара.

**1-се бала.** Эйе, тап шулай!

**2-се бала.** Аҡйылан, ә һин беләһеңме, борон башҡорттарҙа йыландарға табынғандар, сөнки улар иң аҡыллы, зирәк хайуан һаналған. Йылан изге хайуан иҫәпләнгән, уны үлтерергә ярамаған. Ҡайһы бер халыҡтар йыландарҙы иң яуызы, ҡурҡынысы, тип иҫәпләй, ә беҙҙә улай түгел. Шуға ла ғалимдар кеше менән яҡшы мөнәсәбәттә булған йыландар Уралда йәшәй, тип иҫәпләй, күрәһең.

**Аҡйылан.** Эйе, минең ҡәрҙәштәрем Уралда бик күп шул.

**3-сө бала.** Урал, тигәндән, Аҡйылан, башҡорттарҙың бороңғо эпосы "Урал батыр"ҙа ла һинең һының ап-асыҡ һүрәтләнгән. Беҙҙә был эпосты балалар яттан һөйләй. Ә һинең образды сәхнәләштергәнебеҙ ҙә бар. Һөйләп күрһәтәйемме?

**Аҡйылан.** Әйҙә, һуң.

**3-сө бала.**

*"Ай, егетем, әйтәйем,*
*Бар серемде һөйләйем:*
*Беҙгә яҡын бер ерҙә,*
*Ҡоштар торған ҙур илдә,*
*Самрау тигән батша бар.*
*Шул батшаның Ҡояштан*
*Тыуып төшкән ҡыҙы бар.*
*Мин һораным - бирмәне,*
*"Һин йылан", тип, ҡыҙы ла*
*Мине тартып килмәне.*
*Мин атама ялындым,*
*Көнөн-кисен ялбарҙым,*
*"Атай, шуны ал, - тинем,*
*Һис булмаһа иленә*
*Утлы яуың ас", - тинем.*
*"Бөгөн ауға сыҡ, тине,*
*Йылан туның кей, тине;*
*Ун ике тарбаҡ мөгөҙлө*
*Болан табып ей, тине -*
*Шуны йотһаң, донъяла*
*Төрлө төҫкә керерһең,*
*Хәүеф белмәй йөрөрһөң;*
*Кешеләрҙең һылыуы,*
*Бер ир-егет булырһың;*
*Ҡош иленә барырһың,*
*Самрауҙың бер ҡыҙын*
*Үҙең һайлап алырһың", -*
*Тигәс, ауға сыҡҡайным,*
*Боланды ла йотҡайным;*
*Инде хәлем ҡалманы:*
*Ауыҙыма кипләнгән*
*Мөгөҙө һис һынманы,*
*Теләгәнем булманы.*
*Егет, мине хур итмә,*
*Бер изгелек ит, егет,*
*Миңә ярҙам ит, егет!*
*Атама бергә барайыҡ,*
*Ни теләһәң - алайыҡ.*
*Атамдан байлыҡ һорама:*
*Донъяла һылыу ҡыҙ бирер,*
*Аңһына ла алданма!*
*Һарай тулы мал бирер,*
*Аңһына ла алданма,*
*Ынйы-мәрйен - барыһын*
*Атам түгер алдыңа, -*
*Аңһына ла алданма!*
*Аҙаҡ сиктә атайым:*
*"Ынйы-мәрйен һөймәгән,*
*Байлыҡҡа баш эймәгән,*
*Ай, һылыу ҡыҙ, тимәгән,*
*Был донъяла йөрөп тә,*
*Ишетеп тә, күреп тә*
*Һис берәүҙе тапманым,*
*Бирер нәмәм ҡалманы,*
*Инде үҙеңә туктаным,*
*Егет, әйтсе теләгең,*
*Ҙур эшеңә бүләгем", -*
*Тиер һиңә атайым.*
*Алдан әйтеп ҡуйыйым:*
*Аждаһа туның һал, - тирһең,*
*Ҡош туныңды кей, - тирһең,*
*Ҡош телеңде сығарып,*
*Ауыҙыма бир, - тирһең.*
*Атам һине ҡурҡытыр,*
*Ташҡа төкөрөп күрһәтер,*
*Ташты һыуҙай ҡайнатыр.*
*Әгәр тауға төкөрһә,*
*Тауы иреп, һыу булыр,*
*Ағып бары шул саҡта,*
*Бер үҙенә йыйылыр,*
*Осо-сиге күренмәҫ*
*Ялтыраған күл булыр.*
*Аңһынан да ҡурҡма һин,*
*Һаман телен һора һин.*
*Атам телен үпкән һуң, -*
*Күңеле йомшап киткән һуң,*
*"Ни һорайһың бүләккә?" - тип,*
*Һиңә ҡарап әйткән һуң:*
*"Бер ҙур илдә батшаның*
*Яҡшылыҡҡа яҡшылыҡ*
*Ҡылыр эшен беләһен,*
*Үҙ һөйгәнең ни булһа,*
*Шуны миңә бирәһең", -*
*Тигәс, ынйы башлы таяғын*
*Бирһә, уны алырһың.*
*Ул таяҡтың даны шул:*
*Һыуға төшһәң, батмаҫһың,*
*Утҡа инһәң, янмаҫһың,*
*Күренмәҫкә теләһәң,*
*Һис бер йән дә күрәлмәҫ,*
*Дошман һине эҙләһә,*
*Бер ҡасан да табалмаҫ", -*
*Тиеп Зәрҡум ял барғас,*
*Урал мөгөҙҙе һындырған,*
*Йылан, боланды йотҡас,*
*Шундуҡ бер егет булған.*

**Бөтәһе бергә.** Һай, афарин!

**4-се бала.** Беләһегеҙме, йәмәғәт! Башҡорттарҙа йылан исемен йөрөткән ырыуҙар ҙа бар! Улар хәҙер ҙә яҡшы билдәле. Йылан ырыуы башҡорттары көнбайыш, төньяҡ Башҡортостанда киң таралған. XIX быуатта ғына әле уларҙың Иҙел Йылан, Эске Йылан, Тышҡы Йылан тигән ҙур-ҙур кантондары, улыстары булған. Ағиҙелдең урта һәм түбән ағымында - Иҙел Йылан, Танып йылғаһы буйҙарында - Эске Йылан, Ыҡ, Сөн буйҙарында Тышҡы Йылан ырыуҙары йәшәй. Был төбәктәрҙә Ҡыр-Йылан дайсаһы(дачаһы), Мир Йылан урманы, Йылан тауы, Йыланлы ауылы кеүек топонимик атамаларҙы ла ишетергә була.

**Гөлбикә.** Ана бит ниндәй аҡыллы, зирәк балалар килгән бөгөн Аҡйылан менән осрашырға!

**1-се бала.** Ә беҙгә уҡытыусыбыҙ Башҡортостан тарихы дәресендә аҡ йыландың үҙе хаҡында һөйләне. Беҙҙең Яңы йыл хужаһы үҙенең башҡорттар өсөн кем икәнен беләме икән?

**Аҡйылан.** Мин беләм дә ул. Ә бына һеҙ был хаҡта ни тиерһегеҙ?

**1-се бала.** Аҡйылан - ул изге йылан. Уны күргән кеше бәхетле була, ғүмере ырыҫлы үтәсәк! Башҡорттарҙа йыландарҙы изгеләштереп ҡарау борондан килә. Ә бына тап аҡ йыландың яҡты көсөнә инаныу бөгөн дә һаҡланған. Былтыр еләккә барғас, беҙ йылан күрҙек. Атайым уға һуғырға ла, ҡурҡытырға ла ярамай , тине. Етмәһә, башында аҡ таҡыяһы бар ине. Атай әйтте, балалар, ни теләһәгеҙ, шул ҡабул булыр, юлығыҙға аҡ йылан сыҡҡан! Мин киләһе уҡыу йылында тик "бишле"гә генә уҡыһам ярар ине, тигәйнем, шулай булды.

**Бөркөт.** Их, ә мин берәй сит планетаға осоп барып етергә теләр инем.

**2-се бала.** Ә мин йылан менән бик күп сағыштырыуҙар беләм! Ҡара йылан ағыулы булғанғалыр инде, ҡара күңелле кешене лә ҡара йылан, тиҙәр. Күпте күргән кешегә, йылан аяғын киҫкән, тип әйтәләр. Әсе теллеләрҙе, йылан тел, тип тә йөрөтәләр. Яһилдарҙы, юха йылан, тиҙәр. Янында йөрөгән кешеһенең кем икәнен дә белмәгән, әммә ул дуҫын һатһа, ҡуйынымда йылан аҫырағанмын икән, тип үкенеүселәр ҙә бар. Ә бына йылан саҡҡанда уҡыла торған доға ла була. Ул бына ошолай әйтелә: "Сәңке, сәңке, сәңке йылан, сәңке башлы ҡара йы-

лан, Атҡан уҡтан етеҙ йылан,
Ағын һыуҙан ауан йылан. Аҡ мамыҡтан йомшаҡ йылан, Сағыр булһаң, саҡ, йылан, Саҡмаҫ булһаң, ят, йылан, Нух пәйғәмбәр хөрмәтенә Ятҡан ерҙә ҡат, йылан, Ятҡан ерҙә тибрән, йылан!"

**Азамат.** Бында йыйылған балаларҙың зирәклегенә таң ҡалып торам әле мин!

**Гөлбикә.** Иҫ киткес һәләтлеләр!

**Бөркөт.** Юҡҡа ғына алып төшмәгәнмен Аҡйыланды ҡаяларҙан!

**Аҡйылан.** Ҙур рәхмәт инде һеҙгә, дуҫҡайҙар!

**3-сө бала.** Туҡтағыҙ, туҡтағыҙ! Мин дә һөнәремде күрһәтәйем инде.

**Азамат.** Әйҙә, егет, рәхим ит!

**3-сө бала.**

*Ергә ап-аҡ ҡарҙар яуғас,*
*Аҡҡа төрөнгәс донъя,*
*Беҙгә бәрәкәт өләшеп,*
*Аҡ йылан йылы килә.*
*Аҡ йылан - йылан батшаһы!*
*Уның өмере бөйөк.*
*Шуға унан фарман көтә*
*Ерҙә һәр бер ҡош, кейек.*
*Изге беҙҙең ниәтебеҙ,*
*Хыялдарыбыҙ яҡты.*
*Шуға һәр саҡ беҙҙең ерҙә*
*Булыр бөтәһе яҡшы.*

**Бөтәһе бергә.** Һай, афарин, егет!

**Аҡйылан.** Йыланға бағышланған бер шиғыр юҡ, тип ҡайғыра ғына башлағайным, бына бит - уныһы ла табылды!

**Азамат.** Балалар, ә һеҙ беләһегеҙме йыландың көсө нимәлә?

**4-се бала.** Зирәклегендә һәм телендә.

**Азамат.** Эйе, тап шулай. Киләсәктә беҙ ҙә зирәк аҡылыбыҙ һәм туған телебеҙ менән көслө булайыҡ!

**4-се бала.** Башҡорт теле хаҡында шиғыр уҡып китергә теләйем!

*Телем минең юлдаш булыр,*
*Бик күп ишектәр асыр.*
*Кәрәк икән, мине яҡлап,*
*Ул ҡалҡан булып баҫыр.*

*Һәр бер һүҙе йәнгә яҡын,*
*Ҡәҙерле һәр бер өнө.*
*Уның менән атыр таңым,*
*Яҡтырыр һәр бер көнөм.*

*Телем - минең яҡын дуҫым,*
*Ул йөрәгемдә йәшәй!*
*Уны минә бүләк итеп,*
*Ҙурлаған мине әсәй!*

**Бөтәһе бергә.** Һай , афарин!

**Аҡйылан.** Ҡәҙерле балалар, дуҫтар, мине байрамға саҡырыусылар! Мин юҡҡа ғына һеҙҙең кисәгеҙгә талпынып килмәнем. Сөнки элек-электән ишетеп беләм, башҡорттар йыланға изге хайуанға ҡараған кеүек ҡараған. Рәхмәт һеҙгә ошо яҡты мөнәсәбәтте һаҡлағанығыҙ өсөн! Боронғо юрамыш буйынса беләһегеҙ, аҡ йылан күргән кеше бәхетле була. Һеҙгә бәхет өләшер өсөн килдем дә инде мин был изге ергә! Яҡты теләктәр теләгеҙ, улар мотлаҡ ҡабул булыр! Яҡшы ниәттәр менән йәшәгеҙ, бөтәһе лә тормошҡа ашыр! Аҡ йыландар һеҙҙең бәрәкәтле төбәккә мине илсе итеп ебәрҙе. Улар һис яңылышмаған - был ерҙә изге күңелле атаәсәләрҙең яҡшы балалары йәшәй. Бары тик ҡото, ырыҫы менән килһен Яңы йыл! Байрам менән һеҙҙе!

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

# ХАЛЫҠТАР ФЕКЕРЕ...

## һанға һуғылмаймы?



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

**Ғәлим ХИСАМОВ, яҙыусы:** Әле киң йәмәғәтселектә ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙырған "Рәсәй Федерацияһы дәүләт милли сәйәсәте стратегияһы" закон проекты буйынса фекер алышыуҙар бара. Дөрөҫөн әйткәндә, был закон проекты миндә ҡаршылыҡлы тойғолар тыуҙырҙы, сөнки мин уның ыңғай яғы менән бер рәттән, күңелдә хәүефләндереүсе кире яҡтарын да күрәм. Ыңғай яғы шунда: әгәр ҙә Рәсәйҙәге милләт-ара мөнәсәбәттәр тикшереү өсөн бөтә ил кимәлендә сығарылған икән, был, әлбиттә, ыңғай күренеш. Мәсьәләне бөтә ил алдына сығарып, фекер алышырға теләк белдергән даирәләр бар икән, тимәк, халыҡтың фекере менән дә иҫәпләшергә теләүселәр бар әле. Һәм, ғөмүмән, күп милләттәр вәкилдәре йәшәгән Рәсәйҙә милли мәсьәләләргә иғтибар күберәк һәм етдиерәк булырға тейеш, минеңсә. Быныһы - бер.

Миҙалдың икенсе яғы ла бар. Үкенескә ҡаршы, әлеге проект төрлө милләт халыҡтары күңелендәген, һуңғы мәлдәрҙә улар кәйефендә айырыуса нығ һиҙемләнгән ҡырҡыулыҡты, хатта хәүеф ноталарын сағылдырмай. Әгәр ҙә ошондай етди документта ла был сағылыш тапмай икән, тимәк, уны эшләүселәр мәсьәләгә енел, төптән уйламай ҡараған. Әгәр ҙә Рәсәй составында егерме проценттан ашыу рус булмаған милләт халыҡтары йәшәй икән, уның менән иҫәпләшмәү нисек аталырға тейеш? Был бит ҙур ғына бер дәүләт халҡы һанына тиң. Улай ғына ла түгел, күпселегенең үҙ дәүләтселеге булған һәм үҙ-үҙҙәрен тәьмин итә алған халыҡтар бит улар! Әйтәйек, Башҡортостан, Татарстан, Саха-Яҡутстанды, йә булмаһа, Кавказ республикаларын алып ҡарайыҡ. Һәммәһенең дә иҡтисади үҫеш кимәле үҙ-үҙҙәрен тәьмин итә алырлыҡ дәрәжәлә тоторокло. Сәйәси йәһәттән дә донъя кимәлендә эштәр башҡарырҙай булдыҡлы шәхестәре бар был милләт халыҡтарының. Шуға күрә, бындай халыҡтар фекере менән иҫәпләшмәү - яҙыҡ ҡына түгел, ә еноәйәт булыр ине. Киләсәктә был документ Дәүләт Думаһы тарафынан ҡараласаҡ, моғайын, шуға ла үҙебеҙ һайлап ҡуйған депутаттар халыҡтар мәнфәғәтен ҡуҙҙә тотор һәм ауыҙ йомоп ултырмаҫ, тигән өмөттәмен. Быныһы милли сәйәсәт стратегияһы проекты менән бәйле фекерем булды.

Бөгөнгө тормошобоҙҙағы күренештәрҙең тағы бер күңелдә ҡырған яғы бар. Ул да булһа, беҙҙең юғары даирәләге етәкселәребеҙҙең әле телгә алып киткән мәсьәләләргә ҡарата етерлек дәрәжәлә иғтибар бүлмәүе, йә булмаһа, киреһенсә, быға тиклем булған дәрәжәне юҡҡа сығарырға ынтылыуҙары. Башҡорттарға ҡағылышлы ғына әйтмәйем, татарҙарға ла, рустарға ла, башҡа милләт халыҡтарына ла бындай мөнәсәбәт яҡшы таныш. Әгәр беҙ туған телебеҙҙе, милләтебеҙ ҡиммәттәрен үҫтереү һәм һаҡлау йәһәтенән ниндәйҙер кимәлгә күтәрелгәнбеҙ икән, шул кимәлдән төшөргә ярамай. Әгәр ҙә кем дә кем беҙҙе шул кимәлдән төшөрөргә тырыша икән, уның, тимәк, үҙен был халыҡтың бер вәкиле тип иҫәпләргә хаҡы юҡ. Быны улар айырым бер кешенең түгел, ә халыҡ фекере икәнен аңлаһын ине. Юғиһә, киләсәктә, бигерәк тә һайлауҙар килеп еткәс, тап ошо фекер һәм мәсьәләләр өҫкә ҡалҡып сығасаҡ барыбер.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО




### ТРИ ГОДА НЕ ТАСКАЛМЫ?

Әбей менән бабай баҙарға шәл һатырға барған. Әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа мыжғышып йөрөгән халыҡҡка ҡарап тора биргәс, әбей бабайына:

-Шәлде һата тор, йөрөп әйләнәм,- тигән.

-Һатып алырға теләүсе булһа, нимә тип әйтергә?- ти икән бабай.

-Ah-ah,маҡта, шәлде шулай маҡтап һаталар инде,-ти икән әбейе.

Әбей киткәс, ысынлап та бабай эргәһенә шәл һайлап йөрөүселәрҙең береһе килгән һәм:

-Шаль хорошая?- тиеп һорай икән.

-У-у, учень! Минзифа три года таскал, еще три года будешь таскать, ничего не будет, - тип яуап биргән бабай.

Хәҙер беҙҙә берәй нимә һатып алырға булһалар, "Минзифа три года не таскалмы?" тип һорайҙар.

### ҮЛҺӘ ЛӘ АУЫРЫМАҒАНДЫР...

Ике күрше ғаилә йәшәгән. Бер заман ике ғаиләлә лә ғаилә башлыҡтары - бабайҙар ауырый башлаған. Береһе шулай ауырып үлеп тә киткән.

Икенсе яҡ күршеләге әбей әхирәтенең ҡайғыһын уртаҡлашырға ингән. Икәүләп илашып алғандар. Бабайын юғалтҡан әбейҙең ныҡ бөтөрөнгәнен күреп, күршеһе:

-Эй, илама, әүкәйем, минең дә күңелем әрней, минең бабайымдың да хәле шәптән түгел бит, - ти икән.

-Ауырыһа ни, шәбәйер, бына минеке үлеп китте бит, - тип тағы илай икән күршеһе.

-Улай тип әйтмә, хатта ныҡ ауырый бабайым, һинеке үлһә лә улай ауырымағандыр әле, - тигән булды ти теге инәй.

### АТАЙЫНДЫҢ ИСЕМЕ КЕМ?

Бер ҡатын өй ихатаһында эш менән булышып йөрөй икән. Ҙур табаҡҡа емеш-йәшелсә тултырып алып, өйгә табан атлаған. Ҡулындағы табағы ныҡ ауыр булғас, тупһа аша атлап инергә хәле ҡалмаған бынын. Шунан ул асыҡ ишектән иренә ҡысҡырырға булған. Тик ҡапыл иренең исемен онотҡан да ҡуйған. Аптырағас, улына ҡысҡыра ти был:

-Уй Алла, балам, атайындың исеме кем һуң әле?

### ОРОП ҺУҒЫРҒА НИ...

Бер инәй баҙарға себеш һатып алырға барған. Һап-һары матурҡай тауыҡ себештәрен күреп ҡалып, һатыусынан хаҡын һорай икән.

- Рупь сорок, - тип яуап биргән мәрйә һатыусы.

- Китсәле, бәгерһеҙ, аяҡтарында саҡ баҫып торған нәмәләрҙе ороп һуғырға мине кем тип беләһең,- тигән дә, үпкәләп китеп барған әбей.

### ДЫШАТЬ МОЖНО?

Элегерәк ауылдарҙа шәхси хужалыҡтарҙан бик әүҙем һөт йыйылар ине. Көтөү ҡайтып бер аҙ ваҡыт үткәс, һәр ҡапҡа янында туҡтап, һөт йыйыусы ҡысҡырып торор ине.

Бер инәйгә ҡаланан балалары ҡайтып төшкән булған. Ейәнейәнсәрҙәре ишле булғас, инәй һөт тапшырмай торорға уйлаған. Балалары кинәнеп ҡаймаҡ ашаһын, тигәндер инде. Көтөүҙән ҡайтҡан һыйырын тиҙ генә һауған да, бала-сағаһын да йыйып алып, һөт йыйыусы үтеп киткәнсе тип, келәткә инеп бикләнгән. Йәнәһе, өйҙә юҡтар. Ейәндәренә һөйләшмәҫкә ҡушҡан. Һөт йыйыусы инәйҙең өйө тапҡырында ҡысҡырып торған-торған да, ишек алдына килеп ингән һәм тирә-яғына ҡаранып тора икән. Шул саҡ инәйҙең бер ейәнсәре:

-Бабуль, дышать? - тип һораған.

Һөт йыйыусы шау-гәр көлөшкән келәткә ҡарап торған да, ҡулын һелтәп, сығып киткән.

### ПОЕЗД, ТУҠТА!

Бер ир ҡатынын ҡалаға ҡунаҡҡа оҙата икән. Поезға билет алғандар ҙа, әле ваҡыт бар, тип, тамаҡ ялғап алырға булғандар. Ваҡыт самаһын онотҡандарҙыр инде, ҡараһалар, поезд ҡуҙғалып китеп бара, ти.

Ир билетын болғай-болғай поезд артынан йүгерә, үҙе:

-Постой, поезд,ҡатын ултырһын! - тип ҡысҡыра ти.

Беҙҙә хәҙер берәйһен юлға оҙатып булһалар, "Постой, поезд,ҡатын ултырһын!" тип шаярталар.

### ЕЛ АРТТАН...

Бер хужаның ҡунаҡтары ҡайтмай ҙа ҡайтмай икән. Һуң булып киткән, ә тегеләр тәмһеҙләнеп ултыра бирә, ти. Хужа урамдан ингән дә:

-Тышта ел арттан. Күршеләрҙең ҡунаҡтары ла күптән таралышты, - тигән.

Беҙҙә хәҙер ҡунаҡ саҡырһалар, сәй сығара башлау менән: "Тышта ел арттан",- тип шаярталар.

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА,**
**Ейәнсура районы.**

✓ *Район кимәлендә ойошторолған "Науруз һылыуы" конкурсында Гран-при алған сибәр, зифа буйлы, һомғол Сажиҙәне штангасы тип күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын.*



ИНТЕРНЕТТАН



# УЙҘАРЫНДЫ...

## сүп кәрзиненә

■ Йөҙөү менән шөғөлләнеү балаларҙы аҡыллыраҡ яһай, тип белдерә The Epoch Times баҫмаһы Австралияның Гриффит мәғариф тикшеренеүҙәре институты хеҙмәткәрҙәре үткәргән тикшеренеүҙәргә таянып. Белгестәр өс йыл дауамында өс йәштән биш йәшкә тиклемге 180 баланы күҙәткән. Иртә йөҙөргә өйрәнгән балалар башҡа һөнәрҙәрҙе, мәҫәлән, математикаға, телмәргә, һүрәт төшөрөргә, фигуралар ҡырҡырға яҡшыраҡ һәм тиҙерәк үҙләштергән. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларҙың һөләттәренең иртәрәк асылыуына уларҙың ҡайһы енестән булыуы ла, уларҙың ата-әсәләренең социаль-иҡтисади хәле лә түгел, ә тап бассейндағы дәрестәр йоғонто яһаған.

■ Бонн университеты (Германия) ғалимдары асыҡлауынса, окситоцин гормоны ғаиләле ирҙәргә ҡатындарына тоғролоҡ һаҡларға ярҙам итә. Был гормон тәбиғи рәүештә гипоталамуста бүленеп сыға һәм партнерҙар араһындағы ныҡлы мөнәсәбәт өсөн яуап бирә. Был гормон кимәле төрлө кешелә төрлөсә. Эксперимент барышында тикшеренеүселәр ир-егеттәргә (никахта тороусыларына ла, тормағандарына ла) составында был гормон булған препарат тәҡдим иткән. Һөҙөмтәләр бик ҡыҙыҡлы килеп сыҡҡан. Ғаиләһе булған ир-егеттәр сит ҡатын-ҡыҙҙарҙы урап тигәндәй ҡаса башлаған, ә ғаиләһеҙҙәр үҙҙәренең ҡылыҡтарын үҙгәртмәгән.

■ Немец ғалимдары тест ярҙамында тағы бер ҡыҙыҡлы асыш яһаған. Германияның Магдебург университетының бер төркөм тикшеренеүселәре 65 йәштән 75 йәшкә тиклемге ололар араһында тест һорауҙарына яуап алыу ойошторған. Был ҡарттарҙың яртыһына составында дофамин гормоны булған таблеткалар, яртыһына ошондай уҡ таблетка формаһында яһалған ябай конфиттәр тараҡҡандар. Икенсе төркөмдөң күрһәткестәре таблетка ҡабул иткәнгә тиклем алынған һөҙөмтәләрҙән айырылмаған. Ә беренсе төркөм 20-30 процентҡа яҡшыраҡ һөҙөмтә күрһәткән. Ғалимдар әйтеүенсә, дофамин гормоны хәтерҙе яҡшырта. Шулай итеп, "бәхет гормоны" психикаға ғына түгел, тән өсөн дә файҙалы: хәтер, шулай уҡ баш мейеһенең когнитив функциялары яҡшырыуы кешене дегенератив ауырыуҙарҙан, мәҫәлән, Паркинсон, Альцгеймер ауырыуҙарынан да һаҡлай.

■ Чикагоның (АҠШ) Төньяҡ-Көнбайыш университеты белгестәре әйтеүенсә, оялсан булыу йөрәк ауырыуҙарына килтереүе ихтимал. 30 йыл дауамында барған был һынауҙарҙа 2 мендән ашыу кеше ҡатнашҡан. Ғалимдар яҙыуынса, әгәр кеше артыҡ оялсан икән, йөрәк өйәнәгенән үлеү хәүефе бермә-бер арта. Гел генә уңайһыҙлыҡ кисереүселәрҙең инфаркт ҡорбанына әйләнеүе 50 процентҡа юғарыраҡ була. Ғалимдар фаразлауынса, кешенең характеры баш мейеһенең йөрәк функцияларын үтәү өсөн яуап биргән өлөшөнә тәьҫир итә.

■ Огайо университеты (АҠШ) менән Мадрид автономлы университеты (Испания) насар уйҙар менән көрәшеүҙең тағы бер ысулын уйлап тапҡан. Улар әйтеүенсә, ҡайһы берҙә был кире уйҙарҙы ҡағыҙға яҙып, һуңынан ваҡ ҡына киҫәктәргә йыртып ташлау яҡшы һөҙөмтә бирә. Эксперименттар күрһәтеүенсә, кешеләр уйҙарын ҡағыҙға яҙып, сүп кәрзиненә ташлаһа, улар менән тиҙерәк хушлаша.

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

**Бер-береһен ярты һүҙҙән, күҙ ҡарашынан аңлаған, бер төрлө фекерләгән, уртаҡ ҡараштарға эйә булған матур ғаиләләр була. Ундайҙарға ҡарап, һәр бер кешенең мотлаҡ үҙенә генә тәғәйен икенсе яртыһы булыуҙың бер ҙә генә уйҙырма булмауына инанаһың. Нәҡ бына ошондай ғаиләләрҙә киләсәктә ил данын арттырырҙай, уның ҡеүәтен күтәрерҙәй бәхетле балалар тәрбиәләнә, ата-әсәнең көндәлек тәртибе, йәшәү рәүеше бала күңеленә һеңдерелә. Белорет ҡалаһында йәшәүсе, биш бала тәрбиәләп, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барған, эшлекле һәм егәрле Мәхийәновтар ғаиләһен хаҡлы рәүештә бына шундайҙар рәтенә индерергә була.**

# АЛМАЛАР ҺӘМ БАЛАҠАЙҘАР...

## ағасынан алыҫ төшмәй



Айҙар Әнғәм улы Мәхийәнов көрәшсе булараҡ район халҡына яҡшы таныш. Һабантуй һарығының йыл да уға эләгеүенә лә күптәр күнегеп бөткән. Ҙур ярыштарҙа иң көслө батырҙар менән алышҡа сығыу - етди һынау. Айҙар Әнғәм улына маҡсатына өлгәшеү өсөн аҙнаһына өс тапҡыр 100-ҙән ашыу саҡрым үтеп, Белореттан Учалыға бил көрәше күнекмәләренә лә йөрөргә тура килә. Тырышлыҡ бушҡа китмәй, тыуған районында ғына түгел, күрше-тирә райондарҙа ла үҙен иң оҫта көрәшсе итеп танытыуға өлгәшә ул.

Әлбиттә, ир-егеттәрҙең спорт менән шөғөлләнеүе, ҙур еңеүҙәр яулауы маҡтаулы күренеш, ләкин ғаилә ҡарау, балалар тәрбиәләү кеүек етдиерәк бурыстар ҙа бар бит әле. Айҙар Әнғәм улы был яҡтан да һынатмай, үҙ иңенә алған бурысын теүәл һәм лайыҡлы үтәй. Әллә ҡайҙан күҙгә салынып ултырған ике ҡатлы бинамын тиғән йорт һалып, үҙенең крәҫтиән-фермер хужалығын булдырып, ҡош-ҡорт аҫрап, баҡса үҫтереп, гөрләтеп йәшәй улар. Өләшенә төшкән икенсе яртыһы - Дилбәр Рәил ҡыҙы ла спортҡа, сәләмәт тормошҡа битараф булмаған гүзәл заттарҙың береһе. Ул да мәктәптә уҡығанда уҡ еңел атлетика менән ҡыҙыҡһына, республика һәм район ярыштарында еңеүле урындар яулай. Биш бала әсәһенең ололар араһында үткән марафонда 25 саҡрымға йүгереп, 270 спортсы араһынан икенсе урынға сығып һынатмауы ла күп нәмә хаҡында һөйләй. Дилбәр иренә һәр яҡлап таяныс, терәк булырға тырыша, үҙҙәре аҫкан крәҫтиән фермер хужалығында бухгалтер эшен дә алып бара. Ниәт иткәндәр теләгенә ирешеү өсөн яйын да, ваҡытын да таба белә шул. Ундайҙар өсөн тәүлектең һәр сәғәте һәм минуты ҡәҙерле. Күңеленә яҡҡан шөғөл менән булышырға ла, дәртләнеп эшләргә лә, сәмләнеп донъя көтөргә лә булдыра ундайҙар.

Көрәшкә булған ҡыҙыҡһыныуы Айҙар Әнғәм улының күңелендә йәш быуынды ла ошо спорт төрөнә ылыҡтырыу теләге уята. Оҙаҡ уйлап, икеләнеп тормай көрәшсе, еҥ һыҙғанып эшкә тотона һәм тәүгеләрҙән булып ҡалала көрәш секцияһын асып ебәрә. Бына хәҙер ике йыл инде ул ҡала балаларына билбау көрәше серҙәрен өйрәтә, ярыштарға әҙерләй. Үҙе алып барған күнекмәләргә улы һәм ике ҡыҙы ла ҙур теләк менән йөрөй. Шуныһы ҡыҙыҡ, атай кешенең абруйы шулай ҙур буламы, әллә инде тыумыштан уҡ ҡандарына һеңгәнме, ғаиләләге биш бала ла спорт өлкәһендә етди шөғөлләнә, район, республика, хатта Рәсәй кимәлендә юғары уңыштарға ирешә.

Мәхийәновтарҙың иң оло ҡыҙҙары Ләйсәнгә 17 йәш. Атаһына эйәреп, гер күтәреү күнекмәһенә йөрөгән Ләйсән, киләсәктә ошо юлдан китерен башына ла килтермәгәндер. Булыр бала биләүҙән, тигәндәй, 6-сы класта ғына уҡып йөрөгән ҡыҙҙың мөмкинлектәрен, һәләттәрен күргән тренер Ләйсәнгә ныҡлап ауыр атлетика менән шөғөлләнергә тәҡдим итә. Тренерҙың алдан күрәҙәлек итеүе дөрөҫкә сыға. Гәзит биттәрендә бөләкәй генә ҡыҙ баланың штанга күтәреү буйынса еңеүҙәр яулауы тураһында мәҡәләләр күренә башлай. Республика кимәлендә үҙен танытыуға өлгәшкән ҡыҙыҡай Рәсәй йыйылма командаһы составына алына. Илебеҙҙең төрлө ҡалаларын иңләп-буйлап, ярыштарға йөрөгән Ләйсән әлеге ваҡытта Европа ярыштарына әҙерләнә. Стәрлетамаҡ физкультура академияһының икенсе курсында уҡыған, 3 йыл элек уҡ спорт мастеры исеме алыуға өлгәшкән Ләйсән киләсәк тормошон ошо спорт төрөнә бәйләүен ныҡлап хәл иткән дә инде.

Ғаиләләге икенсе бала - Сажиҙә. Уға 16 йәш. Дүрт стенаға бикләнеп ултырыуҙан ҡасып, апайына эйәреп, спортзалға йөрөй торғас, үҙе лә штанга менән ҡыҙыҡһынып китә һәм 6-сы класта ныҡлап шөғөлләнеүгә тотона. Тора-бара үҙ тиҫтерҙәре араһында ғына түгел, ололар араһында ойошторолған ярыштарҙа ла еңеүҙәр яулауға ирешә башлай. Яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән, еңеүсе урындарҙы бирмәгән ҡыҙҙы Башҡортостан йыйылма командаһына алалар.

Бөгөн ул спорт мастерлығына кандидатлыҡ алыу өсөн ныҡлы әҙерләнә. Ғәҙәттә, егәрле, маҡсатына өлгәшеүсән кешеләр һәр яҡлап та әүҙем, етеҙ була. Сажиҙә лә мәктәп тормошонда ҡайнап йәшәй. Яҡшы уҡырға ла өлгөрә, төрлө кисәләрҙә, сараларҙа алып барыусы булырға ла, район кимәлендә үткән конкурстарҙа ҡатнашырға ла ваҡыт таба. Күптәр штанга күтәреүселәрҙе киң яурынлы, баһадир кәүҙәле итеп күҙ алдына баҫтыра. Шуға күрә лә, район кимәлендә ойошторолған "Науруз һылыуы" конкурсында Гран-при алған сибәр, зифа буйлы, һомғол Сажиҙәне штангасы тип күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын.

Ике ҡыҙының да гүзәл заттарға әллә ни йәбешеп етмәгән ауыр ҙа, хәүефле лә спорт төрө менән шөғөлләнеүенә күнгән атай кеше үҙе уҡ улы Рудольфҡа билбау көрәшенә йөрөргә кәңәш итә: "Һин егет кеше, апайҙарыңдан арттырып ебәрергә, иң яҡшы көрәшсе булырға тейешһең",- тигән бурыс та ҡуя ул уның алдына. Спортсылар мөхитендә үҫкән егет һынатып тора буламы. Икеөс йыл шөғөлләнеү дәүерендә бик күп еңеүҙәр яуларға, Кубок, миҙалдар алырға ла өлгөргән ул.

Ғаиләләге иң бәләкәй ҡыҙҙар - Сандра менән Олимпияны ла район халҡы телевизор, гәзит биттәре аша йыш күрә. 10 йәшлек Сандра менән 8 йәшлек Олимпияның спортҡа килеүенә әле 2-3 йыл ғына. Шуға ҡарамаҫтан, малайҙар менән билбау көрәшенә йөрөгән ҡыҙҙар яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтә. Улар яулаған миҙалдарҙың, кубоктарҙың да иҫәбе-хисабы юҡ.

Мәхийәновтар ғаиләһе менән аралашҡанда дүрт ҡыҙының да ир-егеттәр спортын һайлауына әсәй кешенең мөнәсәбәте нисек икәнен белеү ҡыҙыҡ тойолдо.

- Һүҙ ҙә юҡ, көрәшеү, штанга күтәреү - хәүефле спорт, - тине Дилбәр Рәил ҡыҙы. - Төрлө саҡтар була. Абай булмаһаң, хәүефһеҙлекте бер генә секундҡа күҙ уңынан ысҡындырһаң да күңелһеҙ әҙемтәләр килеп сығыуы бар. Мәҫәлән, Ләйсәнем Рәсәй ҡалаларының береһендә барған ярышта штангаһын йөҡо тамырына төшөрөп, иҫтән яҙып ҡолағайны. Көн һайын 3-әр сәғәтлек күнекмәләргә йөрөп, арманһыҙ булып ҡайтҡан саҡтарында, йә иһә билдәре ауыртып, беләктәре һыҙлап, ҡыбырлай ҙа алмай йөрөгәндәрендә, башҡаса шул күнекмәләрегеҙгә аяғығыҙҙы ла баҫтырмайым, тип асыуланып та алам. Уҡыуҙан артта ҡалаһығыҙ, барығыҙға ла БДИ бирәһе бар, тиһәм дә, мине төрлөсә әүрәтеп, тынысландырып, тағы сығып йүгерәләр спорт залына. Штанга, көрәш - егеттәр эше, тип һанаған ике өләсәй ҙә ейәнсәрҙәре менән риза түгел. Ҡыҙҙар бейеүгә, сигеүгә йөрөргә тейеш, ташлағыҙ был ир-егеттәр шөғөлөн, тип өгөтләп тә ҡарайҙар. Ә үҙҙәре, ярыштар башланһа, ейәнсәрҙәренең тәүге көйәрмәндәренә әйләнә. Ҡыҙҙар ҙур теләк менән ныҡышып йөрөгәс, артыҡ ҡаршы төшмәйбеҙ, сөнки спорт аша улар үҙҙәренең эске донъяһын да тәрбиәләй, яуаплылыҡҡа өйрәнә, ихтыяр көсөн нығыта һәм ҡуйған маҡсаттарына өлгәшергә өйрәнә.

Бына шулай, бер һүҙҙән, бер төптән булып, дәртләнеп донъя көтә егәрле Мәхийәновтар ғаиләһе. Сәләмәт рух менән сәмләнеп йәшәгән ғаиләлә тәрбиәләнгән балаларҙың ялайны үрҙәре, еңеһе бәйгеләре алда әле.

**Эльза МӘХӘМӘҘИЕВА.**

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# ҺАЛҠЫН ТЕЙГӘНДӘ...

## биш кәңәш



**Йыл миҙгелдәре алышынған мәлдә ғәҙәттә, әйләнә-тирәлә йөткереүсе, сөскөрөүсе, тымаулап яфаланыусылар бермә-бер күбәйә. Бындай осраҡта һыналған халыҡ дауалау ысулдары һеҙгә ярҙамға килер, тик уларҙы дөрөҫ ҡуллана белеү ҙә шарт. Ошо йәһәттән гәзит уҡыусыларыбыҙ иғтибарына биш яҡшы кәңәш тәҡдим итәбеҙ.**

### 1. Туралған һуған менән һарымһаҡ

Һыуыҡ тейгәндән иң таралған ысул: һуған менән һарымһаҡ ашау. Йә булмаһа, уларҙы тураҡлап, сынаяҡ аҫтына һалығыҙ ҙа бүлмәнең төрлө урындарына ҡуйып сығығыҙ - фитонцидтар вирустарҙы үлтерә. "Һәм был дөрөҫ тә! - тип хуплай был кәңәште медицина фәндәре кандидаты, оториноларинголог Елена Владыкина.- Был ысулды табиптар ауырыуҙарға һәр ваҡыт кәңәш итә: һарымһаҡ еҫе, ысынлап та, һауалағы вирустарҙы "өркөтә". Тик һарымһаҡ киҫәктәрен танау эсенә тығырға ярамай".

### 2. Имбирь

Уның онталғаны ла, яңы килеш һатылғаны ла һәйбәт дауа. Интернетта имбирь менән дауаланыу рецепттары бик күп. Уны шулай уҡ тураҡлап, сәйгә, йылы һөткә һалып эсәләр һ.б. Японияла имбирҙә бактериялар һәм вирустарҙың үрсеүенә, хатта паразиттарға ҡаршы ла уныш-лы ҡулланалар. Ә ғалимдар уның эндорфиндар эшләп сығарыуҙа ҡатнашыуын да билдәләй, йәғни ул беҙҙең кәйефте лә күтәрә ала икән.

### 3. Бал менән мүк еләге

Һыуыҡ тейҙереп ауырығанда, бик күптәрҙең фекеренсә, бал менән мүк еләге морсы иң файҙалы сара икән. Шул уҡ ваҡытта уны дөрөҫ итеп әҙерләргә өйрәнергә кәрәк. Еләктәрҙе алдан ағас төйгөстә төйөргә, унан ҡабыҡтарын ғына айырып алып, ҡайнап ултырған һыуҙа 5-7 минут буйы ҡайнатырға. Аҙаҡ уны 40 градус самаһына тиклем һыуытҡас, еләкте төйгәндә сыҡҡан һут менән бал һалып эсергә. Ошолай әҙерләгәндә, еләк менән балдың файҙалы витаминдары тарҡалмай һаҡлана.

### 4. Аҡ сәскә менән сайҡатыу

Аҡ сәскәне(ромашка) юҡҡа ғына тәбиғи антисептик тип йөрөтмәйҙәр - уның төнәтмәһе менән танауҙы йыуҙырырға, тамаҡты сайҡатырға ҡушалар. Был сараны ошондай миҙгелдә көн һайын иренмәй генә эшләп торорға кәрәк. Был файҙалы процедура эштә, йәмәғәт транспортында һәм башҡа урындарҙа беҙ эләктергән бактерия һәм вирустарҙы йыуып төшөрә. Мотлаҡ аҡ сәскә булмаһа ла, быны өсөн диңгеҙ тоҙо эретеп ҡушылған йылы һыу ҙа ярай.

### 5. Һөт менән бал

Был боронғо ысулдың тәьҫире арттырыбыраҡ та күрһәтелә һымаҡ. Бал ҡушылған йылы һөт тамаҡты йомшарта, әлбиттә. Ҡоро йөткерек бимазалағанда, тамаҡ ҡымырйығанда баллы һөт фәҡәт файҙаға ғына, ләкин киҫкен йәки аллергик ринит менән яфаланғанда был эсемлек кире һөҙөмтә биреүе лә ихтимал, сөнки һөттәге ферменттар ҡуйыртыу һөҙөмтәһе бирә. Тап ошо үҙенсәлеге менән ул тымауҙы тағы ла ҡатмарландырып ебәреүе бар.

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

### Хроник ҡурылдай

Ошо ҡурҡыныс ваҡиғаларҙы бәйән иткәндән һуң ҡабат тормошомдағы боролоштарҙың асылына урап ҡайтайым. Йәш саҡта башланған зыянһыҙ ауырыу ййлап хроник ҡурылдайға (бронхитҡа) әйләнде. Шундай диагноз ҡуйғас, шундай уҡ диагнозлы кешеләрҙән киҫкенләшеү ваҡытында хәл-тороштан нисек сығыуҙарын һорашып ҡыҙыҡһындым. Улар ике ысул әйтте. Беренсеһе: картуфты ҡабығы менән бешереп, һыуын түгәһең дә, уның йылы парын һулайһың. Был ысул минә һөҙөмтәһеҙ булып күренде, сөнки еүеш йылылыҡ ҡурылдайҙағы температура һикереүенә ныҡ һиҙгер итә.
Икенсе ысулды ике йыл ҡулландым. Киҫкенләшеүҙең иң көслө ваҡытында плитала ҡыҙыл кирбес йылытып, унан сыҡҡан ҡоро йылы быуҙы һулаһыным. Бер нисә йыл аҙыраҡ ауырый башлаған коллегаларымдың кәңәше буйынса, баштан аша одеял ҡаплай инем. Һуҙ юҡ, ысул һөҙөмтәле булды, әммә енеллек ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына килде. Әгәр беренсе йылдарҙа киҫкенләшеү йылына ике тапҡыр ҡуҙғатһа, бер нисә йылдан һуң ул йылына өс-дүрт тапҡыр ҡабатланды.
Вегетарианлыҡты башлар алдынан мин уйым менән ҡурылдайҙарҙың аспирин һәм олететрин йоғонтоһо аҫтында нисек итеп һауығыуын иғтибарлап күҙәттем. Бер нисә тапҡыр дарыу ашағандан һуң ауырыу менән зарарланған участка ҡаты пленка менән ҡаплана башлай. Көҙгөһөн кул өҫтөн йоҡа боҙ ҡаплағанда шундай уҡ күренеште күҙәтергә була. Әммә, боҙҙан айырмалы, уң яҡ ҡурылдайым көл кеүек нәмә менән ҡапланды. Был ҡатлам йоҡаҡ, һығылмалы түгел һәм бик насар ине. Ваҡыты-ваҡыты менән ул Урта Азиялағы таҡырҙар кеүек ваҡ киҫәктәргә ярғыланды. Ике көндән ундай тойғо үтте, үҙемде икенсе киҫкенләшеүгә тиклем яҡшы тойҙом.
Ҡабаттан тыуғанымдан һуң - вегетарианлыҡты башлағас - түүгә етди өйәнәк көҙөн булды. Октябрҙә һыуыҡ һәм бысраҡ - хроник ҡурылдай менән интеккән кешеләр өсөн ауыр ваҡыт. Йәй менән ҡыш араһындағы сик осоронда улар барыһы ла һыуыҡ тейҙереүҙән һаҡланырға тырыша. Әгәр ошо ваҡытта ауырыу эләктерһәң, уның менән бер ай интегергә тура киләсәк. Ҡайһы берҙә һүлпән генә дауам иткән сир кешене ҡыштан алып йәйге эҫе көндәр еткәнсе интектерергә мөмкин.
Шулай итеп, мин көҙөн хроник ҡурылдай менән етди ауырыным. Уң яҡ ҡурылдайымдың ҙур өлөшө сирле икәнен тойҙом. Зарарланған участка күмәгәйҙән саҡ ҡына аҫта башланып, трахея үпкәләр менән тоташҡан урында тамамлана ине. Был участка минә ҙур аскаридаһы хәтерләтте: ул тамаҡ эргәһенән осло өсмөйөш булып башланып, киңәйә һәм аҫҡы өлөшө тағы тарая. Уйҙағы ҡарашымда зарарланған өлкә өҫкө эпителиаль туҡымаһы һыҙырып алынған ҡыҙыл эсәк булып күҙалланды. Хроник ҡурылдай киҫкенләшеп, интеккән ваҡытта миңә бына шундай картина асылды.
Вегетарианлыҡҡа күскәс, ауырыуыма иғтибар бирмәҫкә ҡарар иттем. Ҡайһы бер ваҡыт кистәрен күкрәгемә һәм арҡама горчичниктар һала, ә иртән ғәҙәти тормош менән йәшәй инем. Үлемдән ҡурҡыу хисе булмағас, дарыуҙар ҙа ҡабул итмәнем. Ваҡыты-ваҡыты менән бик ныҡ тирләнем. Бигерәк тә эшемдә. Ағарып, һурылып киттем. Ауырыу һәм минең рухым берберенһә шулай оҙаҡ ҡаршы торҙо. Тән менән йән, рухтың ярҙамын тойоп, ауырыуҙы еңде. Әммә быға оҙаҡ ваҡыт китте - ун көн самаһы. Уның ҡарауы ҡурылдайҙағы таҡырҙарҙы, үҙемдең ярҙамһыҙ икәнлегемде тойоу булманы. Ниһайәт, беҙ ауырыуға был "әй"ҙә - минең тәнемдә - кем хужа икәнен аңғарттыҡ.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

*Тәрән итеп аңлаған аҡыл*
*бер ваҡытта ла онотолмай.*
*Пифагор.*

1. Аҙыраҡ йоҡлағыҙ. Был - тормошоғоҙҙо һөҙөмтәлерәк һәм лайыҡлыраҡ итеүгә индергән иң мөһим өлөштәрҙең береһе. Күпселек кешегә сәләмәтлеген яҡшы торошта тотоу өсөн алты сәғәт йоҡо етә. 21 көн дауамында бер сәғәткә алданыраҡ торорға тырышығыҙ һәм был һеҙҙең ныҡлы һәм ҡеүәтле ғәҙәтегеҙгә әйләнәсәк. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ, йоҡоноң оҙайлығы түгел, ә сифаты әһәмиәтле. Хәҙер инде айына мөһим булып күренгән эштәрҙе тормошҡа ашырыу өсөн өҫтәмә рәүештә 30 сәғәт ваҡытығыҙ бар тип күҙ алдына килтерегеҙ.
2. Һәр иртән шәхси үҫеш мәсьәләһе өҫтөндә уйланыу өсөн бер сәғәт бүлегеҙ. Уйығыҙҙа ғына алда торған көнөгөҙҙө күҙ алдына килтерегеҙ, үҙегеҙҙе рухландырыусы музыка тыңлағыҙ йәки классик әҙәбиәттән нимәләр уҡығыҙ. Был тынысльҡ осорон үҙегеҙҙең рухығыҙҙы күтәреү һәм көнөгөҙҙө һөҙөмтәле үткәреү өсөн файҙаланығыҙ. Аҙнаһына бер тапҡыр булһа ла ҡояш сыҡҡанын күҙәтегеҙ йәки тәбиғәткә сығығыҙ. Һәр көндөң яҡшы башланыуы үҙ-үҙенде яңыртыуға һәм шәхси һөҙөмтәлелеккә өлгәшеүгә ҡеүәтле стратегия булып тора.
3. Һеҙҙең өсөн әһәмиәтле булған нәмәләрҙең артыҡ әһәмиәте булмаған эштәр күләгәһендә ҡалыуына юл ҡуймағыҙ. Һәр көн үҙегеҙҙә: "Был минең ваҡытымды һәм энергиямды иң яҡшы файҙаланыу булдымы?" - тип тикшерергә ваҡыт табығыҙ. Ваҡыт менән идара итеү тормош менән идара итеү ул, шуға күрә ваҡытығыҙ менән мөмкин тиклем яҡшыраҡ идара итегеҙ.
4. Һуҙылтмаҡ резинканы аҡылығыҙҙы бары тик ыңғай фекерҙәргә һәм тормошоғоҙҙоң әһәмиәтле элементтарына ғына фокусланған күнектереү өсөн күнекмә сараһы итеп файҙалана алаһығыҙ. Резинканы ҡулығыҙҙың беләҙегенә кейегеҙ. Кире йәки йомшаҡ уй-фекер мейегеҙгә инергә тырышҡан ваҡытта, беләҙегегеҙҙә резинка менән сиртеп алығыҙ. Тырышһағыҙ, мейе ауыртыуҙы кире уйлау менән күҙаллап, тиҙҙән аңығыҙ көслө ыңғай көйләнеш аласаҡ.
5. Телефондан һөйләшкәндә һәр ваҡыт энтузиазм менән яуап биреғеҙ, шылтыратыусы һеҙҙең ихтирамығыҙҙы тойһон. Яҡшы ғәҙәттәр бик мөһим. Телефон аша һөйләшкәндә ышанысығыҙ һиҙелһен өсөн урынығыҙҙан тороғоҙ. Был һеҙҙең тауышығыҙға тағы ла көс һәм ышаныс бирер.
6. Көн дауамында барыбыҙға ла илһам, матур идеялар килә. Шуға күрә ҡул аҫтында бәләкәй генә ҡағыҙ йәки карточка өйөмө һәм ҡәләм булыуы мотлаҡ. Был фекерҙәрҙе яҙып барығыҙ. Өйгә ҡайтҡас, уларҙы блокнотҡа күсерегеҙ һәм ваҡыт-ваҡыт алып уҡығыҙ. Оливер Венделл Холмс билдәләүенсә, "Кешенең яңы идея менән һуҙылған мейеһе элекке хәленә кире ҡайтмай".



## 10 ДЕКАБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым"
16.10 "Убойная сила". Сериал (16+)"
17.00 "Неравный брак" (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Отражение", 1-я и 2-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым (16+)
01.10 Ночные новости
01.30, 03.05 "Маленькая черная книжка". Комедия (16+)
03.00 Новости
03.30 "Связь" (12+)
04.20 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Кружева", 9-я и 10-я серии (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "По горячим следам", 31-32-я, закл. серии. Сериал (12+)
23.20 "Специальный корреспондент" (16+)
00.25 "Девчата" (16+)
01.05 "Вести+"
01.25 "Улицы в крови" (16+)
03.20 "Американская трагедия"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһы гимны
07.05 "Йәшмә". Моңло йырҙар йыйынтығы (0+)
08.05 "Йәштәр тауышы". Йәш башҡарыусыларҙың видеоклиптары (0+)
09.05"Tmb". Төрки телдәрендә йырҙар (12+)
10.35 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
11.00 Нәфис фильм."Алмабикә" (башҡ.тел.) (12+)
12.15 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
12.35 "Шиғриәт минуттары". Ғариф Ғүмәр(6+)
13.00 Реклама. Анонстар. Роликтар. Блокты ҡабатлау.
20.30 "Моң илсеһе". Лилиә Ишемйәрова (0+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00 "Новости недели" (на башк. яз.)**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 23.30 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Новости недели" (на русск. яз.)**
**12.15 "Полезные новости" (12+)**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Дневник" (6+)**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Царь горы" (6+)**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 "Дорога к храму"**
**17.15 "Создай свое дело" (12+)**
**17.45 "Заки Валиди: человек пера и сабли" (12+)**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**22.00 "Следопыт"**
**22.15 "Позывной "Барс"**
**23.00 "Башкорт йыры" представляет…"**
**23.45 "Роза Аккучукова собирает друзей"**

## 11 ДЕКАБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым"
16.10 "Убойная сила". Сериал (16+)
17.00 "Неравный брак". Сериал (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Отражение", 3-я и 4-я серии (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 Ночные новости
00.25 "Задиры" (16+)
01.35, 03.05 "Франкенштейн". Триллер (18+)
03.00 Новости
04.00 "Связь" (12+)

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь". Сериал
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Кружева", 11-я и 12-я, закл. серии. Сериал (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Бедные родственники", 1-3-я серии (12+)
00.10 "Кузькина мать. Итоги" (12+)
01.10 "Вести+"
01.35 "Американская трагедия"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһы гимны
07.05 "Йәшмә". Моңло йырҙар йыйынтығы (0+)
08.30 "Һеҙ яратҡан йырҙар"(0+)
09.00 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүҙәре (0+)
09.30"Кәмит". Ҡыҙыҡ-мәҙәк, юмор (6+)
10.10 "Илһам". Милли уйын ҡоралдары яңғырашы (0+)
10.45 "Аҫылйәр".Башҡорт халыҡ йырҙары (оҙон көй) (0+)
11.00 Нәфис фильм "Мөхәббәт илселәре" (башҡ.тел.) (12+)
12.20 "Таныш көйҙәр". Ретро (0+)
12.35"Һандуғастар төйәге"(0+)
13.00 Реклама. Анонстар. Роликтар. Блокты ҡабатлау.
20.30 Концерт. Радик Вәлмөхәмәтов(0+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Царь горы" (6+)**
**11.00, 23.30 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Отдел культуры" (6+)**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45, 23.00 "Башкорт йыры" представляет… "Песня года"**
**14.15 "Салям+" (12+)**
**14.45 "Тэмле" (на баш. яз.)**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Книга сказок" (6+)**
**16.00 "Борсак"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 "Здоровое решение" (12+)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**17.45 "Байык-2012"**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сенгелдек"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**23.45 "Жизнь - в песнях"**

## 12 ДЕКАБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым"
16.10 "Убойная сила". Сериал (16+)
17.00 "Неравный брак", 40-я серия (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Отражение", 5-я и 6-я серия (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Ночные новости"
00.25 "Белый воротничок" (16+)
01.15, 03.05 "Пикник" (12+)
03.00 Новости
03.15 "Богини социализма" (16+)
04.15 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь"
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести - Башкортостан"
17.50 "Гадание при свечах", 1-я и 2-я серии (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Бедные родственники". Сериал (12+)
00.15 "Битва за соль. Всемирная история". Док. фильм
01.15 "Вести+"
01.40 "Честный детектив" (16+)
02.15 "Американская трагедия"
03.50 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһы гимны
07.05 "Йәшмә". Моңло йырҙар йыйынтығы (0+)
07.40 "Таныш көйҙәр". Ретро (0+)
08.00 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
08.45 "Tmb". Төрки телдәрендә йырҙар (12+)
09.15 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.00 "Йәштәр тауышы". Йәш башҡарыусыларҙың видеоклиптары (0+)
11.00 Нәфис фильм. "Минең йондоҙом" (башҡ.тел.) (12+)
12.30 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
13.00 Реклама. Анонстар. Роликтар. Блокты ҡабатлау.
20.30 "Музыкаль ҡумта". Гөлсәриә Дәүләтгәрәева(0+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Болей за хоккей"**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Башкорт йыры-2012, II тур"**
**14.15 "Мелодии души"**
**14.45 "Волшебный курай"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Цирк в 13 метров"**
**16.00 "Семэр"**
**16.15 "Городок АЮЯ"**
**16.45 "История башкирского войска" (12+)**
**17.15 "Создай свое дело" (12+)**
**17.45 "Алтын тирмэ"**
**18.45 Волейбол. Challenge Cup-2013**
**21.00 "Форум предпринимателей" (16+)**
**22.00 "Историческая среда" (16+)**
**23.00 "Башкорт йыры" представляет… "Песня года"**
**23.45 "На мир смотрю я лишь с любовью"**

## 13 ДЕКАБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05, 04.35 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым"
16.10 "Убойная сила". Сериал (16+)
17.00 "Неравный брак", 41-я серия (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Отражение", 7-я серия (16+)
22.00 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная России - сборная Швеции. Прямой эфир
00.10 "История одного суда"
01.00 "Ночные новости"
01.20, 03.05 "Вертикальный предел". Боевик (12+)
03.00 Новости
03.40 Документальный фильм

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь"
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
17.50 "Гадание при свечах", 3-я и 4-я серии (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Бедные родственники", 7-я и 8-я серии (12+)
23.25 "Поединок" (12+)
01.00 "Вести+"
01.25 "Обыкновенное чудо"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһы гимны
07.05 "Йәшмә". Моңло йырҙар йыйынтығы (0+)
08.00 "Tmb". Төрки телдәрендә йырҙар (12+)
08.30 "Һеҙ яратҡан йырҙар"(0+)
09.30 "Һандуғастар төйәге"(0+)
10.15 "Йәштәр тауышы". Йәш башҡарыусыларҙың видеоклиптары (0+)
11.00 Нәфис фильм."Ер менән күк араһында" (башҡ.тел.) (12+)
12.30 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүҙәре (0+)
12.30 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн"(0+)
13.00 Реклама. Анонстар. Роликтар. Блокты ҡабатлау.
20.30 "Рухи семәрҙәр".Һөйәрғолов Муллаян(0+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30, 15.35 "Гора новостей"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 23.30 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**11.45 "Недаром помнит вся Россия…" (12+)**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Чудо башкирской шали"**
**15.15 "Учим башкирский язык"**
**15.35 "Гора новостей"**
**15.45 "Галямат донья"**
**16.00 "Шэп арба"**
**16.15 "Йырлы кэрэз"**
**16.45 "История башкирского войска" (12+)**
**17.00 "Судебной системе Республики Башкортостан - 90 лет"**
**17.15 "Создай свое дело" (12+)**
**17.45 "Бахетнама"**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**22.00 "ФК Уфа": даешь Премьер-лигу!"**
**23.00 "Башкорт йыры" представляет…" "Песня года"**
23.45 "Счастливый сын степей"

## 14 ДЕКАБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Дешево и сердито" с Дарьей Донцовой"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым
16.10 "Убойная сила" (16+)
17.00 "Жди меня" (16+)
18.00 Вечерние новости
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Поле чудес"
21.00 "Время"
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым"
22.55 "Вечерний Ургант" (16+)
23.30 "Голос" (12+)
01.35 "После школы". Сериал
02.40 "Без лица". Боевик (16+)

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России"
06.05, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Местное время. Вести - Башкортостан"
08.55 "Мусульмане"
09.05 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал (12+)
12.50 "Дело Х. Следствие продолжается" (12+)
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Ефросинья. Таежная любовь"
15.45 "Кровинушка". Сериал
16.45 "Вести. Дежурная часть"
17.00 "Вести"
17.30 "Вести ПФО"
17.50 "Гадание при свечах", 5-я и 6-я серии (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.30 "Спокойной ночи, малыши!"
20.40 "Прямой эфир" (12+)
21.25 "Юрмала-2012" (12+)
23.25 "Мелодия любви". Мелодрама (12+)
01.15 "Внеземной". Драма (16+)
04.00 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһы гимны
07.05 "Йәшмә". Моңло йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар"(0+)
08.30 "Һандуғастар төйәге"(0+)
09.30 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүҙәре (0+)
09.45 "Tmb". Төрки телдәрендә йырҙар (12+)
10.00 "Һандуғастар төйәге" (0+)
10.30 "Илһам". Уйын ҡоралдары яңғырашы (0+)
11.00 Спектакль."Аҡмулла". Башдрамтеатр(6+)
12.35 "Һеҙ яратҡанйырҙар"(0+)
13.00 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (0+)
13.30 "Замандаштар"(6+)
13.45 "Музыкаль ҡумта". Шамил Хәмәҙинуров (0+)
14.00 Туй йырҙары (12+)
14.30 "Һеҙ яратҡан йырҙар"(0+)
15.00 Реклама. Анонстар. Роликтар. Блокты ҡабатлау.
19.00 "Ҡотлауҙар"(0+)
20.00 "Рухи семәрҙәр". Мифтахетдин Аҡмулла (6+)

### БСТ

**07.00 "Салям" (12+)**
**10.00, 12.15 "Полезные новости" (12+)**
**10.15 "Надо знать"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Галямат донья"**
**11.00, 23.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 16.30, 17.30, 20.30, 21.30 "Новости" (на русск. яз.)**
**11.45 "ФК "Уфа": даешь Премьер-лигу!"**
**12.30, 13.30, 14.30, 18.30, 19.30, 22.30 Новости (на башк. яз.)**
**12.45 "Весело живем"**
**13.00 "Унган килен" (16+)**
**13.45 "Мелодии души"**
**14.45 "Автограф" (6+)**
**15.15, 17.45 "Учим башкирский язык"**
**15.45 "Зеркальце"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.15 "Байтус" (6+)**
**16.45 "Форум предпринимателей" (16+)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**18.00 "Йома"**
**18.45, 19.35, 20.15, 20.35 "Телецентр" (12+)**
**20.00 "Сенгелдек"**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**23.00 "Башкорт йыры" представляет… "Песня года" (12+)**
**23.45 "Дарман" (12+)**

## 15 ДЕКАБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.35, 06.10 "Хоккеисты"
06.00 Новости
07.35 "Играй, гармонь любимая!"
08.20 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. Новые приключения"
09.00 "Умницы и умники" (12+)
09.45 "Слово пастыря"
10.00 Новости
10.15 "Смак" (12+)
10.55 "Игорь Угольников. Шутить изволите?" (12+)
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Абракадабра" (16+)
14.05 "Фарфоровая свадьба". Сериал (16+)
16.00 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная России - сборная Чехии. Прямой эфир. В перерыве - Новости (с субтитрами)
18.00 Вечерние новости
18.10 "Человек и закон"
19.15 "Минута славы" шагает по стране" (12+)
21.00 "Время"
21.20 "Голос" (12+)
23.20 "Что? Где? Когда?"
00.40 "Элементарно", 8-я серия (16+)
01.34 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная Финляндии - сборная Швеции
03.45 "Похитители картин". Боевик (16+)

### РОССИЯ 1

05.05 "Люди в океане". Драма
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.50 "Планета собак"
09.25 "Субботник"
10.05 "Качество жизни"
10.30 "Специальный корреспондент"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.20 "Городок". Дайджест"
11.55 "Джентльмены удачи". 40 лет спустя". Док. фильм
12.55 "Вести. Дежурная часть"
13.25 "Честный детектив" (16+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Погоня"
15.35 "Новая волна-2012". Лучшее
17.30 "Танцы со звездами". Сезон-2012
19.35 "Клубничный рай". Комедия (12+)
20.00 "Вести в субботу"
20.45 "Клубничный рай". Продолжение
00.10 "Женская интуиция-2". Мелодрама (12+)
03.00 "Горячая десятка" (12+)
04.05 "Секретная азбука жизни. Тайны ДНК"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһы гимны
07.05 "Йәшмә". Моңло йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Илһам". Милли уйын ҡоралдары яңғырашы (0+)
08.00 "Һандуғастар төйәге"(0+)
08.30 "Тылсымлы ҡурай"(0+)
09.30 "Музыкаль ҡумта"(0+)
10.30"Таныш көйҙәр". Ретро (0+)
11.00 Спектакль. "Илгизәр + Вера". Туймазинский театр (12+)
13.00 "Һеҙ яратҡан йырҙар"(0+)
13.30 "Һандуғастар төйәге"(0+)
14.00 Реклама. Анонстар. Роликтар. Блокты ҡабатлау.
21.00 "Моң илсеһе".Фәлиә Солтанова (0+)

### БСТ

**07.00, 12.30, 18.30 "Новости" (на башк. яз.) (16+)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**07.45 Фильм детям"**
**09.15 "Мультфильм" (на баш. яз.)**
**09.45 "Салям+" (12+)**
**10.00 "Бахетнама"**
**10.45 "Еду я в деревню"**
**11.15 "Арслан" (16+)**
**12.00 "Следопыт"**
**12.15 "Позывной "Барс"**
**12.45 "Надо знать!" (12+)**
**13.00 "Здоровое решение" (12+)**
**13.30 "Замандаштар" (6+)**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Третий звонок. М. Бурангулов. "Башкорт туйы" (12+)**
**18.45 "Учим башкирский язык"**
**19.00 "Хазина"**
**19.30 "Башкорттар"**
**20.00 "Сэнгелдек"**
**20.15 "Деловой Башкортостан"**
**20.30 "Отдел культуры" (12+)**
**21.00 "Специальный репортаж" (16+)**
**21.30 "Новости" (на русс. яз.)**
**22.00 "Башкорт йыры" представляет: "Песня года"**
**22.30 "Диспут-клуб "Пятый угол" (16+)**
**23.15 "Смелая музыка" (16+)**

## 16 ДЕКАБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Змеелов" (12+)
06.00 Новости
07.45 "Армейский магазин" (16+)
08.20 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. ПИН-код"
08.55 "Здоровье" (16+)
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки" (12+)
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Среда обитания" (12+)
13.25 "Мадагаскар". Новогодний выпуск
13.45 "Кунг-фу Панда: секреты неистовой пятерки"
14.10 "Большие гонки. Братство колец" (12+)
16.00 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная России - сборная Финляндии. Прямой эфир. В перерыве - Новости (с субтитрами)
18.10 "Пираты Карибского моря: на краю света". Приключения (12+)
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Мульт личности" (16+)
22.30 "Yesterday live" (16+)
23.30 "Познер"
00.30 Кубок Первого канала по хоккею. Сборная Чехии - сборная Швеции
02.40 "История Линды Маккартни" (16+)
04.20 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1

05.25 "Менялы". Комедия (12+)
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20 "Вести - Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Один в океане". Док. фильм
12.05 "Биение сердца". Мелодрама (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Биение сердца". Продолжение (12+)
16.20 "Смеяться разрешается"
18.05 "На всю жизнь". Детектив (12+)
20.00 "Вести недели"
21.30 "Любовь для бедных". Мелодрама (12+)
23.30 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+)
01.20 "Мои счастливые звезды". Комедийный боевик (16+)
03.20 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһы гимны
07.05 "Йәшмә". Моңло йырҙар йыйынтығы (0+)
07.45 "Илһам". Ҡурай моңо (0+)
08.00 "Һандуғастар төйәге"(0+)
09.00 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүҙәре (0+)
09.15 "Tmb". Төрки телдәрендә йырҙар (12+)
09.30 "Һеҙ яратҡан йырҙар"(0+)
10.00 "Йәштәр тауышы". Йәш башҡарыусыларҙың видеоклиптары (0+)
11.00 Спектакль. "Ҡоҙаса".Сибай театры (12+)
12.40 "Tmb". Төрки телдәрендә йырҙар (12+)
12.55 "Һандуғастар төйәге"(0+)
13.30 "Таныш көйҙәр".Ретро(0+)
14.00 "Һеҙ яратҡан йырҙар"(0+)
15.00 Реклама. Анонстар. Роликтар. Блокты ҡабатлау.
19.00 "Ҡотлауҙар"(14декабрҙан ҡабатлау) (0+)
20.00 "Рухи семәрҙәр". Әлиә Нурғәлиева(0+)

### БСТ

**07.00, 18.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Доброе утро!"**
**09.00 "Йома"**
**09.30 "Звени, мой кубыз!"**
**10.00 "Баурсак"**
**10.10 "Городок АЮЯ"**
**10.20 "Шэп арба"**
**10.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Шатлык йыры"**
**11.00 "Байтус" (6+)**
**11.15 "Семэр"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.45 "Алтын тирмэ"**
**12.30 Новости недели**
**13.00 "Тэмле" (6+)**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 "Дарю песню"**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.30, 19.30 "Замандаштар" (6+)**
**17.00 "Историческая среда" (12+)**
**17.30 "Автограф" (12+)**
**18.00 "Дневник" (+6)**
**18.45 "Учим башкирский язык"**
**19.00 "Еду я в деревню" (6+)**
**19.45 "Сэнгелдек"**
**20.00 "Любимое дело"**
**20.30 "Болей за хоккей"**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.15 "Деловой Башкортостан"**
**21.30 "Новости недели" (на русс. яз.)**
**22.00 "Байык-2012"**
**22.45 "Вечер.com" (12+)**
**23.30 "Три праздника вместе"**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# МИН БАШ ЭЙӘМ "ҠУРАЙ" АЛДЫНДА




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**48-се һандағы кроссворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Миләүшә. 3. Миңнуллин. 6. Ғәбитов. 11. Ролик. 12. Атолл. 13. Писер. 14. Урман. 15. Яҡупова. 18. Ғәйнуллин. 21. Сәлихов. 26. Олатай. 28. Домино. 29. Ҡуй. 31. Ғәйбәт. 33. Шалҡан. 34. Абаға. 35. Нунций. 36. Рәссам. 37. Ҡам. 39. Нәркәс. 42. Татами. 45. Статика. 47. Стипендия. 50. Ғималов. 55. Малай. 56. Робот. 57. Шакал. 58. Сауым. 59. Гөлшат (Зиязетдинова). 60. Иҫәнбаева. 61. Әлморон.

**Вертикаль буйынса:** 1. Мелодия. 2. Шәрипов. 4. Иҫкәрмә. 5. Исағужи. 7. Әйләнмә. 8. Вроцлав. 9. Аласа. 10. Ҡойма. 16. Уҡра. 17. Олҡа. 19. Нотоҡ. 20. Литий. 22. Лего. 23. Хаси. 24. Ҡолһарин. 25. Йомағужин. 27. Йоғонос. 28. Динамит. 30. Ураҙа. 32. Тай. 33. Шар. 37. Ҡотоп. 38. Мусин. 40. Риза (Мәһәҙиев). 41. Әй. 43. Аҙым. 44. Аҡыл. 45. Самауыр. 46. Көмөшкә. 48. Төйәләҫ. 49. Иҙрисов. 51. Ихтимал. 52. Вазелин. 53. Клака. 54. Абруй.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**8 декабрь "Бәхет хаҡы"** (Х.Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама
**9 декабрь "Бер мәл санаторийҙа..."** (Н.Ғәйетбай), комедия
**15 декабрь ПРЕМЬЕРА "РУДИ - NEVER OFF!"** (А.Абушахманов), эскиз. Башлана 17.00

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**8 декабрь "Карт кейәүҙәр, йәки Шомбай ҡоҙа!"** (Ф.Бүләков), фольклор комедия
**11 декабрь "Студенттар"** (Н.Ғәйетбай), лирик комедия
**12 декабрь "Ғәйфи ағай, өйлән давай!"** (Г.Зәйнәшева), комедия

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ЛЕНИН УРАМЫ...
## яңыса балҡыны



**Ошо көндәрҙә Өфөлә балалар, ҡунаҡтар һәм бала күңелле өлкән кешеләр Яңы йыл шәмдәре менән баҙлап ултырған әкиәти урам барлыҡҡа килеүен тамаша ҡылды. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бинаһы алдындағы майҙансыҡта Ленин урамына эленгән иллюминацияларҙы ҡабыҙыу тантанаһы үтте.**

"Хәҙерге балалар үтә бәхетле лә инде..." тип, үҙ алдына һөйләненеңкерәп, ейәнен етәкләп килеүсе олатай кешене күҙәтәбеҙ. Ейәненән бигерәк, ул үҙе ҡыуана шикелле бөгөнгө тамашаға. Тамаша булырын ишетеп, Дим районынан килгән бер апай ҙа фотоаппарат тотоп килеп еткән. Ҡар бөртөктәре булып кейенгән ҡыҙҙарҙың бейеүе унын күңеленә бигерәк хуш килде шикелле. "Был ҡыҙҙар араһында берәй туғанығыҙ бармы әллә?" тип һорамайынса булдыра алманыҡ. "Юҡ, матур бейейҙәр бит", тип яуап бирҙе апай. Өфө ҡалаһында үткән барлыҡ сараларҙа ла ҡатнашып, мәҙәни донъяла барған премьераларҙы күҙәтеп, күргәҙмәләрҙе һәр ваҡыт ҡарап бара икән. Бөгөн дә, юлдарҙың бысраҡ булыуына иғтибар итмәй, шатлыҡ өләшелгән ергә килеп етеүе тураһында бәйән итте. "Балаларҙың шатланғанын күреү - үҙе бер бәхет бит", - тине апай.

Күптәр ҡалабыҙҙың был урамын сит ил урамдары менән сағыштырып, оҡшашлыҡ табыр. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов та, алдан вәғәҙә иткәнсә, ҡала халҡына Европаса сағыу иллюминация эшләтеү хәстәрен күргән. Был сағыу уттар ошо ай аҙаҡтарында башланасаҡ Йәштәр командалары араһында шайбалы хоккей буйынса донъя чемпионатын ҡаршылауға әҙерлек эштәренең бер өлөшө лә икән.

Баш ҡаланың йөҙөк ҡашы, иң матур урамдарҙың береһе, Өфөбөҙҙөң үҙенсәлеген билдәләгән, туристарҙы ла, ҡунаҡтарҙы ла һәм, әлбиттә, урындағы халыҡты ла боронғо ла, шулай уҡ бейек, матур фасадлы заманса биналары менән дә таң ҡалдырған был урамда театрлаштырылған тамаша башланды. Кемдәр генә килмәгәйне унда! Ҡыш бабай, Ҡар бөртөктәре, Йондоҙсоҡ, Ҡар бабай һәм Ай ҡыҙы. Ығы-зығылы ла, тулҡынландырғыс та бер мәлдә, тамашаны күрәйем, тип, Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов үҙе лә килеп етте хатта. Әйткәндәй, бағаналарға эленгән сихри лампаларҙы ҡабыҙыу мәле етеү менән күктән ҡар бөртөктәре һибелде, әйтерһең, Ҡыш бабайға алдан ғариза биргәндәр... Бөгөнгө ни арба, ни сана булмаған һауа торошо ла тап шул мәлдә ҡыш яғына нығыраҡ ауышҡан һымаҡ булды һәм быны барыһы ла күрҙе... Кемдер, бәлки, гирляндаларҙы ҡабыҙыуҙарын оҙаҡ көтөүҙән талсығып, ялҡып та бөткәндер. Ни тиһәң дә, һәр кемдең дә яңы йылды тиҙерәк еткергеһе килә бит.

Иллә мәгәр, Ҡыш бабайҙың тылсымлы таяғын ҡулдарына тотоп, "Бер, ике, өс" тип, ергә өс тапҡыр туҡылдатҡан ике бәләкәй малайҙың - Өфөнөң йәш шахматсыһы Динар Әбелғужин һәм бер-нисә фән буйынса бөтә Рәсәй Гагарин олимпиадаһы еңеүсеһе, баш ҡаланың 3-сө мәктәбенең 4 синыфы уҡыусыһы Артур Хәйруллиндар өсөн оҙаҡ онотолмаҫлыҡ байрам булды был.

**Сараны Илгизәр БУЛАТОВ күҙәтте.**

*ИҒЛАН*

## ТӨБӘК ҺАУЛЫҠ ҮҘӘГЕ

**эшкә саҡыра:** бухгалтерҙар, экономистар, юристар, дистрибьюторҙар, инженер-техник хеҙмәткәрҙәр һәм башҡалар.

**8-960-383-98-84** телефоны буйынса мөрәжәғәт итергә.

АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР

# ҠУРАЙЫБЫҘҘЫ...

## фәнни нигеҙгә ҡороусы



**Заһир Исмәғилов исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһында мәшһүр ҡурайсы, йырсы һәм йәмәғәт эшмәкәре, БАССР-зың халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге БР дәүләт премияһы лауреаты Ғата Зөлкәфил улы Сөләймәновтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған саралар уҙғарылды.**

Ғата Сөләймәнов утыҙ йылдан ашыу ғүмерен театрға бағышлаһа ла, бер ваҡытта ла ҡурайын ҡулынан төшөрмәй. Хаҡлы ялға киткәндән һуң Өфө сәнғәт училищеһының ҡурай бүлегендә уҡыта. Үҙенә тиклемге данлыҡлы ҡурайсыларҙың юлын дауам итеп, ҡурайҙа уйнау оҫталығын ғына түгел, халыҡ йырҙарын туплай, ғилми-тикшеренеү эштәре лә алып бара. Ғата Зөлкәфил улы тарафынан 250 йыр һәм риүәйәттәр яҙып алына, шуларҙың 150-һен ул ҡурай өсөн нотаға һала. Был үҙенсәлекле милли уйын ҡоралына арналған ғилми хеҙмәттәре араһында бигерәк тә "Ҡурай", "Йырлау һәм музыка дәрестәре" китаптарын айырым билдәләп китергә кәрәк. Был ғилми эштәр буласаҡ ҡурайсыларҙы тәрбиәләү эшендә, артабан ҡурай дәрестәренең теоретик нигеҙен нығытыу өсөн бик ҙур әһәмиәткә эйә.

Ошо мәшһүр ҡурайсының юбилейына арнап уҙғарылған саралар араһында башҡорт традицион музыка ҡоралдарында башҡарыу оҫталығын камиллаштырыу курстары, республиканың махсус уҡыу йорттарында ҡурай, башҡорт думбыраһы, ҡылҡумыҙ менән шөғөлләнеүсе балаларҙың ижади конкурсы, "Традицион музыка сәнғәте: проблемалар һәм перспективалар" темаһы буйынса республика ғилми-ғәмәли конференция айырыуса ҙур урын алып торҙо. Был сараларҙа республиканың төрлө төбәктәренән йыйылған юғары, урта махсус уҡыу йорттары уҡытыусылары, студенттар, музыка һәм сәнғәт мәктәптәре уҡытыусылары, өҫтәмә белем биреү учреждениелары хеҙмәткәрҙәре ҡатнашты, һәр кем үҙенә кәрәкле мәғлүмәт һәм белемен камиллаштырыу тураһында сертификат алды. Ҡурайсыларҙың өлкән быуын вәкилдәре үҙ-ара аралашып, тәжрибә уртаҡлашһа, йәштәр иһә сәмләнеп ярышты. Ярыш һөҙөмтәләре иһә шулай булды: ҡурайҙа уйнау буйынса Өфө дәүләт сәнғәт академияһы студенты Айҙар Байтимеров, ҡыл-ҡумыҙҙа Ғ.Әлмөхәмәтов исемендәге гимназия-интернат уҡыусыһы Айзилә Мусина, думбырала Салауат музыка колледжы студенты Айнур Килмөхәмәтов лауреат дипломдарына лайыҡ булды һәм уйын ҡоралдары менән бүләкләнде. Бынан тыш, икенсе һәм өсөнсө урындарҙа Сибай сәнғәт колледжы, Салауат музыка колледжы, Әбйәлил районы Аҫҡар музыка мәктәбе, Өфө дәүләт сәнғәт академияһы тәрбиәләнеүселәре билдәләнде.

Конкурстың жюри рәйесе, З.Исмәғилов исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының кафедра мөдире Айрат Ҡобағошов шулай тип билдәләне: "Шул тиклем көслө рухлы ҡурайсы балалар килгәйне конкурсҡа, уларҙың сәхнәгә сығып, аяҡтарын ныҡлы баҫып, күкрәктәрен киреп, баштарын юғары күтәреп, иҫ киткес оҫталыҡ менән халыҡ йырҙарын башҡарыуын күреп, ишетеп, һоҡланып ултырҙыҡ. Был талантлы балалар академияның буласаҡ студенттары, милли уйын ҡоралдарын артабан популярлаштырыусы, музыкаль мираҫыбыҙҙы киләсәк быуынға түкмәй-сәсмәй еткереүсе булырҙар тип ышанабыҙ".

Өфө сәнғәт академияһы уҡытыусыһы Миләүшә Иҙрисова конференция һөҙөмтәләрен барлап, шулай тине: "Оло бер байрам кеүек уҙған сараларҙа традицион музыка сәнғәтенең проблемалары һәм перспективаларын барлау, борсоған мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшеү, киләсәктә башҡарыласаҡ эштәрҙе күҙаллау форсатын биргән ғилми-ғәмәли конференция мөһимлеге буйынса ҙур баһаға лайыҡ. Проблемаларҙы уртаға һалып һөйләшеү, борсоған мәсьәләләр буйынса фекер алышыу маҡсатында ойошторолған был йыйын үҙ маҡсатына өлгәште. Айрат Ҡобағошов Ғата Зөлкәфил улының өлгәсә билдәләнеүҙ булған ҡурай буйынса эш методикаһы һәм программаһы менән таныштырҙы. Сибай сәнғәт колледжы думбыра уҡытыусыһы Әлмирә Баймырҙина Сөләймәновтың тормош һәм ижад юлына ҡағылышлы тос материалдар йыйынтығын алып килгәйне. Киләсәктә милли уйын ҡоралдарын популярлаштырыу менән бер рәттән, ошо тарихи документтарҙы ла халыҡҡа еткереү, уларҙы баҫтырып сығарыу буйынса эштәр башҡарыласаҡ".

Әйткәндәй, Әлмирә Баймырҙина оҫраҡлы рәүештә барып юлыҡҡан тос мәғлүмәтле альбом Баймаҡ районы Төркмән ауылында крайҙы өйрәнеү түңәрәген етәкләгән мәктәп уҡытыусыһы Фәтиха Ғимал ҡыҙы Хөсәйенова тарафынан 9 йыл дауамында тупланған. Был материалдар Ғата Зөлкәфил улының педагог, артист, ғаилә тормошон сағылдырған фотолар, мәғлүмәттәр тупламаһы, матбуғат биттәрендә үҙе яҙған, уның тураһында баҫылған мәҡәләләр, Төркмән мәктәбенең пионерҙары-на яҙған хаттарынан тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғата Сөләймәновтың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән был саралар теҙмәһе унда ҡатнашыусылар өсөн файҙалы һәм йөкмәткеле булды. Йәштәр конкурстан көс-дәрт, рухи аҙыҡ алып ҡайтһа, оло быуын кешеләре фекерҙәштәре менән аралашыуҙан кәнәғәт ҡалды. Киләсәктә бындай рухлы саралар юбилей даталарына бәйле генә түгел, былай ҙа үткәрелһә ине, тигән теләктә ҡалабыҙ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

АТЫҢ КЕМ?

# ИМАНЛЫ ИСЕМ ЭЙӘЛӘРЕ



Динислам һәм Дания Сибайҙа йәшәй. "Йылдың иң мөбәрәк айы - Рамаҙанда тыуғанға күрә, малайыбыҙға дин һәм ислам тигәнде аңлатыусы Динислам исемен һайланыҡ", - ти Зөлфиә менән Морат Ҡәйепҡоловтар. Ә дан эйәһе тигән мәғәнәне йөрөткән Данияға исемде ағаһы ҡуш-тырған. Динисламдың балалар баҡсаһында оҡшатып йөрөгән ҡыҙыҡайы ошо исемле булған икән.

Ҡала гимназияһының 2-се класында белем алыусы Динислам тыныш, уңған егет. Ата-әсәһенең дә ҙур терәге ул: өйҙә - әсәһенә, тышта атаһына ярҙамлаша. Ҡулынан килмәгән эше юҡ үҙенең: иҙәнде лә "һә" тигәнсе һепереп ҡуя, булмәһен дә тиҙ генә йыйыштырып ала. Һеңлеһен дә онотмай: ата-әсәһе эш менән булған саҡта уның менән уйнай, йоҡларға һала, йәнһүрәт күрһәтә, саф һауаға алып сыға. Компьютерҙа уйнарға бик ярата ла, экран янына өйгә эштәрен теүәлләгәс кенә барып ултыра. Шулай уҡ дуҫтары менән төрлө уйындар ҡорорға ла бик әүәҫ. Ә бер йәшлек Дания - Ҡәйепҡоловтар өйөнөң йәме. Орсоҡ кеүек был ҡыҙыҡай бар ергә лә өлгәрә. Әсәһе күрмәгәндә шкафтағы әйберҙәрҙе "матурлай", ағаһының китаптарын "уҡый", компьютерҙа "эшләй". Ағаһының мәктәптән, атаһының эштән ҡайтыуын түҙемһеҙләнеп көтөп ала һәм уларға үҙе генә аңлаған телдә яңылыҡтарын һөйләй.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠАТЫНЫҢДЫ МАҠТАМА...

## никаһың боҙолоу шул булыр

Тауыҡ тауға менгәс, әтәс булып ҡысҡырған.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Һәр бәндә күрәһене күрмәй ҡалмаҫ - Кәрәк солтан, кәрәк император.

**(Мифтахетдин Аҡмулла).**

Был донъяла кемдер байлыҡ йыйып, кемдер, дан тип, эсе ҡарайған.

**(Рәшит Шәкүр).**

Ҡайҙан ғына килһә лә, аҡса еҫе ылыҡтырғыс шул.

**(Ювенал).**

Кешеләрҙе маҡтау -бөтөн кешелек бәхетенә өлөш индереү ул.

**(Джордж Адамс).**

Донъя ҡыҙырғансы, үҙ-үҙеңә ҡайт: хәҡиҡәт һинең үҙеңдең йөрәгеңдә.

**(Изге Августин).**

Ул тиклем үк етди булмағыҙ - һеҙ башҡаларҙан айырылып торһағыҙ.

**(Голда Меир).**

Тормошта бары тик бер генә бәхет бар: һөйөү һәм һөйөлөү.

**(Жорд Санд).**

Изгелек- ул һуҡырҙарҙы күрергә һәм һаңғырауҙарҙы ишеттерергә мәжбүр итә торған тел ул.

**(Каролина Бови).**

Минең бер ниндәй эшем булмағанда ла мин эшләүҙе дауам итәм.

**(Рут Габриэль).**

Мин үҙ фекере һәм инаныуы булған дошмандарҙы яратам.

**(Фридрих Великий).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер хужабикә кухня өсөн кәрәкле прибор һатып ала ла, уны инструкция китабы ярҙамында йыйырға маташа. Ләкин приборҙы йыйыу бик ҡатмарлы булып сыға. Түҙемлеге бөтөп, эште ташлап ҡуя хужабикә. Кәнә буйы эштә йөрөп ҡайтҡандан һуң кухняла бағы приборҙың эшләп ултырғанын күреп, аптырап ҡала. "Кем йыйҙы приборҙы?" тип аптырап һорай хеҙмәтсеһенән. "Беләһегеҙме, мин инструкция китабын уҡый белмәйем, шуға ла баш вата-вата маташтырғайным, килеп сыҡты", - тип яуаплай хеҙмәтсе..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 7 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5387
Заказ 4821